ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

16-22 октябрь (карасай) 2021

№42 (980)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

**БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:**

**Атай абруйы**



3

**Мәскәүҙәргә барып...**



7

**Ҡәйнә - килен мөнәсәбәттәре хаҡында,**

**йәки Кем кемгә ярарға тейеш?**



8-9

**Бала тыуғас...**



10

**ТВ-программа** 14

***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! 2022 йылдың беренсе яртыһы өсөн ПР905 индекслы "Киске Өфө" гәзитенә 731 һум 66 тингә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер матур ғына китаптарға лайыҡ буласаҡ. Почтальондар ҙа бүләкһеҙ ҡалмаясаҡ. Гәзит уҡыусыларыбыҙ "Киске Өфө" - бүләгем" акцияһына ҡушылып, баҫмабыҙҙы атай-әсәйҙәренә, мәктәптәргә, дуҫтарына яҙҙырып та бүләк итә ала. Бергә булайыҡ!***

***МӨХӘРРИРИӘТ.***

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

?

***Халыҡтың 90 проценты алкоголдән психик бәйләнештә, ти белгестәр. Ысынлап та, беҙҙең бар көнитмешебеҙ, ҡунаҡсыллығыбыҙ, йолаларыбыҙ, хатта үҙең эсмәгән кеше булһаң да, шул шешәле табындар ойоштороу хәстәрлеге менән бәйле бит. Һеҙ нисек уйлайһығыҙ?***

***Шайморат ТИМЕРБУЛАТОВ, Өфөләге Баймаҡ яҡташтар ойошмаһы рәйесе:*** Иҫерткес эсемлектәр ҡулланыу менән бәйле беҙҙә иң төп бәлә - алкоголизмдан бигерәк, көнкүрешебеҙҙә урын алған эскелек, тип уйлайым. Алкоголизмға бәйлелек сире илдәге халыҡтың 4-5 процентын, ә көнкүрештәге эскелек эшкә һәләтле 40 процент ир-егетте һәм 15 процент ҡатын-ҡыҙҙы тәшкил итә, тип яҙа белгестәр. Һеҙ һүҙ алып барған ана шул көнкүрештәге эскелек йәшәйешебеҙҙә нисәмә йылдар буйы ныҡ ҡына тәрәнгә тамыр ебәргән. Ысынлап та, туй, юбилейҙар, башҡа байрам табындары бик һирәк осраҡтарҙа араҡы-шарапһыҙ үтә. Йығылғанса эсеү ҙә булмаҫҡа мөмкин, әлбиттә, ләкин өҫтәл түрендә шешәләрҙең ниндәйе генә ҡуйылмай! Быны үҙенә күрә мәртәбә иҫәпләгән кешеләр ҙә бар. "Араҡыһыҙ байрамдың ни ҡыҙығы!" - тигәндәрен йыш ишетергә тура килә. Тимәк, был "тәртип" ғәҙәткә, мотлаҡ йолаға әүерелгән. Уйлап ҡараһаң, бөтә байрамдың "ҡыҙығы" әлеге шешәләргә ҡайтып ҡала һымаҡ килеп сыға түгелме?

Оят бит, нишләп байрам-тантаналарыбыҙҙы үткәреүҙә башҡа төрлө "ҡыҙыҡтар" уйлап сығара алмайбыҙ һуң? Эскеһеҙ туй өлгөләре бар бит, тик уларҙы төрләндереп, файҙалы, ҡыҙыҡлы варианттарын эшләп һалырға кәрәк социаль селтәрҙәргә. Халыҡҡа әҙер сценарийҙар ҙа бик кәрәк. Хәйер, уйынкөлкө, милли йолаларыбыҙҙы үтәүҙә нимәлер уйлап сығарыу ҙа кәрәкмәйҙер, халҡыбыҙ, айырыуса ағинәйҙәр хәҙер әллә күпме боронғо йола-традицияларыбыҙҙы тергеҙеп, бына тигән матур байрамдар үткәрә.

Шуныһы ҡыуаныслы: хәҙер йәштәребеҙ араһында эсеү һирәк күренә, айыҡ туйҙар ҙа үткәрелә. Йәш быуын вәкилдәре әүҙем рәүештә дин юлына баҫа. Мәҫәлән, мин Баймаҡ район Советы депутатымын да һәм минең округтағы Татлыбай, Абдрахман, Кәрешкә, Яңғаҙы ауылдарында имам-хатиб, мәзиндәр булып 25-40 йәштәрҙәге ир-егеттәр эшләй. Ауылдарҙағы башҡа егеттәр ҙә тырышып йәшәй: йорттар һалып инәләр, фермерлыҡ эштәрен асып, күпләп йылҡы, һыйыр малы, һарыҡ аҫрайҙар; ҡымыҙын, итен, һөтөн-майын һаталар. Хәҙер ауылда кеше аҡса эшләүгә күнелен һалып, баҙар иҡтисадына тамам яраҡлашты тип әйтергә була. Элекке һымаҡ араҡыға алданып йөрөмәйҙәр, һәр бер хеҙмәт төрө өсөн аҡсалата алалар. Хатта ҡайһы бер ауылдарҙа мал һуйыу өсөн дә аҡса түләйҙәр. Ауылдан ҡалаға машинаһында кеше ултыртып алып барһа ла, тракторы менән бесән сабып, тырматып бирһә лә бының өсөн аҡса ала. Ә эскерһеҙ ярҙамлашыу ҡайҙа, тиер берәү. Һуң ярҙам ана шул эш башҡарған кешенең үҙенә лә ғаиләһен, балаларын үҫтереү өсөн кәрәк бит, шуға ла эше өсөн кешегә хаҡын түләү фарыз.

Бының бер ояты ла юҡ, эшләгән кеше тейешле хаҡын алырға хаҡы бар, тик эшен эшләтеүселәр эсереп, араҡы менән ҡотолорға маташмаһындар ине. Ундай осраҡтар ҙа бар әле, ҡыҙғаныс. Был, йомшаҡ итеп әйткәндә, оятһыҙлыҡ, тип иҫәпләйем. Кешене күрәләтә эскегә этәреү була бит был. Айырыуса бесән мәлендә йыш күҙәтелә бындай хәлдәр. Йүнсел кеше йүнен күрә, айыҡ тормош ҡәҙерен белә, шуға ла аҡса эшләргә, ғаиләһен аҫрарға тырыша. Беҙҙең бәләкәй генә Яңғаҙы ауылында, мәҫәлән, 6 егет фермерлыҡ менән шөғөлләнә. Иген, бесән сәсә, күпләп йылҡы, һыйыр, ваҡ мал үрсетә. Юлай Тимербулатов тигән егетебеҙҙең 100 баштан ашыу йылҡыһы, 100 башлап һыйыр малы бар. Зөфәр Аслаев ит һатыу менән булыша, 30-лап баш йылҡыһы бар, 100-ҙән ашыу баш һарыҡ көтә, 20-ләп һауын һыйырының ағын эшкәртәләр. Вәсил Шәйәхмәтов менән Рәмил Байгилдин да тырыштар, күпләп мал көтәләр. Бөтәһе лә матур ғаилә ҡороп, балалар тәрбиәләйҙәр. Ауылдарҙағы ҡалған йәш ир-егеттәр ҙә бик тырыш. Тик дәүләт кенә үҙенең бурысын насар үтәй: яҡшы асфальт юлдар юҡ, газ үткәреү эштәре насар тора. Ошо уңайлыҡтарҙы булдырғанда, ситкә сығып киткән кешеләр кире ауылдарына ҡайтыр һәм ауылдарыбыҙ ҙа йылдам үҫеш алыр ине.

## УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ

# ГӘЗИТТӘГЕ ҺҮҘ КЕҮӘҺЕ...

## йөрәкте ҡуҙғытып ебәрә

**Һандар, интернет, тиҙ үҫешкән технологиялар заманында йәшәйбеҙ. Улар тормошобоҙҙоң бөтә өлкәһендә лә ныҡлап үҙ урынын ала бара. Шулай ҙа яңы технологиялар үҫеше айырыуса мәғлүмәт өлкәһендә йәшен тиҙлегендә тарала. Хәҙер һәр кем төбәк, ил сиктәрендә генә түгел, ә тотош донъя киңлегендә булып үткән ниндәйҙер ваҡиға хаҡында минут-сәғәт эсендә хәбәрҙар була. Бының өсөн тик телефон, ноутбукты ғына асып күҙ һалыу ҙа етә.**

(Дауамы 2-се биттә).



12+

УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ

# ГӘЗИТТӘГЕ ҺҮҘ ҠЕҮӘҺЕ...

## йөрәкте ҡуҙғытып ебәрә

(Башы 1-се биттә).

Ләкин хәбәр һәм мәғлүмәттәрҙең дә тиҙ онотола торғаны менән бер рәттән, тәрән анализлауҙы талап иткәндәре бихисап. Ә ундай мәғлүмәткә интернет селтәрендә күҙ һалып алыуға ҡарағанда, ҡағыҙҙа баҫылғанын уҡыу күпкә отошло. Гәзит-журналдар битендәге аҡ-ҡара менән яҙылғанды уҡыу кешене күпкә байыта, сөнки ул ҡапылғара, өҫтән генә уҡып сыҡмай, ә йәйләп, бөтә нескәлегенә төшөнөп, хәлдең бар айышына үтеп инеп байҡай. Шөкөр, Рәсәйҙә, шул иҫәптән Башҡортостанда ла яҙма баҫмалар донъя күреүен дауам итә. Күңелгә ятҡанын һайлап алып уҡырға, яҙҙырырға, туплап барырға мөмкинлек бар. Беҙҙең фатирға элекке кеүек үк тиҫтәләгән гәзит-журнал килә. Айырыуса үҙебеҙҙең телдә нәшер ителгәндәрҙе яҙҙырырға тырышам. Был, берҙән, ғаиләбеҙҙә буй еткереп килгән балаларға ла, милли матбуғатҡа ла файҙа. Бөгөнгө яҙмамда оҙаҡ йылдар дауамында яҙҙырған "Киске Өфө"гә анализ эшләргә ниәтләндем.

Гәзит өйөбөҙгә шәмбе көнө килә. Типография, ҡара буяу еҫе аңҡып торған гәзитте көтөп алам да иң беренсе тарихыбыҙҙы яҡтыртҡан биткә күҙ һалам. Ошо йылдар эсендә рубрика яҙҙамында ниндәй бай мәғлүмәткә эйә булыуымды бөтә яҡындарым белә, сөнки осрашҡан саҡта уларға мотлаҡ һөйләйем. Тәүҙә битараф ҡына тыңлаусылар ҙа хәҙер "Илһам ағай, әйҙә "Киске Өфө"лә уҡыған тарихи ваҡиғалар хаҡында һөйлә әле", тип үҙҙәре үк мөрәжәғәт итә. Бер мәғлүмәтен дә төшөрөп ҡалдырмайынса һөйләү өсөн ҡат-ҡат уҡып хәтергә һеңдерем һәм ошо рәүешле мейемдә эшләтәм. Был да минең өсөн хәтерҙе стимулда тотоу әмәлдәренең береһе.

"Киске Өфө"нө тағы ла нимә өсөн яратам: ул кешегә уйланырға мөмкинлек биргән мәҡәләләр баҫтыра, яңы фекерҙәр уята, күп төрлө уйҙар сорналышына сумдыра ла оҙайлы ваҡытҡа үҙ ҡамауында тота. Айырыуса берәй мәҡәлә сыҡҡандан һуң гәзит уҡыусыларының уны күтәреп алып үҙ фекерҙәрен еткереүе оҡшай. Бер үк ваҡиғаға төрлө ҡарашты уҡыу, уларға ҡушылып, гәзиткә уй-фекеремде яҙмаһам да, бәхәсләшеү мине рухи яҡтан ҡанатландырып ебәрә. Ҡатынға ла уҡыйым ошондай яҙмаларҙы һәм ҡайһы саҡта, фекерҙәр тура килмәгән осраҡта, хатта үпкәләшеүгә тиклем барып етәбеҙ. Бына ҡайҙа ул гәзиттәге һүҙ ҡеүәһе, халыҡтың йөрәген ҡуҙғытып ебәреү көсө. Үпкә тотоп күп йөрөмәйбеҙ, сөнки гәзиттәге сканвордҡа яуаптар эҙләү беҙҙе берләштерә һәм оло азарт менән һорауҙарҙы сисә башлайбыҙ.

Ҡартлыҡ - шатлыҡ түгел, сирләмәй тороп булмай, врачтарға ла йыш мөрәжәғәт итергә тура килә. Бына өс йылдай тирәһе "Киске Өфө"лә төрлө табиптар менән булған әңгәмәләрҙе уҡып, уларҙың өлкәһендәге һорау тыуһа, төбәп үҙҙәренә барам да ҡуям. Башҡортса ауыҙ тултырып хәбәр өндәшеүем күңелдәрен иретәме, әллә оло кешене ҡарамай сығарып ебәреү унайһыҙмы - әлегә тиклем береһенең дә кире борғаны юҡ. Бөтөнләй уларҙың дауаханаһына ҡарамаһам да, тыңлап, дауаларын яҙып оҙатып ҡалалар. Бына гәзиттең тағы ла минең өсөн бигерәк шәп яғы - үҙебеҙҙең милләт табиптары тураһында яҙыуы.

Ғүмерем буйы заводта эшләгән кеше булараҡ, интеллигенция вәкилдәре ҡайҙалыр юғарыла торған кеүек тойола ине. "Киске Өфө"нө уҡый башлағас иһә уларҙың да беҙҙең кеүек ябай, хисле, үҙ милләте өсөн янып-көйгән, ярҙамсыл, эшкә генә түгел, һүҙгә лә әүәҫ кешеләр икәнен аңланым.

Шиғырҙарҙы яратып уҡыйым. Яңы хикәйәләрҙе көтөп алам. Талантлы яҙыусы-шағирҙарыбыҙ күп булыуы һөйөндөрә. Йырсылар менән булған әңгәмәләр ҙә күңелгә яҡын. Йәштәргә айырым майҙан биреләүе айырыуса ҡыуандыра.

**Илһам ҒӘНИЕВ.**
**Өфө ҡалаһы.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

***Халыҡтың 90 проценты алкоголдән психик бәйләнештә, ти белгестәр. Ысынлап та, беҙҙең бар көнитмешебеҙ, ҡунаҡсыллығыбыҙ, йолаларыбыҙ, хатта үҙең эсмәгән кеше булһаң да, шул шешәле табындар ойоштороу хәстәрлеге менән бәйле бит. Һеҙ нисек уйлайһығыҙ?***

***Мәрфуға СӘЙФЕТДИНОВА, хеҙмәт ветераны:*** Хөрмәтле редакция, был һорауығыҙ менән мине күрәләтә унайһыҙ хәлгә ҡуйһығыҙ бит әле, сөнки мин уға яуапты ҡайҙандыр һауанан алып йә уйлап сығарып һөйләй алмайым; теләйемме, юҡмы, үҙем ғүмер иткән ауылым миҫалынан сығып ҡына яуап бирә алам (абстракт, дөйөм һүҙ һөйләү ғалимдарға килешһен инде ул). Шуға күрә тулы аноним шарты менән генә ризалашам был хаҡта яҙырға, сөнки ауылымды, уның унған, матур кешеләрен яратам, хөрмәт итәм - тыуған төйәгем яманатын һата алмайым. Әйтеүемсә, тырышып донъя көткән, итәғәтле балалар үҫтергән татыу ғаиләләр барлығына ҡыуанам, тик улар, үкенескә, ауылым абруйын күтәрә, уға төҫ бирә алмай шул әле. Ни өсөн тигәндә, эскелек әшнәләре лә байтаҡ беҙҙә.

Бындай ваҡытта, республика буйынса "Айыҡ ауыл" конкурстары барғанда, ул ниндәй эскелек, тиерһегеҙ. Дөрөҫ, бер йылды минең ауылым да ҡатнашты был сарала, тик исем өсөн, район хужаларына яҡшы күренер өсөн генә. Баҡса-ҡоймаларҙы буяп, урамдарҙы һепереп, бер төркөм бисә-сәсәне "Кәкүк сәйе"нә сығарып, фото-видео материалдар төшөрөп, матур, шыма итеп отчет-документ йүнәттеләр ҙә - ҡотолдолар. Ә бит эштәр беҙҙә маҡтанырлыҡ түгел: һаман булһын йәшереп, балалы ғаиләләр ауыҙынан өҙөп алынған аҡсаға арзан араҡы, көмөшкә һатыусылар сереп байып ята, уларға бер ниндәй ҙә ел-ямғыр теймәй, ә алкаштар улар йортона тәүлек әйләнәһенә йөрөп сыға. Ауыл хакимиәте башлығы булған ханым был хәлдәрҙе күрмәмешкә һалыша, улар менән "мөнәсәбәт боҙорға" теләмәй, йәнәһе... Һылыу ғына булып, кейенепяһанып контораһында тик ултыра йә район үҙәгенән ҡайтып инә белмәй. Ә бит эскелеккә ҡаршы көрәштә ауыл хакимиәтенә күп нәмә бәйле, башҡа ауыл биләмәләрендә тәртип булдыралар бит.

Эске табындары ойоштороу хаҡында. Ике йыл элек әхирәтемдең ҡыҙын кейәүгә бирҙек. Айыҡ туй үткәрергә булдыҡ. Мәжлес табынында араҡы тигән нәмә булманы, ләкин ... бер аҙ ултырғас, ҡоҙалар яғы бик күңелләнеп, ҡотлау һүҙҙәрен дә тыңлап тормай, шаулашып бейергә төшөп тә киттеләр. Баҡтиһәң, һиҙҙермәй генә сәйнүккә араҡы һалып алып һыйланып тик ултырғандар, имеш. Шулай һемәйттеләр беҙҙе, йәғни, көлкөгә ҡалдырҙылар. Нык ғәрләндек. Ярай инде, йәштәр хаҡына өндәшмәнек, уйынға һабыштырҙыҡ. Ә ҡайһы саҡ, киреһенсә, аңлы рәүештә эске табыны әҙерләргә тура килә. Мәҫәлән, быйтыр бер туған апайым менән еҙнәм уртансы улдарына өмә яһап өй күтәртте. Ҡулдары эш белгән унған ирегеттәр "һә" тигәнсе бураны күтәреп, шул көндө үк өйҙең башын ябып та ҡуйҙылар хатта. Күңеле булған апайым менән килене йүгереп йөрөп мунса яҡтылар, аш-һыу хәстәрләнеләр һәм өмәселәр киске табынға ултырғас, апайым район үҙәгенән барып алған "сифатлы" шешәләрҙе өҫтәлгә йәлләмәй теҙеп ҡуйҙы: "Әйҙәгеҙ, афариндар, эшләгән кеүек ашап-эсегеҙ" , - тип ҡеүәтләп үк торҙо. "Был бит - өмә, тырышып эшләнеләр, ултыртмаһаң - ғәрлеге ни торор!" - тип аҡлануандай итте аҙаҡ минең менән һөйләшкәндә, сөнки эскелеккә ҡарата минең мөнәсәбәтте яҡшы белә ине ул. Ләкин мин уны ғәйепләргә уйламаным да. Нисек инде, "йылтыр"ҙы ултыртмаһаң, көнө буйы ҡара тирҙәрен һыпырып, эскерһеҙ ярҙам иткән ауылдаштарҙы һанламау, хөрмәт итмәү генә түгел, апайым әйтмешләй, ысынлап та, ғәрлек булыр ине был. Унан ғына был ир-егеттәр эскесе булып китмәйәсәк бит. Теләгәне эсә, теләмәгәненә берәү ҙә көсләп ауыҙына ҡоймай. Бына шунан уйлап ҡарағыҙ инде: мин хаҡлымы, юҡмы? Үҙем дә белмәйем...

АҒИНӘЙ ҺҮҘЕ

# КӨҪӘҮ

Яҡты донъяла йәшәүебеҙ шуныһы менән дә ҡиммәтле: һәр кем юғалтҡандарын ҡайтарыу, күңел төпкөлө көҫәгәнен тормошҡа ашырыу теләге менән яна. Бының өсөн бары көслө ниәт һәм хыялыңдың төҫмөрләнешенән тыш, уның көҙгөләге кеүек сағылышы тәүшарт.

Күңел көҫәгән нәмәләр бихисап. Мәҫәлән, йорт һалыу, ғаилә ҡороу, һөнәргә эйә булыу, карьераңды үҫтереү. Йәки һаулыҡ мәсьәләһен алайыҡ. Һаулыҡҡа туймағандарҙың ҡайһылары аңлы килеш ихтыяр көсөн туплап, сәләмәт йәшәү рәүешен үҙ итә. Икенселәренең ышанысы - дарыуҙарҙа. Ыңғай һөҙөмтә бар икән, ниңә хупламаҫҡа? Ә инде гонаһ йыйылмаһы булған хәмерҙе ауыҙға алыусы бәгзеләр, тәү ҡарамаҡҡа һоҡланып бағырлыҡ батыр-матурҙар, үҙҙәре лә аңғармаҫтан, эскелекте, аҙғынлыҡты көҫәйҙәр.

Матур тормошҡа өлгәшәм тиһәң, үҙеңдәге, көнитмешеңдәге байтаҡ кире күренештәрҙән, ғәҙәттәрҙән, йолаларҙан арынырға кәрәк шул. Мәҫәлән, иҫәпһеҙһанһыҙ мәжлестәрҙең аҙағы хәйерлегә илткәне һирәк күренеш. Әммә мәжлес йыйыу хәҙер бер ни тормай. Әйткәндәй, мосолман элек үҙ ғүмерендә иҫем, никах, үлем түйҙарын ғына билдәләр булған. "Үлем туйына яһалған бер аҙым - ул тыуған көн үткәреү", тип аптыраҡайны Ислам университетында уҡыусы бер бала. "Һеҙ тултыра торған тоҡтарҙың иң яманы - ашҡаҙан", - тигән Бәйғәмбәребеҙ. Нәфсеңә баш булырға кәрәклеген аңғарта түгелме был? Харамдан тыйылғанға 900 дәрәжә сауап яҙылырын барыбыҙ ҙа беләксе.

Көҫәү кешенең аңынан тыш та тыуыуы мөмкин, әлбиттә. Юҡҡа сығасаҡмын, йә эскесегә әйләнәсәкмен, тигән мәҡсәтты ҡуйғандар юҡтыр ҙа үҙ алдына. Әммә кеше ҡайһы саҡта үҙ-үҙен тотошо, йәшәр өсөн ниндәй һуҡмаҡты һайлауы менән һәләкәтен яҡынайтыуын һиҙмәй ҙә ҡала. Һәр зарарлы ғәҙәттең әҙемтәһе кире була. Мәҫәлән, хеҙмәт һөймәйһең икән - юҡсыллыҡта йөшәйһең, яҡындарыңдың йәнен игәйһең икән - уларҙы үҙеңдән биҙҙерәһең. "Бынау әҙәм өйҙән-өйгә йөрөй ҙә ята, йорт-ерһеҙлекте көҫәй", - тигәндәрен ишеткән бар - был да кемгәлер ишара булыуы бар.

**Зөбәйҙә ҠӘЛӘМОВА.**

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостанда коронавирус йоҡторғандар һәм унан вафат булғандар буйынса яңы антирекордтар теркәлгән. 15 октябргә мәғлүмәттәр буйынса, Башҡортостанда 662 сир йоҡтороу осрағы раҫланған. Коронавирус осраҡтарының дөйөм һаны 75 488-гә еткән. Тәүлек эсендә вафат булғандар 35-кә арткан, хәҙер улар - 2 053 кеше. Бөтәһе 65 438 кеше һауыҡҡан, 812-һе - һуңғы тәүлектә. Вакцинаның беренсе компонентын 1 395 407 кеше алған; 1 246 100 кеше иһә ике компонентын да ҡаҙатҡан.

✓Төбәк етәксеһе Радий Хәбиров республика етәкселегендә яңы тәғәйенләнеүҙәр тураһында хәбәр итте. БР Башлығының 2021 йылдың 12 октябрендәге ҡарарына ярашлы, Урал Килсенбаев БР Башлығы хакимиәте етәксеһенең эске сәйәсәт буйынса беренсе урынбаҫары итеп тәғәйенләнде. Ауырғазы районында хакимиәт башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыу Арыҫлан Шаһретдиновҡа, Бүздәк районында муниципалитет менән ваҡытлыса идара итеү хоҡуғы Илнур Игдиевҡа, Стәрлетамаҡта хакимиәт башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыу быға тиклем Өфө ҡалаһы хакимиәте башлығы урынбаҫары булған Рөстәм Ғәзизовҡа йөкмәтелгән.

✓Республиканың ауыл хужалығы етештереүселәре 2021 йылдың туғыҙ айында иген һәм уны эшкәртеү продукттары 19 илгә экспортлаған. Башҡортостан игене Бельгия, Венгрия, Германия, Дания, Нидерландтар, Норвегия, Польша, Латвия, Литва, Ҡытай, Монголия, Төркиә илдәренә, элекке Союз республикалары Әзербайжан, Әрмәнстан, Беларусь Республикаһы, Грузия, Ҡаҙағстан, Ҡырғыҙстан, Үзбәкстанға оҙатылған. Йәмғеһе 75,96 мең тонна иген культуралары ситкә ебәрелгән. Россельхознадзорҙың БР буйынса идаралығы 2277 экспорт фитосанитар сертификаты биргән.

✓Социаль селтәрҙәрҙә һәм мессенджерҙарҙа эпидемиологик хәл һөҙөмтәһендә көҙгө каникулдар ваҡыты үҙгәртеләсәк, тигән хәбәр таралған. Башҡортостандың Мәғариф һәм фән министрлығы мәктәптәге көҙгө каникулдар ваҡыты күсереләсәк тигән мәғлүмәт ялған, тип белдерҙе. Каникулдар календарь уҡыу графигы буйынса үтәсәк. Сиректәр буйынса уҡыусыларға ул 29 октябрҙән 5 ноябрға тиклем дауам итәсәк. Триместрҙар режимында эшләгән мәктәптәргә сираттағы көҙгө каникулдар 15 ноябрҙән 20-һенә хәтле булаcаҡ.

**✓ Ир-ат, атай абруйы төшөүенең һөҙөмтәһе булған ошо күңелһеҙ күренештең тамырҙары ҡайҙа: дини йолалар үтәлмәүендәме, әллә милли йолалар таралыуындамы?**



АБВ



**Ниһайәт, беҙҙең илдә лә быйылдан башлап "Атайҙар көнө" билдәләнә башлаясаҡ. Күп кенә илдәрҙә үткән быуатта уҡ атайҙарҙың үҙ көнө бар. Ғаилә институтын нығытыу, балалар тәрбиәләүҙә атайҙың абруйын күтәреү маҡсатында октябрь айының өсөнсө йәкшәмбеһен "Атайҙар көнө" итеп үткәреү тураһында Рәсәй Федерацияһы Президенты В.В. Путин указға ҡул ҡуйҙы. Мин был көндө үткәреүгә бәйле өс юҫыкты билдәләр инем:**

# АТАЙ АБРУЙЫ



А. Был көндө үткәреү йәһәтенән ниндәй генә саралар комплексы төҙөмә, конкурстар, ярыштар, тантаналар, байрамдар үткәрмә, йомғаҡлауҙар яһап, бүләктәр таратма, һуңғы сиктә атайҙар фәҡәт үҙҙәре үҙҙәрен һаҡлап һәм яҡлап йәшәргә тейеш буласаҡ. Был дөрөҫ тә. Атайҙар көнөн үткәреүгә икенсе төрлө ҡараш булһа, ул сағында инде "Атайҙар көнө" календарь байрамы ғына булып ҡалыуы бар. Ни өсөн тигәндә, әгәр ҙә йәмғиәттә ир-ат үҙен яҡлап һәм һаҡлап йәшәргә әҙер түгел икән, йәмғиәт үҙе уҡ шундай ярҙамға мохтаж. Ни өсөн тигәндә, атай кеше иң беренсе нәүбәттә ир-ат булараҡ үҙен яҡлап һәм һаҡлап йәшәп өйрәнергә, бының менән йәмғиәттә абруй яуларға бурыслы. Лайыҡлы ир-ат юҡ икән, бөтә атрибуттары һәм институттары менән лайыҡлы атай ҙа юҡ. Йәғни һуңғы ваҡытта күпселек ғаиләләр атайһыҙ (тере булған килеш тә) ҡалған икән, ир-ат наҡыҫлығы проблемаһы хаҡында һүҙ алып барырға тейешбеҙҙер.

"Эшселәрҙе азат итеү эшселәрҙең үҙ эше булырға тейеш", тигән Карл Маркс. Остап Бендер иһә уның һүҙҙәренә шундай пародияһы менән яуап бирә: "Батыусыларҙың ҡотолоуы батыусыларҙың үҙҙәренең ярҙамында башҡарыла". Уның һүҙҙәрен үҙебеҙсә әйләндерһәк, шулайыраҡ килеп сыға: "Кеше башҡаларҙың ярҙамына ышанмайынса, фәҡәт үҙ көсөнә, үҙ аҡылына ғына таянып йәшәргә тейеш". Киреһенсә осраҡта ситтән килгән ярҙам ярҙамында ниндәйҙер проблемаһын хәл итеп өйрәнгән кеше артабан да ярҙамды ситтән көтөп ултырасаҡ, йәғни кешегә һалынып өйрәнәсәк.

Б. Ғаилә институтын нығытыу, бының өсөн атай абруйын күтәреү ниндәй йола-традициялар нигеҙендә башҡарылырға тейеш? Әйтәйек, совет осоронда "Ғаилә - йәмғиәттең ячейкаһы" тигән лозунг күтәрелеп, ир-ат менән ҡатын-ҡыҙҙың тиң хоҡуҡлылығы мәсьәләһе беренсе планға ҡуйылды. Бик хуп. Тик бөгөн килеп беҙ, әгәр ҙә ғаиләне нығытыу өсөн атай абруйын күтәрергә теләйбеҙ икән, мотлаҡ рәүештә милли һәм дини йолаларыбыҙға таянырға тейешбеҙҙер. Мин бында "милли" тигәндә осраҡлы рәүештә генә тәүҙә әйтмәнем. Ни өсөн тигәндә, дини йолалар менән йәшәй башлаусы ҡайһы бер йәштәребеҙ халҡыбыҙҙа элек-электән ғаиләлә ир-атҡа, ҡатын-ҡыҙға ҡарата шундайын күркәм мөнәсәбәткә ҡоролған йола-традициялар барлығын инҡар итергә тотона, белмәй йә онота. Күпселек осраҡта "Ир-ат ҡатынынан бер башҡа юғары булырға тейеш", тигән аңлау ғына тәүге планға ҡуйыла. Һүҙ юҡ, ир-аттың шулай булғаны яҡшы, тик был шарт әсәй булған заттың хоҡуҡ-иркен инҡар итеүгә ҡоролорға тейеш түгелдер. Хәйер, динебеҙ быны хупламай. Мин дини һәм милли йола-традицияларыбыҙ һаҡланған бик күркәм башҡорт ғаиләләрен беләм. Уларҙа атай-ир кеше - үҙ урынында, әсәй-ҡатын кеше - үҙ урынында.

Шул уҡ ваҡытта күп кенә ҡатындар ирһеҙ генә бала тәрбиәләүҙе өҫтөн күрә. Ир улар өсөн бала тыуғансы ғына кәрәк. Был хәл тәүҙә Европала модала ине, хәҙер яйлап-яйлап беҙгә лә күсә. Ир-ат, атай абруйы төшөүенең һөҙөмтәһе булған ошо күңелһеҙ күренештең тамырҙары ҡайҙа: дини йолалар үтәлмәүендәме, әллә милли йолалар тарҡалыуындамы? Әгәр ҙә атай абруйын күтәреү хаҡында һүҙ алып барабыҙ икән, ошондай күңелһеҙ күренештәрҙе лә урап үтә алмайбыҙ. Икенсенән, атай булған кеше үҙ абруйы хаҡында үҙе ҡайғыртмай икән, был мәсьәләне көндәр үткәреп, закондар сығарып ҡына хәл итеү мөмкин дә түгелдер. Йәғни, "Атайҙар көнө" атай абруйы күтәрелеүенең һөҙөмтәһе булараҡ ҡына иғтибарға лайыҡтыр.

В. "Атайҙар көнө"н үткәргәндә атайҙар һәм балалар, уларҙың мөнәсәбәте мәсьәләһенә лә айырым иғтибар булырға тейештер. Сөнки балаһы булған өсөн генә атай кеше - атай, әсәй әсәй тип атала. Мин, мәҫәлән, халҡыбыҙҙың телендә йөрөгән, ҡапыл ғына аңлап булмаған "Атайым һаҡал үҫтермәйенсә, мин мыйыҡ ебәрмәйем", "Атаәсәйеңдең ҡәберe убала булһын", йә булмаһа, тау халыҡтарының "Улыңа дошман бул, үҫеп еткәс ул һинең иң яҡшы дуҫыңа әүерелер" һымаҡ әйтемдәр хаҡында йыш уйланам. Ундай һүҙҙәрҙең мәғәнәләре бик тәпкә, йәғни аң аҫтына йәшерелгән, уларҙы өҫкә сығарғанда атай абруйы хаҡында ла байтаҡ хазиналарға юлығыр инек.

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

**?**

***Халыҡтың 90 проценты алкоголдән психик бәйләнештә, ти белгестәр. Ысынлап та, беҙҙең бар көнитмешебеҙ, ҡунаҡсыллығыбыҙ, йолаларыбыҙ, хатта үҙең эсмәгән кеше булһаң да, шул шешәле табындар ойоштороу хәстәрлеге менән бәйле бит. Һеҙ нисек уйлайһығыҙ?***

**Булат ИҪӘНБАЕВ, хеҙмәткәр:** Халыҡтың 90 проценты алкоголдән психик бәйлелектә йәшәй, тигәне хаҡтыр, килешәм. Йәғни, икенсе төрлө әйткәндә, был потенциаль эскеселәр булып сыға инде, тик алкоголиктарҙан улар шуныһы менән айырыла: эскелек упҡынына табан улар яйлабыраҡ, ләкин йылдан-йыл, айҙан-ай, көндән-көн яҡынлаша бара. Көнкүрештәге эскелекте ҡайһы берәүҙәр "мәҙәни" эсеү тип атауҙан да тартынмай. Йәнәһе, улар даими эсмәй, ә байрамдарҙа ғына, имеш. Ә байрамдарыбыҙ байтаҡ беҙҙең, тормош пандемия тип туҡрап тормай: туй, юбилейҙар, йортфатир туйлау, "йыуыу" һәм башҡаһы. Ҡайғы-хәсрәтте лә араҡы менән баҫыу ғәҙәте көслө әле йәшәйешебеҙҙә.

Тимәк, әллә ниҙә берме, әллә көн һайынмы - бының айырмаһы юҡ, ике осраҡ та эселек тип атала һәм уларҙың ахыры ла бер - алкоголизм. Байрамдарҙа ғына эсеп, башҡа көндәрҙә айыҡ булыу - ул айыҡлыҡ булмай. Бында бер ниндәй ҙә ярым-яртылыҡҡа урын юҡ, кеше йә эсә, йә эсмәй - икенең бере. Ошо йәһәттән "Айыҡ ауыл" республика конкурсы хаҡында ла бер кәлимә һүҙем бар. Унда ҡатнашыусы ауылдарҙа ғына түгел, призлы урын яулағандарында ла бит хатта 100 процент айыҡлыҡ юҡ, сөнки һәр ауылда ла үҙенең "стажлы һәм штаттағы" алкоголиктары бар. Шулай булғас, айыҡ ауыл буламы был? Һүҙ ҙә юҡ, матур, яҡшы башланғыс был, тик уның формаль сарага әйләнеп китеүенән һаҡ булырға кәрәктер, тим. Эскелек һаҙлығына батҡан йә шул юлға төшкәндәрҙе ваҡытында бәләнән йолоп алырға аныҡ ярҙам күрһәтелһен ине конкурс барышында.

Мәҫәлән, ундайҙарҙы наркология дауалау учреждениеларына һалып дауалауҙы һәр төрлө шартлылыҡтарҙан, волокитанан ҡотолдороу кәрәк дәүләт тарафынан, тип уйлайым. Кәрәк икән, мәжбүри дауалауҙы ла рөхсәт итһендәр, әйҙә. Дөрөҫөн әйткәндә, был йәһәттән дәүләт сәйәсәте халыҡ һаулығы һәм хәүефһеҙлеге иҫәбенә алкоголле эсемлектәр етештереү һәм уны һатыуҙан килем алыуға ғына йүнәлтелгән. Ә бит эскелектең таралыу сәбәптәренең береһе - спиртлы эсемлектәргә юлдарҙың һәр саҡ асыҡ, ҡул аҫтында, йәғни эргәләге магазиндарҙа булыуы, яҡын һәм еңел һатып алыу мөмкинлеге. Етештереүҙе сикләү тураһында һүҙҙең булыуы ла мөмкин түгел! Иҫәпләй башлаһаң, үҙебеҙҙең Башҡортостанда ғына ла күпме спиртлы эсемлек заводтары эшләй.

Ә алкоголле эсемлектәрҙең атамаларын ҡарағыҙ, әллә ҡайҙан саҡырып, йәлеп итеп тора: "Башҡортостан алтыны", "Ҡурай", "Ғаилә янында", "Ҡунаҡсыллыҡ", "Ҡайынлыҡ ожмахы", "Аксаков" араҡыһы" һ.б. Эскелеккә саҡырыусы реклама шәп, әйтерең бармы. Былдай мөхиттә абсолют айыҡлыҡ өсөн көрәш алып барыу мөмкинме һуң инде. Ә бит бар Рәсәйҙә ундай хәрәкәт - собриология. Күптәрҙең ул турала ишеткәне лә юҡтыр һәм был ғәжәп тә түгел, сөнки ул тап баяғы "мәҙәниле" эскелеккә ҡаршы йүнәлтелгән булһа ла, үкенескә, илдәге алкоголләштереү шарттарында әлегә тиҙлек йыя алмай, нигеҙҙә теория рәүешендә генә йәшәргә мәжбүр. Әлеге күпселек, йәғни "мәҙәни" эсеүселәр хата ҡараштарынан арынып, айығып, бер ниндәй һылтау, сәбәптәргә ҡарамайынса, тамсы ла эсмәҫкә тигән ҡарарға килеп, тулыһынса айыҡ тормошҡа күсмәйенсә, эскелекте еңеү мөмкин түгел.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Журналистика өлкәһендә бирелгән Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге Хөкүмәт премияһына түбәндәгеләр лайыҡ булды: "Бәрәкәт" журналын ойоштороусы Даян Мәжитов, "Тамыр" телеканалы мөхәррире Татьяна Никитина, "Башҡортостан" гәзитенең үҙ хәбәрсеһе Кәримә Усманова.

✓"Берҙәм Рәсәй"ҙең Башҡортостандағы башҡарма комитеты ҡарамағындағы колл үҙәге 65 йәштән өлкән граждандарҙың һәм хроник сирлеләрҙең ғаризаларын йәнә ҡабул итә башланы. Ғаризалар "Берҙәм Рәсәй" ирекмәндәр үҙәгенең берҙәм телефонына: 8-800-201-89-03 эш көндәрендә иртәнге сәғәт 9-ҙан киске сәғәт 6-ға тиклем ҡабул ителә. Мөрәжәғәт яһаусының теләге буйынса волонтер исемлектә күрһәтелгән магазинға йәки дарыуханаға бара аласаҡ. Аҙаҡтан аҡса сығымы чек буйынса кире ҡайтарыласаҡ. Бынан тыш, автоволонтерҙарололарҙы вакцина яһатыу өсөн поликлиникаға алып барырға ярҙам итәсәк.

✓Иҡтисади үҫеш министрлығы 2021 йылдың аҙағына хәтлем ҡиммәтләнергә тейеш тауарҙар исемлеген баҫтырып сығарҙы. "Известия" гәзите мәғлүмәттәре буйынса, инфляция 2020 йылдың декабренә 7,2 процент була. Айырыуса бензин, төҙөлөш материалдары, тәмәке һәм тукымаларға хаҡ артыуы көтөлә. Эксперттар фекеренсә, аҙыҡ-түлеккә ҡарамаған тауарҙар 6,8 процентҡа ҡыйбатлана. Аҙыҡ-түлеккә килгәндә, 2021 йылдың декабренә уның хаҡы 6,6 процентҡа арта.

✓2021 йылда "Башавтотранс" предприятиеһы республика бюджеты аҡсаһы иҫәбенә 2,1 миллиард һумға 220 автобус һатып алды. Бөгөнгә 120 Вектор Next, 60 НЕФАЗ предприятие балансына күсерелде. Республика көнө байрамы алдынан Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров "Башавтотранс" дәүләт унитар предприятиеһының транспорт предприятиелары директорҙарына НЕФАЗ маркалы 60 автобус аҫҡысы тапшырҙы.

✓Учалы районында шул төбәктә йәшәүсе 58 йәшлек ир ҡулға алынған. Хоҡуҡ һаҡлаусылар уны Ыҫыҡкүлдәге аҡҡоштар ғаиләһен үлтереүҙә шик аҫтына алған. Һунар итеүгә тыйылған ҡоштарҙы атыуға ҡарата ир яуапҡа тарттырыласаҡ. "Башинформ" агентлығы октябрь айы башында атып үлтерелгән ыҫылдаҡ аҡҡоштарҙы урындағы халыҡ табып алыуҙары тураһында хәбәр иткәйне. Ауыл кешеләре браконьер хәрәкәт иткән автомобилдә аҫылҡауҙа ла ярҙам иткән.

✓ *Ремонт-төҙөкләндереү эштәре сиктәрендә һәйкәлдең нигеҙен, ярын, күҙәтеү майҙансығын һәм ҡоймаларын нығытыу планлаштырыла. Һәйкәлде демонтажлауға ҡарамаҫтан, уны бер ҡайҙа ла алып китмәйәсәктәр.*



ҠЫҪҠАСА

# САЛАУАТ ЮЛАЕВ ӨФӨЛӘ ҠАЛА!

✓**Өфөлә Салауат Юлаев һәйкәлен реставрациялауға әҙерлек эштәре дауам итә.** Муниципалитет объектты һаҡлау буйынса эштәр башҡарыуға проект документацияһы эшләй, был уны ремонтлауҙы күҙаллай. Шул уҡ ваҡытта уның архитектура йөҙө үҙгәрешһеҙ ҡаласаҡ. Ремонт-төҙөкләндереү эштәре сиктәрендә һәйкәлдең нигеҙен, ярын, күҙәтеү майҙансығын һәм ҡоймаларын нығытыу планлаштырыла. Проектҡа ярашлы, һәйкәл һәүерташ-көлһоу (һоро) төҫкә буятыласаҡ (RAL стандарты буйынса №7015). Һәйкәлде демонтажлауға ҡарамаҫтан, уны бер ҡайҙа ла алып китмәйәсәктәр, ә постаменттың уң яғына урынлаштырасаҡтар, реставрация эштәре лә шунда уҡ, майҙан территорияһында башҡарыласаҡ. Санкт-Петербургтан тарихи-мәҙәни дәүләт экспертизаһы һығымтаһы алынған һәм Башҡортостан Республикаһының Мәҙәни мираҫ объекттарын дәүләт һаҡлауы буйынса идаралыҡ менән килешенгән. Әлеге ваҡытта смета хаҡын билдәләүҙең дөрөҫлөгөн тикшереү буйынса документтар пакеты әҙерләнә.

✓**Республикала киҙеүгә (грипҡа) ҡаршы прививка кампанияһы бара. Төбәк Роспотребнадзорынан хәбәр итеүҙәренсә, әлеге ваҡытта 1 033 042 кеше вакцина ҡаҙатҡан, улар араһында 17 336 бала бар. Был республиканың дөйөм халҡының 25,6 процентын тәшкил итә.** Киҙеү киҫкен вирус инфекцияһы (ОРВИ) булып тора. Ул һауа-тамсы юлы менән тарала, ҡапыл башлана, тән температураһы 38 °С һәм унан юғарыраҡ була, организмға дөйөм интоксикация яһай, тын алыу юлдарын зарарлай. Киҙеү өҙлөгөүҙәр һәм үлем хәүефе менән янай. Быйылғы киҙеү миҙгеле яңы коронавируслы инфекция эпидемияһы менән тап килгәс, медиктар фекеренсә, киҙеүгә ҡаршы прививка яһатыу мөһим. Әгәр ҙә ике инфекция бер юлы йоҡһа, бының насарыраҡ эҙемтәләргә килтереүе мөмкин.

✓**Стәрлетамаҡ ковид госпитале бүлеге мөдире Таһир Нурисламов фекеренсә, Башҡортостан коронавируслы инфекция менән ауырыуҙың дүртенсе тулҡынының иң бейек нөктәһенә барып еткән.** 60 йәштән өлкәндәр үтә ҙур хәүеф аҫтында тора. "Йәштәрҙең организмы ныҡ, сиргә ҡаршы көрәшкә һәм тергеҙеүгә көстәре бар. Тик, йылдар үтеү менән һаулыҡ наҡыҫая, кеше яңынан-яңы ауырыуҙарға дусар була. Өлкән йәштәге пациенттар ярҙамға йышыраҡ мохтаж һәм коронавирус менән зарарланыуҙы ауыр кисерә", - тип хәбәр итте Таһир Нурисламов. Табип фекеренсә, иммунлашыу менән яһалма иммунитет булдырыу, үҙҡурсаланыу режимын һаҡлау, кешеләр менән аралашыуҙы кәметеү бик мөһим булып тора. "Был зарарланыу сылбырын өҙөргә мөмкинлек бирәсәк. Контакт мәлендә, һөйләшкәндә һулап сығарған һауала һыу бөрсөктәренә вирус эләгеп сыға, һулағанда иһә үпкәләр зарарлана. Үҙҡурсаланыу ауырыу йоҡтороуҙан һаҡлаясаҡ", - тип һыҙыҡ өҫтөнә алды Таһир Нурисламов.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# "АЛҒА, БАШҠОРТОСТАН!" ПОЕЗЫ - МӘСКӘҮҘӘ



**"Торатау" конгресс-холында Республика көнөнә арналған тантаналы ултырышта Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров видеобәйләнеш режимында Мәскәү метрополитенының Өфө ҡәлғәһенә нигеҙ һалыныуҙың 450 йыллығына арнап ебәрелгән "Алға, Башҡортостан!" поезына старт бирҙе.**

Ун вагондан торған состав республиканың милли стилендә биҙәлгән һәм 1930 йылда Мосметро төҙөүҙә Башҡортостан халҡы ҡатнашҡан Сокольники линияһында йөрөйәсәк. Ул ваҡытта төҙөлөшкә иң ҙур отряд - 5 мең самаһы кеше - Краснокама районының Николо-Березовка ауылынан килә. Ә метрополитендың беренсе сираты төҙөлөшөндә эшләүселәрҙең һәр 15-се һе Башҡортостандан була.

- Мин Мәскәү ҡалаһы мэры Сергей Собянинға һәм метрополитен етәкселегенә Башҡортостандың брендлы поезын булдырыу инициативаһын хуплағандары өсөн рәхмәтлемен. Был состав - баш ҡала метроһының тармаҡтарын төҙөүҙә ҡатнашҡан меңдәрсә яҡташыбыҙға ихтирам билдәһе, - тип һыҙыҡ өҫтөнә алды Радий Хәбиров. - Беҙ мәскәүҙәр төбәгебеҙ тураһында күберәк белһен һәм уларҙа беҙгә килеү теләге тыуһын өсөн поезды республиканың тәбиғәте, тарихы, иҡтисады һәм мәҙәниәте тураһындағы мәғлүмәт менән тулыландырырға тырыштыҡ.

Әйткәндәй, Сокольники линияһының оҙонлоғо 44,1 километр. Унда Мәскәү метрополитенының иң күп станциялары урынлашҡан (26). Тәүлегенә пассажирҙар ағымы уртаса 962 мең кеше тәшкил итә.

# ӨЛКӘНДӘР ӨЙҘӘ УЛТЫРҺЫН!



**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров коронавирус таралыу хәүефенә бәйле юғары әҙерлек тәртибе тураһындағы указға сираттағы өҫтәмәләрҙе раҫланы. Уға ярашлы, 65 йәштән өлкәндәргә һәм хроник сирҙәргә дусар булыусыларға 13 октябрҙән алып мәжбүри үҙҡурсалау режимы индерелә.**

Был граждандар аҙыҡ-түлек, дарыуҙар һатып алыу, медицина учреждениеларына мөрәжәғәт итеү (быға COVID-19-ға ҡаршы вакцина үтеү ҙә инә), банктарға, элемтә салондарына, баҡсасылыҡ ширҡәттәренә, дачаларға, ҡала ситендәге йорттарға һәм зыяраттарға барыу өсөн иртәнге сәғәт 11-ҙән төшкө сәғәт 1-гә тиклем ваҡыт менән файҙалана ала. COVID-19-ға ҡаршы вакцина ҡаҙатыу тураһында "Дәүләт хеҙмәттәре" порталы аша алынған электрон йәки ҡағыҙ сертификат, алты ай дауамында коронавирус менән сирләү тураһында белешмәһе булыусыларға был сикләүҙәр ҡағылмай. Үҙҡурсаланыу режимы эш урынында мотлаҡ булыу талап ителгән һаулыҡ һаҡлау хеҙмәткәрҙәренә, власть органдарында эшләүселәргә, етәкселәргә ҡағылмай. Уларҙа үҙҙәре менән паспорттары һәм указға өҫтәмәләге форма буйынса белешмәһе булырға тейеш. Эш биреүселәргә 13 октябрҙән алып 65 йәштән өлкән һәм хроник сирҙәре булған хеҙмәткәрҙәрҙе ситтән тороп эшләүгә күсерергә тәҡдим ителә.

Муниципалитеттар үҙҡурсалау режимында булыусыларға, инвалидтарға, һаулыҡтары яғынан мөмкинлектәре сикләнгәндәргә, яңғыҙ йәшәүселәргә ярҙам итә торған ирекмәндәр төркөмдәре булдырырға һәм эшмәкәрлеген тәьмин итергә тейеш. Уларҙың эше Башҡортостандың Ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығы булдырған Координациялау үҙәге менән йәнәшә барырға тейеш.

# ЯҢЫРТЫЛҒАН КОНСТИТУЦИЯ



**11 октябрҙә "Башҡортостан Республикаһы Конституцияһына үҙгәрештәр һәм өҫтәмәләр индереү тураһында" БР Законы ғәмәлгә инде.**

БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙың матбуғат хеҙмәтендә аңлатма биреүҙәренсә, төп законға илһөйәрлек тәрбиәләү, традицион ғаилә ҡиммәттәрен, Башҡортостан халыҡтарының мәҙәни үҙенсәлектәрен һаҡлауға йүнәлтелгән социаль гарантияларҙы нығытыусы мөһим положениелар индерелгән. Документта балалар һәм йәштәрҙең үҫеше өсөн, сәләмәтлеккә ҡарата яуаплы мөнәсәбәт булдырыу өсөн шарттар тыуҙырыу хаҡында тезистар нығытылған. Тарихи хәҡиҡәтте яҡлау, идара итеүсе властың берҙәмлеген тәьмин итеү, урындағы үҙидаралыҡты үҫтереү мөһим йүнәлештәр булараҡ иғлан ителә. Конституцияның яңырыуы менән бәйле республика закондарын шуға ярашлы ғәмәлгә ашырыу буйынса етди эштәр тора. Мәҫәлән, республиканың Милли ҡомартҡылары дәүләт реестрының хоҡуҡи нигеҙен булдырыу мәсьәләһе. "Башҡортостан Конституцияһына ата-бабалар хәтерен, быуындар алмашыныу һәм уларҙың теләктәшлеген һаҡлау тураһында положениелар индерелде, - ти республика парламенты башлығы Константин Толкачев. - Шуның менән бәйле республикала рухи, мәҙәни, тарихи һәм тәбиғи ҡомартҡыларҙың уникаль объекттарын үҙ эсенә алыусы Милли мираҫ дәүләт реестры булдырыласаҡ. Реестрға шул иҫәптән "Шүлгәнташ" мәмерйәһе, "Ирәмәл" тәбиғи паркы, Мораҙым тарлауығы, башҡорт шихандары ла индереләсәк.

Конституцияла республика Башлығы вазифаһына кандидатлыҡҡа ҡарата талаптар нығытыла - 30 йәше тулған, РФ территорияһында даими йәшәүсе һәм сит ил гражданлығы, унда йәшәү ниәте булмаған, йәки сит илдә даими йәшәү хоҡуғы биреүсе документҡа эйә булмаған Рәсәй гражданы республика Башлығы була ала. Республика Башлығына Рәсәй сиктәренән тыш сит ил банктарында иҫәп асыу һәм тотоу, унда аҡса һәм ҡиммәтле әйберҙәр һаҡлау тыйыла.

Башҡортостан парламенты вәкәләттәре киңәйтелә. Премьер-министр урынбаҫары вазифаһына тәғәйенләүҙе раҫлау Дәүләт Йыйылышы ҡарамағына индерелә. Хәҙер республика Башлығы тарафынан вице-премьерҙар Премьер-министр тәҡдиме менән Дәүләт Йыйылышы ризалығы буйынса тәғәйенләнәсәк. Индерелгән төҙәтеүҙәр дәүләт идара итеү өлкәһендә кадрҙар мәсьәләһен хәл итеүҙә парламент ролен көсәйтәсәк, ти Константин Толкачев. Яңыртылған Конституцияның ҡайһы бер положениелары 2023 йылдың 1 ғинуарынан көсөнә инәсәк. Был шул иҫәптән 2023 йылдың 1 ғинуарынан ҡыҫҡартыласаҡ республика Конституция Суды урынына Конституция Советы булдырыуға ҡағыла.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Ҡала Советының икенсе ултырышында депутаттар Өфөнөң Октябрь районында урынлашҡан яңы урамға Замандаштар атамаһын бирергә ҡарар ҡабул итте. Урамдың оҙонлоғо 500 метр тәшкил итә. Бынан тыш, йыйылышта Баязит Бикбай урамындағы скверҙы Маршал Жуков исемендәге тип атанылар.

✓Өфө ҡала Советы депутаттары Башҡортостандың баш ҡалаһы хакимиәте башлығының мәғлүмәт-аналитика бүлеге һәм матбуғат хеҙмәте һорауҙары менән шөғөлләнгән урынбаҫар вазифаһын бөтөрөргә ҡарар ҡылды. Мэрияның матбуғат хеҙмәтен, мәғлүмәт-аналитика бүлеген берләштереп, Киң мәғлүмәт саралары менән мөнәсәбәт итеү идараһына күсерҙе. Уны Өфө ҡалаһы хакимиәте башлығының гражданлыҡ йәмғиәте, кадрҙар тәьминәте, йәштәр сәйәсәте һәм спорт менән мөнәсәбәт буйынса урынбаҫары етәкләйәсәк.

✓Ҡала мэры урынбаҫары вазифаһын башҡарыусы Артур Ғафаровтың тәҡдиме буйынса депутаттар биләмәләрҙе комплекслы үҫтереү һорауҙары буйынса вице-мэр вазифаһын индерҙе һәм биләмәләрҙе комплекслы үҫтереү, төҙөлөш эшмәкәрлеген координациялау идаралыҡтарын булдырҙы. Ултырышта ҡала төҙөү контроле һәм рөхсәттәр биреү бүлеген Өфө ҡалаһы хакимиәте структураһынан алыу, уның функцияларын Төҙөлөш эшмәкәрлеген координациялау идаралығына күсереү тураһында ҡарар ҡабул ителде.

✓Өфө районының Миловка ауылында "Өкөкәй" балалар баҡсаһы эшләй башланы. Баш ҡалаға яҡын урынлашҡан район йылдан-йыл үҙенә яңы йәшәүселәрҙе тарта. Әле районда 100 меңдән ашыу кеше иҫәпләнә. Һаны даими артҡан халыҡҡа йәшәү өсөн ҡулайлы шарттар булдырыу талап ителә. Өфө районы хакимиәте башлығы Вилорий Угаров әйтеүе буйынса был яңы учреждение Миловка ауылындағы 1,5 йәштән 7 йәшкә тиклем сабыйҙарҙың балалар баҡсаһына сиратын тулыһынса юҡҡа сығара.

✓Башҡортостанда "Төҙөлөш өсөн ер" хеҙмәте тулыландырыла: 11 ҡалалағы 40 участка тураһында мәғлүмәт индерелгән. Шуларҙың алтауһында төҙөлөш башланған. Сервиста 21 ҡала, Өфө һәм Стәрлетамаҡ райондарындағы ер участкаларын теркәйәсәктәр. Был хеҙмәт шәхси һәм күп фатирлы йорттар һалыу өсөн яраҡлы буш урындарҙы эҙләү өсөн август айында булдырылған һәм Асыҡ кадастр картаһында урынлашҡан.

**БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

ИҪКӘРТӘБЕҘ!

# ҺАҠ БУЛЫҒЫҘ: ҠОШ КИҘЕҮЕ



**БР Ветеринария идаралығы начальнигы Азат Салауат улы ЙЫҺАНШИН Башҡортостан Республикаһы территорияһында сусҡаларҙың африка тағуны һәм тиҙ таралыусы ҡош киҙеүен йоҡтороу хәүефе һәм был сирҙәрҙең таралыуына юл ҡуймау саралары хаҡында хәбәр итте.**

Билдәләнеүенсә, Рәсәй Федерацияһында эпизоотик хәл көсөргәнешле булып ҡала килә. Көн һайын сусҡаларҙың африка тағуны, тиҙ таралыусы ҡош киҙеүе, бешмә, туберкулез һәм башҡа сирҙәрҙең яңынан-яңы сығанаҡтары теркәлеп тора. Мал һәм ҡош-ҡорт үлеме, ғәҙәттә, 98 процентка барып етә. Был ауырыуҙар йөшен тиҙлегелә таралыусан һәм уларға тиҙ бирешеүсән малдар яндырыу юлы менән генә юҡ ителә.

Былтыр ҡош киҙеүе беҙҙең республика сиктәренә ныҡ яҡынлашты. Сир сығанаҡтары күрше Татарстанда, Силәбе, Һамар, Һарытау өлкәләрендә теркәлде. 4 октябрҙә ветеринар хеҙмәткә республикабыҙҙың Туймазы районы Бишкурай ауылындағы "Алтын ҡаҙ" ҡаҙ фермаһында һәм уның ҡарамағындағы Николаевка күркә хужалығында ҡош-ҡорттоң күпләп үлеүе хаҡында хәбәр иттеләр. Ветеринария идаралығы хеҙмәткәрҙәре урынға барып тикшергәндән һуң Башҡортостан фәнни-производство ветеринария лабораторияһы тарафынан А штамлы ҡош-ҡорт киҙеүе диагнозы ҡуйылды. Ветеринария ҡағиҙәләре буйынса дәүләт ветеринария хеҙмәте һәм Туймазы район хакимиәте менән берлектә йоғошло сирҙең артабан республика буйлап таралыуына юл ҡуймау һәм бындағы сир сығанағын юҡ итеү буйынса ашығыс саралар күрелде. H5 тибындағы тиҙ таралыусан ҡош киҙеүе вирусы республикаға йылы яҡтан осоп килеүсе ҡоштар тарафынан таралған икәне асыҡланды.

6 октябрҙә Башҡортостан Башлығы Указы менән эпизоотик сығанаҡтар, хәүефле һәм күҙәтеү зоналары билдәләнде һәм карантин булдырылды. Туймазы районы территорияһында ҡош киҙеүе сығанаҡтарын юҡ итеү буйынса ғәҙәттән тыш ведомство-ара комиссияһы ултырышы үткәрелде. Инструкцияға ярашлы, сир сығанаҡтары һәм хәүеф янаған зоналарҙа 5 км радиустағы бөтөн йорт ҡош-ҡорто яндырылып юҡ ителде. Николаевка ауыл хакимиәтенә ҡараған 4 тораҡ пунктында урындағы халыҡтың 896 баш ҡош-ҡорто, Бишҡурай ауыл хакимиәте (Бишкурай, Ярмунса, Булат) ауылдарынан 530 баш ҡош-ҡорт тартып алып, юҡ ителде. Бындай саралар барышында "Алтын ҡаҙ" фермаһының 7 меңдән ашыу баш ҡаҙы һәм 2 меңдән ашыу күркә юҡ ителде. Шуныһы борсолоу тыуҙыра: киҙеү вирусы контролгә алыныу мөмкин булмаған ҡыр ҡоштары араһында ла таралып өлгөрҙө. Улар тәрлө урындарға күсеп йөрөгән ыңғайға яңынан-яңы сир сығанаҡтарына сәбәпсе буласаҡ.

***Тиҙ таралыусан ҡош киҙеүен булдырмау маҡсатында республика биләмәләрендә түбәндәге сараларҙы тәҡдим итәбеҙ:***

*1. Бөтөн төр хужалыҡтарҙа ҡош-ҡортто ирекkә сығармай тоторға һәм йорт ҡоштарының ҡырҙағы сит яҡтарҙан осоп килеүсе ҡоштар менән аралашыуына юл ҡуймаҫҡа.*

*2. Ит өсөн тәғәйенләнгән ҡош-ҡортто тиҙ арала һуя башларға.*

*3. Зыян күреүсе хужалыҡтарҙы Башҡортостан Республикаһы предприятиеләры иҫәбенә тулыландырырға.*

*4. Башҡа субъекттарҙан ҡош-ҡортто фәҡәт дәүләт ветеринария хеҙмәте менән килешеүҙән һәм ҡош киҙеүенә мониторинг тикшеренеүҙәрҙән һуң ғына килтерергә.*

*5. Ҡош-ҡорт еме өсөн сәнәғәт етештереүендәге ҡатнаш аҙыҡтарҙы ғына файҙаланырға.*

Бөгөнгө көн мәғлүмәттәре буйынса Рәсәй Федерацияһының 35 субъектында африка суска тағунының 210 сығанағы теркәлде, юғары ки-мәлдәге биологик һаҡ аҫтындағы "Мираторг - Белгород" сусҡасылыҡ комплексы ла зыян күрҙе. Сусҡа тағуны Башҡортостанға күрше Татарстан, Марий-Эл республикаларында, Һарытау, Һамар өлкәләрендә лә теркәлде. БР буйынса Россельхозназдор идаралығы менән берлектә республикалағы сусҡасылыҡ комплекстарында ветеринар ҡағиҙәләрҙе һаҡлау буйынса квартал һайын тикшереүҙәр үткәрелә. Башҡортостанда иң күп һанда сусҡа аҫрауысы комплекстар Благовар (170 мең баш), Шишмә (87 мең), Бүҙәк (83 мең) райондарында урынлашҡан, был республика буйынса дөйөм күрһәткестең 85 процентын тәшкил итә, шуға күрә был райондар туу сиратта уҙ биләмәләрен тулы кимәлдә һаҡлау хәстәрлеген күрергә тейеш.

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Республика буйынса Россельхознадзор белдереүенсә, Туймазы районындағы ҡош киҙеүе буйынса карантинлы зонанан ветеринар оҙатыуы документтарһыҙ ҡошсолоҡ продукцияһын сығарырға уйлағандар. Был факт Бишкурай ауылының карантин посында асыҡланған. Полиция хеҙмәткәрҙәре тикшерергә туҡтатҡан автомобилдә полиэтилен тоҡтарға тултырылған 100 кг ҡаурый, 10 кг ҡаҙ тәпәйҙәре һәм баштары булған. Россельхознадзорҙың республика буйынса идаралығының эске ветеринар күҙәтеүе бүлегенең дәүләт инспекторы тарафынан был табылдыҡҡа ҡарата административ хоҡуҡ боҙоу тураһында эш асылған. Ветеринар документһыҙ был продукция артабан юҡ ителеүгә тартып алынған.**

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# АҒИҘЕЛГӘ БАҪМА ТҮГЕЛ... яңы күпер һалдым!



**Ағиҙел йылғаһы аша һалынған яңы күпер төҙөлөшө финиш һыҙығына сыкты - уга асфальт түшәлә башланы.**

Юлға ике ҡатлам һалына - уның аҫтағы өлөшө алты сантиметр ҡалынлығында ваҡ тығыҙ асфальт-бетон ҡатнашмаһынан торһа, өҫкө өлөшө биш сантиметр ҡалынлығындағы йәбешкәк полимер-битумдағы ҡомташ-мастика асфальт-бетон ҡатнашмаһынан буласаҡ. Юлсылар билдәләүенсә, был юлда колея барлыҡҡа килтермәй һәм юл ҡатламын ҡулланыуҙың температура диапазонын киңәйтеү мөмкинлеге бирә.

Юлдың һәр ҡатына 1500-әр тонна ҡатнашма кәрәк. Һауа шарттары уңайлы торғанда, был эш аҙна уртаһында тамамланасаҡ һәм күперҙең тирә-яғы төҙөкләндереләә, шулай уҡ яҡын арала ҡоймалар, яҡтылыҡ һәм видеокүҙәтеү системалары ҡуйыла башлаясаҡ. Комплекста эштәрҙе тулыһынса октябрь һуңында тамамлау күҙаллана.

ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ

# ҠАЛА "ҮПКӘҺЕ"... таҙа булһын!



**Ғәҙәттә, баш ҡалала йылы бирһәләр, көндәр йылыта ла ебәрә. Әлеге матур һауа торошона ҡарап, күҙ генә түгел, күңел кинәнһә лә, алда беҙҙе ниҙәр көтәһен бер Хоҙай ғына белә. Ямғыр-ҡары ла ваҡытында яуып торһа, ни әйттең дә бит, ҡайһы берҙә улары ла характер күрһәтеп ала. Әммә баш ҡаланың коммуналь хужалыҡ һәм төҙөкләндереү хеҙмәте хеҙмәткәрҙәре көҙгө-ҡышҡы миҙгелгә әҙер. Был хаҡта ҡала хакимиәтендәге сираттағы оператив кәңәшмәлә идаралыҡ начальнигы Рөстәм Хәмитов белдерҙе.**

Көҙгө-ҡышҡы миҙгелгә 413 берәмек махсус техника әҙерләнә, улар барлығы 21 миллион квадрат метр тәшкил иткән урам-юл селтәрен таҙалыҡта һәм тәртиптә тоторға тейеш. Техниканың ҡышҡы шарттарҙа эшләүен тикшереү өсөн махсус комиссия эшләй. Йылдағыса, ҡар ҡапыл күп яуған мәлдәрҙә ярҙамға ҡаланың эре төҙөләш компаниялары һәм яҡын райондарҙың ауыл хужалығы техникаһы саҡырыласаҡ.

Иҫегеҙҙә булһа, Өфөлә "Бөрәүҙе ҡырҡһаң - икене ултырт", тигән девиз менән ағас ултыртыу өмәләре үтә ине. Был йола һаман да дауам итә. Быйыл иһә уны "кала үпкәһе" таҙа булһын", тип тә атарға булыр ине, сөнки ағастар беҙ һулаған һауаны таҙартып тороусылар һәм был хәҙерге тажзәхмәт осоронда бигерәк тә актуаль. 25 сентябрҙән иғлан ителгән "Йәшел Башҡортостан" республика акцияһы сиктәрендә баш ҡалала 3638 ағас һәм 3538 ҡыуаҡ ултыртылған. Акция барышында 10 яңы аллеяға нигеҙ һалынған. Ленин районында "Йәшел ҡалҡан", Изгелек аллеяһы, Миләүшә аллея барлыҡҡа килһә, Дим районында - Дуҫлыҡ, Октябрь районында - Баласаҡ һәм Уҡытыусылар, "Нур" театры эргәһендә Рәсәй Прокуратураһының 300 йыллығы уңайынан Прокурорҙар аллеяһы барлыҡҡа килгән. Шулай уҡ Орджоникидзе районында район ойошторолоуҙың 70 йыллығы хөрмәтенә яңы аллеяға нигеҙ һалынған. Киров районында "Көмөш осор" һәм "Хәтер баҡсаһы" аллеялары, бер унайҙан Октябрь проспекты һәм Дан бульвары буйлап ҡырҡылған ҡарт ағастар урынына яңы йүкә һәм саған ағастары ултыртылған. Быйылғы ҡороloҡ һөҙөмтәһендә былтыр көҙгөһөн һәм быйыл яҙ ултыртылған ағастарҙың ергә ерегеп китә алмаған 10,4 проценты алмаштырылған.

Рөстәм Нил улы белдереүенсә, әле уҙғарылған "Йәшел Башҡортостан" акцияһы һөҙөмтәләре буйынса иң яҡшы йәшелләндерелгән территорияны асыҡлау буйынса конкурс үткәреләсәк. Әле уның положениеһы эшләнә, йомғаҡ килһе яҙ һйаласаҡ.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклеккә онотмағыҙ.**

## Сиҡан

**Йонсотоп сыҡҡан шешектәрҙе дауалау серҙәре түбәндәгесә.**

❖ Яңы сыҡҡан сиҡанды баш бармаҡ менән, йәки бөтә бармаҡтар менән ыуырға. Бынан алда ҡулды һабынлап йыуырға, одеколон йә спирт менән эшкәртергә кәрәк. Был массажды түнәрәк буйынса, ҡаты ғына баҫып көн дауамында эшләргә. Сиҡанға баҫҡанда ауыртһа ла массажды дауам итеү мөһим. Был ҡан йөрөшөн яҡшырта һәм шешек үҙенән үҙ юҡҡа сыға.

❖ Сиҡан "баш төрткән", тире саҡ ҡына ҡыҙарып торған саҡта үгәй инә үләне япрағын йәки ил япрағын йыуып, йомшартып, һырт яғы менән шешеккә ҡапларға кәрәк. Өҫтөнән бәйләп 3 сәғәт торорға. Шунан япраҡтарҙы кискеһен яңыға алмаштырып, иртәнгә тиклем ҡалдырырға. Икенсе көнөнә шешек һытыла һәм яра бысрактан таҙара. Уны йылы һыу, фурацилин йәки водород перекисы менән йыуып, ҡоро нәмә менән бәйләп ҡуйырға.

## Пневмония

❖ Ҡарағайҙың йәшел тубырсыҡтарын йыйырға һәм шуларға бал ҡойоп, 2-3 ай тәнәтергә. 2 килограмм тубырсыҡҡа 1 килограмм бал кәрәк була. Кәрәкле тиклем тотҡандан һуң уны ваҡ иләк аша һөҙөргә. Тамаҡ, ҡурылдай, үпкә ауырыуҙары булғанда был дауаны көнөнә 3-4 тапҡыр ризыҡланырҙан алда 1-әр ҡалаҡ ашарға. Пневмония менән сирләгәндең беренсе көнөндә сараны 3 тапҡыр сирек стаканлап эсергә. Икенсе көндә шулай уҡ 3 тапҡыр сироптың 20 миллилитрын эсергә. Артабан дауаланыуҙы дауам итеп, көнөнә 3 тапҡыр 1-әр ҡалаҡ ҡулланырға. Хәл 3-5 көндән яҡшыра.

## Ҡан баҫымы

❖ Юғары ҡан баҫымы булғанда 2-шәр ҡалаҡ арыҫлан ҡойроғо, шифалы валериананың онтаҡланған тамыры, әнис емеше, меңъяпраҡтан торған дауа эшләргә була. Йыйылманың 2 ҡалағына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға һәм 1 сәғәт тәнәтергә. Һөҙөргә һәм көнөнә 3-4 тапҡыр 1/3-әр стакан эсергә.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

*ЙОЛАНДАН ЙӨН ТАП!*



# БАШҠОРТ СЕМӘРЕ

Төрлө ҡатмарлыҡтарға ҡарамаҫтан, XX быуат алдынан ағас эшкәртеү эше башҡорт ауылдарында яҡшы ғына үҫешә. Быны ошо осорҙа, йә унан саҡ ҡына һуңғараҡ урындағы һәм үҙәк музейҙар фондтарында тупланған ағас әйберҙәрҙең күплеге лә дәлилләй. Өфө Губерна һөнәрселәр комитеты эш башҡарыусыһы Н.П. Ғәзизов биргән отчеттарҙа күрһәтелгән 1900 йылдарҙа үҫеш картинаһы күрһәтелә. Өфө губернаһының төньяғында Минзәлә һәм Бөрө өйәҙҙәрендә тәпән, биҙрә һәм "ваҡ-төйәк һауыт-һаба" эшләгәндәр. Өфө өйәҙенең урманға бай Бүләкәй-Көҙәй улысы Яңы күл, Башкиҙе, Терекле һ.б. ауылдарында ла һауыттар етештергәндәр. Кәлсер-табын улысында (Ибраһим, Юлыҡ, Аҡташ, Һабай, Ҡауарҙы, Тайыш, Ташасты, Мораҙ ауылдарында) бал өсөн батмандар эшләгәндәр. Урал алды халҡы уларҙы күпләп алған, сөнки ҡортсолоҡ яҡшы үҫешкән. Имәндәш, Аҡташ, Ташасты, Ҡауарҙы ауылдарында төрлө ҙурлыҡтағы тәпән һәм биҙрәләр эшләнгән. Тайыш ауылында биҙрә, ҡалаҡ, сүбәк һәм етен иләү өсөн тараҡтар эшләп һатҡандар. Ибраһим ауылында эйәр яһаусы, йылға буйында урынлашҡан ҡайһы бер ауылдарҙа ҡайыҡ оҫталары булған.

Көньяҡҡа табан етештерелгән әйберҙәрҙең һаны арта барған. Маҡар улысында ағас һауытһабаны бөтә ерҙә лә яһағандар, әммә бигерәк тә Үрге һәм Түбәнге Ташбүкән, Ибрай, Иҫәкәй, Мөхәмәтшәрип һәм Маҡар ауылдарында күп эшләгәндәр. Гәрәй-ҡыпсаҡ улысында үҙҙәре тотоноу һәм һатыу өсөн дә тәпән, биҙрәләрҙе Ҡологона, Иҫке Сәйет, Нөрөш, Хәйбулла ауылдарында оҫталағандар. Көҙән ауылында "семәрле дуғалар эшләп урындағы баҙарҙарҙа һатҡандар". Семәрле дуғалар Илсек-тимер улысының Ҡанаҡай ауылынан килгән. Аҙнай улысында (Һайран, Арлар, Хажи һ.б. ауылдары) оҫталар бал тәпәндәре һәм ҡамыт ағастары эшләгән. Көньяҡтараҡ урынлашҡан Мәләүез өйәҙе "ағастан эшләнгән әйберҙәргә иң бай" булған. Бында һауыттарҙы һырып яһағандар, орсоҡтар, ҡамыт ағастары, иләүестәр, һандыҡтар, һауыт-һаба өсөн кәштәләр һәм башҡа ауыл мебелен етештерелгән.

Ырымбур губернаһында, бигерәк тә таулы-урманлы Орск өйәҙендә лә кәсептәр яҡшы үҫеш алған. Был төбәктә һауыт-һаба эшләү үҙәктәренең үҙ йолалары булған. Башҡорт этнографтарының яҙмаларында Башҡортостандың төрлө төбәктәренән оҫталарҙың исемдәре күрһәтелгән. Улар араһында балта оҫталары, эйәрселәр, кәмәселәр, ҡашыҡ, табаҡ яһаусылар, тирмәнең ағас һөлдәһен эшләүселәр булған.

Д.П. Никольский семәрле ҡымыҙ һауыттарын эшләүҙе күҙ унында тотоп былай тип яҙа: "Башҡорттар арһында был өлкәлә ҡайһы берҙә бигерәк оҫта кешеләрҙе тап итергә мөмкин, уларға алыҫтарҙан заказ бирәләр". Ағаста нескә биҙәктәр төшөрөп семәрләгән оҫталарҙы "биҙәксе" тип йөрөткәндәр.

Биҙәкселәр тураһында өй кәрәк-яраҡтары һәм биҙәлешенә бағышланған бүлектә телгә алырбыҙ. Ә бына М.Г. Муллағолов үҙенең "Башҡорт халыҡ транспорты", "Урман кәсептәре" китаптарында байтаҡ ҡына һауыт-һаба, эйәр, кәсә, саңғы һәм башҡа транспорт эшләүсе оҫталарҙың исемдәрен атап китә. Ҡыҙғаныс-ҡа күрә, этнографтар XIX быуатта йәки XX быуат баштарында эшләгән талантлы кешеләрҙең исеме онотола башлаған осорҙа ғына халыҡ ижадын өйрәнеүгә тотонған. Ә уҙ заманында тирә-йүнгә билдәле оҫталар булған.

**Светлана ШИТОВА.**

**"Башҡорттарҙа ағас семәрләү һәм биҙәк төшөрөү" китабынан.**

*КЛАСС СӘҒӘТЕ*

# ӘҘӘМ БАЛАЛАРЫ ӨМӨТҺӨҘ ТҮГЕЛ



**Беҙ, үткән быуаттың 60-сы йылынан һуң тыуғандар, киләсәктә кем булаһың, тигән һорауға, ғәҙәттә, космонавт булам, тип яуап бирә торғайныҡ. Гагарин бөтөн Ер шары өсөн буй етмәҫлек бейеклек ине. Хыялдар бит улар юғарыға тарта, бала саҡ бейеклеккә ынтылыусан. Бер яңғыҙың йыһан гиҙ әле!**

Әлбиттә, Ер менән бәйләнеш өҙөлмәгән, тәүге йыһангир ерләрҙең иғтибар үҙәгендә булған. Тарихҡа ингән "Поехали!" һүҙе менән башланған Ер менән Йыһан араһындағы диалог. Аҙаҡ икешәрләп, өсәрләп тә остолар. 1995 йылдың мартында бер юлы ҙур булмаған капсула эсендә 13 кеше йыһанда булды: алтыһы Рәсәйҙең "Мир" станцияһында, етеһе - американлыларҙың "Индевор"ында. Мине иң ныҡ аптыратҡаны: бер нисә кешенең бәләкәй бушлыҡта һыйышып йәшәй алыуы. Әлбиттә, улар менән психологтар, табиптар, башҡа төрлө махсус белгестәр шөғөлләнгән, ғәҙәти булмаған шарттарҙа имен ҡалыу саралары өйрәткән. Шулай ҙа... йәне тәненә һыймағанда кеше бер-берешенә нисек түҙә, енләнмәй? Йыһан һынлы йыһанда үсегеп, ишекте шарт ябып сығып китеп булмай бит, һиненң эгоң башҡаларҙың эгоһы менән бер ритмда булырға тейеш. Һыу аҫты кәмәләрендә океан гиҙгәндәр ҙә һоҡландыра мине. Ярай, улар ваҡыты-ваҡыты менән ирекҡә сығалар. Әммә шуға тиклем бит ябыҡ, тар урында һыйышып йәшәргә, эшләргә кәрәк. Төптән уйлаһаң, Йыһан масштабынан ҡараһаң, Ер шары ла йәшәү өсөн яраҡлы берҙән-бер карапты хәтерләтә. Ә ни өсөн беҙ бер-беребеҙ менән һыйыша алмайбыҙ, фетнәләшеп йәшәйбеҙ? Экстремаль осраҡта асылыбыҙ иҫкә төшә бит! Уйҙар, уйҙар... Уйҙарҙан да күберәк һорауҙар борсой.

Был көсөргәнешле ваҡиға 2010 йылдың 5 августында Чилиҙә була. Атакама сүллегендә еҙ һәм алтын ҡаҙып сығарыу шахталары бихисап. Эш күп, әммә хәүефһеҙлек саралары насар үтәлә. Ғәҙәти эш көнөндә Копьяпо ҡалаһының 33 шахтеры ер аҫтына төшә һәм, шахта емерелеүе арҡаһында, 700 метр тәрәнлектә ҡамауҙа ҡала. Күҙ алдына килтерегеҙ, саҡрымға яҡын ер ҡатламы уларҙы донъянан айыра! Тәүге өс көндә шахтерҙар һыр бирмәҫкә тырыша, ҡолаҡ тондорғос тынлыҡта бер-береһен ҡеүәтләп маташалар. Бригадир Луис Урзуа эшселәрҙә булған аҙыҡты йыйып ала, көндәлек ризыҡ нормаһын билдәләй, булған запасты бәләкәй генә өлөштәргә бүлә. Тиҙҙән һыу запасы бөтә. Аккумуляторҙар өсөн тәғәйенләнгән техник һыу менән мөрхәтһенергә ҡала. Хәүеф артҡандан арта бара: ҡай берәүҙәр өмөтөн юя башлай. Ҡотҡарырҙармы уларҙы, әллә мәңгелеккә ер аҫтында ҡаласаҡтармы? Һәр бер шылт иткән тауышҡа ҡолаҡ һалалар, әммә шомло тынлыҡ ҡот осҡос тойола.

Ә өҫтә бөтөн Чили халҡы ауыр хәлдә ҡалған яҡташтары өсөн ҡайғыра. Ҡотҡарыусылар, министрҙар, шахта хужалары, президент үҙе баш вата: нисек уларҙы таш ҡоршауынан тартып алырға. Башта уларҙың ҡайһы тәңгәлдә булыуын билдәләргә кәрәк. Тоҫмаллап, ете йөҙ метр тәрәнлеккә тишектәр уйырға тигән ҡарарға киләләр. Көн һайын бер нисә урындан быраулайҙар. Өс көндән шахтерҙар таныш тауыш ишетеп ҡыуана, ләкин быраулауҙың осо улар ҡамалып ҡалған бушлыҡҡа килеп етмәй. Бер мәл тауыш шул хәтлем яҡын ишетелә, бына-бына стенаны уйып инәсәк. Баҡтиһән, аҙаҡтан билдәле булыуынса, шахтерҙар көпләнеп ҡалған бушлыҡҡа бер метр ғына ара ҡалған була.

Бер нисә көндән өҫтәгеләр ҙә өмөтһөҙлеккә бирелә башлай. Шахтерҙарҙың туғандары ғауға күтәрә. Быраулауҙы дауам итәләр. Аҫтағыларҙың ризыҡы бөтә. Улар бер туҡтауһыҙ Аллаһтан ярҙам һорай. Ҡабул була доғалары! Мөғжизә! 22 августа, аварияның һуң 17 көн үткәс, бырау таусылар ултырған бүлмәнең стенаһын үтә тишеп инә. Тотҡондар бырауҙы ҡыҙыл төҫкә буяп, "Беҙ - 33. Үҙебеҙҙе яҡшы тоябыҙ", тип яҙылған ҡағыҙ ҡыҫҡан беркетәләр. Бырауҙы өҫкә күтәргәс, ундағы буяуҙы һәм яҙыуҙы күреп, ҡотҡарыусыларҙың шатлығының сиге булмай. Тура эфирҙан бөтөн илгә күрһәтәләр был ваҡиғаны. Хәбәр Ер шары буйлап тарала. Шахтаға телефон кабеле һәм ашамлыҡтар төшөрәләр. Аҫтағылар менән бәйләнеш булдырыла. Бөтәһе лә тере. Бирешмәйҙәр һәм ҡотҡарыу көтәләр. Тереләр ҙә ул, тик уларҙы нисек ер аҫтынан сығарырға? Тишектең ҙурлығы ни бары 13 см. Уны киңәйтеп, ҡотҡарыу капсулаһы төшөрөүгә дүрт ай ваҡыт кәрәк. Аңға һыймаҫлыҡ хәл! Тағы мөғжизә! АҠШ-тың бер инженеры яңы уйлап табылған быраувын тәҡдим итә. Ул тишек уйыу ваҡытын күпкә ҡыҫҡартасаҡ. Етмәһә, ул күптән түгел 11 Америка таусыһын ҡотҡарыуҙа ҡулланылған икән. Батып барғанда һалам ҡыҫҡғенә булһа ла йәбеш, тигәндәй, яңы ысулға сат йәбешәләр. Эш алға китә - тишектә 70 сантиметрға тиклем киңәйтеүгә өлгәшәләр. Һәм 12 октябрҙә, 69 көн үткәс, ҡотҡарыу капсулаһы шахтерҙар ҡамалған бүлмәгә төшөрөлә. Тәүге 23 сәғәт 18 минутта беренсе шахтер ҡотҡарыла. Бер кешене күтәреүгә 20 минут ваҡыт китә. Бөтөн Ер шарынан йыйылған мәғлүмәт саралары хеҙмәткәрҙәре, шахтерҙарҙың туғандары һәр ҡотолоусыны шатланып ҡаршы ала. Президент үҙе һәр шахтерҙы ҡаршылай. 30 сәғәт дауам иткән ҡотҡарыу операцияһында иң аҙаҡтан Луис Урзуа күтәрелә. Шахтерҙар саф һауаны туя алмаҫтай булып һулай, яҡтылыҡтан күҙҙәре ҡамаша.

Был булған хәл. Тимәк, Әҙәм балалары өмөтһөҙ түгел.

Бөйөк гуманист, академик Дмитрий Лихачевтың һүҙҙәре иҫкә төшә: "Бер-беребеҙгә ҡамасауламаһаҡ, бөтәбеҙ ҙә үҙебеҙҙе һәйбәт тоясаҡбыҙ. Ҡамасауламаҫҡа өйрәнергә кәрәк. Шуға күрә, шауламағыҙ. Һәр осраҡта ла шау-шыуҙан ҡолаҡты ҡаплап ҡына ҡотолоп булмай ".

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Борсоған уйҙар, һорауҙар эго мәсьәләһенә килеп төртөлдө. Нимә ул эго? Мин-минлекме, әллә үҙеңдә генә ҡайғыртыуымы? Эгоист булыу ниндәй төшөнсә - һәйбәтме, насармы? Киләһе класс сәғәтендә шул турала һөйләшербеҙ, әлегә фекер туплай тороғоҙ.**

**Радик ӨМӨТҠУЖИН.**

*ФӘҺЕМЛЕ ХИКӘЙӘТ*

# НИӘТЕҢӘ ӨЛГӘШ

Яр буйынан китеп барған бер кеше бер малайҙың ашыға-ашыға нимәнеләр диңгеҙгә ырғытыуын абайлап ҡала. Яҡыныраҡ килһә, ҡомға һибелгән диңгеҙ йондоҙҙарын күрә. Улар шул тиклем күп, хатта күп саҡырымдарға һуҙылған, ти.

- Ни эшләп һин уларҙы һыуға бәрәһең? - тип һораған юлсы үсмерҙән.

Малай эшенән туҡтамай ғына:

- Иртәгәгә тиклем ҡалһа, йондоҙҙар һыуһыҙ тонсоғасаҡ, - тип яуап биргән.

- Тик барыбер был ҡылығың ахмаҡлыҡ бит... Ҡара, бында улар миллионлаған! Һин бер нәмә лә үҙгәртә алмаясаҡһың... - тигән.

Малай тағы бер йондоҙҙо ҡулына алған һәм бер аҙ уйланып торғандан һуң:

- Юҡ, минең был ҡылығым күп нәмәне үҙгәртәсәк... Бына был йондоҙсоҡ өсөн булһа ла, - тигән.

Быны ишеткән кеше лә эйелеп ҡулына йондоҙ ала һәм һыуға ырғыта. Шунан тағы берҙе...Икене, өстө. Төнгә ҡарай пляжға бик күп кеше йыйыла һәм һәр береһе диңгеҙ йондоҙҙарын ҡотҡарырға керешә. Ҡояш сығыуға ярҙа бер генә йондоҙ ҙа ҡалмай...

Мораль нимәләме? Мораль юҡ бында. Мотивация ғына бар: йыш ҡына кеше генә түгел, үҙебеҙ ҙә үҙебеҙгә "Туҡта, был бит ахмаҡлыҡ" тип әйтәбеҙ һәм бер минут элек кенә илһамланып маҡсатыбыҙға китеп барған ерҙән шып туҡтайбыҙ. Ә үрҙәге бәләкәй малай туҡтап ҡалмаҡас, уҙ ниәтенә ирешә...

"Киске Өфө" гәзитенең махсус бите

15

# Ғаиләм-ҡәлғәм

16-22 октябрь (ҡарасай) 2021 йыл

№42 (980)

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# МӘСКӘҮҘӘРГӘ БАРЫП...

**Ошо көндәрҙә Мәскәүҙә "Йыл ғаиләһе" Бөтә Рәсәй конкурсына йомғаҡ яһалды. Был конкурсты Рәсәйҙең Хеҙмәт һәм социаль яҡлау министрлығы менән берлектә Ауыр тормош хәлендә ҡалған балаларға ярҙам фонды ойоштора. Девизы: "Минең ғаиләм - минең Рәсәйем".**

Башҡортостандан конкурста биш номинацияла биш ғаилә ҡатнашты: "Алтын ғаилә" номинацияһында Мәләүез районынан Мәхмүтовтар, "Күп балалы ғаилә" - Краснокама районынан Дербеневтар, "Йәш ғаилә" - Салауат районынан Хәйрисламовтар, "Ауыл ғаиләһе" - Бишбүләк районынан Сираевтар һәм "Ғаилә - традицияларҙы һаҡлаусы" номинацияһында Өфө районынан Мәхмүтовтар.

Конкурстың Бөтә Рәсәй этабында илдең 85 төбәгенән 366 ғаилә ярышты, 85 ғаилә еңеү яуланы. Улар араһында Салауат районынан Хәйрисламовтар ҙа бар. Ирина һәм Айбулат Хәйрисламовтар 10 йыл элек ғаилә ҡорған. Улар икеһе лә эш һөйөүсән, маҡсатҡа ынтылыусан. Ғаилә башлығы үҙ эшен асҡан, Ирина Хәйрисламова - рус теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы, педагогтар араһында ойошторолған халыҡ-ара, бөтә Рәсәй, республика конкурстары еңеүсеһе. Ғаиләлә ике бала тәрбиәләнә, улар ҙа, ата-әсәһе кеүек, бәләкәй саҡтан районды̧ң йәмәғәт тормошонда әүҙем ҡатнаша.

Башҡортостан Хеҙмәт министрлығынан хәбәр итеүҙәренсә, "Йыл ғаиләһе" Бөтә Рәсәй конкурсының йомғаҡлау сараһы ноябрҙә ойоштороласаҡ. Конкурс йомғаҡтары буйынса Милли китап-йылъяҙма сығарыла. Ул ике баҫманы үҙ эсенә ала: тәүгеһендә - ғаиләләрҙең тарихтары, икенсеһендә Бөтә Рәсәй конкурсында ҡатнашыусылар тураһында мәғлүмәт урынлаштырыла.



ҺАЙ, АФАРИНДАР!

# АУЫЛ ҠАТЫНДАРЫНЫҢ...

## өйөнән дә, ҡулынан да икмәк еҫе килә



**2008 йылдан алып 15 октябрҙә ауыл ҡатын-ҡыҙҙары көнө билдәләнә. Берләшкән Милләттәр Ойошмаһы тарафынан ҡабул ителгән ул. Маҡсаты - ауылда йәшәгән гүзәл заттарҙың проблемаларын асыҡлау, уны хәл итеү юлдарын барлау, уларҙың хеҙмәтен һәм тырышлығын йәмғиәткә күрһәтеү. Мәғлүм булыуынса, Ер шары халҡының дүрттән бер өлөшөн ауыл ҡатын-ҡыҙҙары тәшкил итә. Әнисә Фазләхмәтова - шуларҙың береһе. Ул Мәләүез районы Бәләкәй Моҡас ауылында тыуған, үҫкән һәм фельдшер һөнәрен һайлап, бөтә хеҙмәт биографияһын ауылдаштарының һәм яҡташтарының һаулығын һаҡлауға арнаған. Әнисә Сәләхетдин ҡыҙының әсәһе лә, атаһы ла - ошо ауылдыҡы. Үҙенең тамырҙары ошо кендек ҡаны тамған ергә ерегеүендә тормош иптәшенең роле лә ҙур.**

- Өйләнешкәс, ҡайҙа йәшәргә хәл итә алмай аптырап йөрөмәнек, икебеҙҙең тыуған ауылыбыҙ араһы өс саҡрымдай ғына, Моҡастан үҙебеҙгә оҡшаған йортто һатып алып, йәшәнек тә киттек. Бик ҡотло булды ул нигеҙ, ике балабыҙ ошонда тыуып, үҙаллы тормош юлына баҫты. Ҡыҙыбыҙ Айгөл Иштуғанда йәшәй, Һарыш урта мәктәбендә уҡыта. Улыбыҙ Фәнис - инженер-химик, ул Өфөлә төпләнде, икеһе лә Башҡорт дәүләт университетын тамамланы. Үҙҙәре күптән әсәй-атай инде, өсәр ейән һәм ейәнсәр бүләк иттеләр беҙгә. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, олаталарына ғына уларҙың уңышын, ҡыуаныс-һөйөнөстәрен күберәк күрергә насип булманы, - тип һөйләй Әнисә Фазләхмәтова.

Фельдшер ауыл ерендә иң кәрәкле һәм хөрмәтле һөнәр һаналһа, медпункт элек-электән унда төп дауалау учреждениеһы булды. Әнисә Сәләхетдин ҡыҙы ҡырҡ йылға яҡын фельдшер булып эшләгән дәүерҙә күптәрҙең һауығыуға ышанысын ҡайтарған, йәшәүгә өмөт бүләк иткән.

- Иң абруйлы һәм мөһим һөнәр тип әйтеүе генә анһат. Ауыл ерендә фельдшер булып эшләү элек тә еңел булманы, әле лә. Миҙгелдең, һауа торошоноң, тәүлектең ниндәй ваҡыты булыуына ҡарамаҫтан, саҡырыу буйынса өйгә йөрөү, медицина ярҙамын үҙ мәлендә күрһәтеү талап ителә. Икмәк баҫып тораһыңмы, һыйыр һауып ултыраһыңмы, баланды ашатаһыңмы - барыһын да ҡалдыраһың да, ярҙамға мохтаж кешегә йүгерәһең, - ти мәкәләбеҙ геройы.

Әнисә Фазләхмәтова Ҡотош, Бәләкәй Моҡас, Айтуған ауылдары араһын йәйәү ҙә, велосипедта ла, машиналa ла бик күп үткән.

- Һөнәрем еңел түгел, әммә бик яраттым. Кешеләргә файҙалы, кәрәкле була алыуым минә икһеҙ-сикһеҙ кинәнес бирә ине. Тырыш хеҙмәт йылдарымды һағынып иҫкә алам, - ти ул. - Төп эшемдән тыш, мин - әсә лә, ир ҡатыны ла бит әле. Был статустарымды ла бер ҡасан да онотманым. Ауылда йәшәгәс, күршетирәнән, ауылдаштарымдан да ҡалышырға ярамай. Өйҙә лә, баҡсала ла, йорт-ҡураны ла ҡарарға, тәртиптә тоторға, сәскә, йәшелсә үҫтерергә кәрәк.

Ғәҙәттә, ауыл ҡатын-ҡыҙҙары күберәк ғаилә баштарына тора, дөрөҫөрәге, ғаилә дилбегәһе - уларҙың ҡулында. Тап улар ҡышҡылыҡҡа запас әҙерләүҙе, ҡош-ҡорт алып үҫтереүҙе хәл итә. Мал-тыуарҙы ла күберәк гүзәл зат ҡарай. Балалар тәрбиәләй, уларҙы хужалыҡ эштәренә өйрәтә. Әммә был фекер һис тә Әнисә апайға ҡағылмай. Улар ғүмер буйы йорт мәшәҡәттәрен Нәжип ағай менән бергә башҡарған.

- Бик ихтирамлы булды ул, һөнәремдең ауыр икәнен аңланы. Шуға ла йорт тирәһендәге эште миңә ҡалдырмаҫҡа тырышты. Бесәнгә лә, күберәк мине эргәһендә йөрөтөр, сәй ҡайнатып эсерер өсөн генә алып барҙы, - ти Әнисә Сәләхетдин ҡыҙы. - Беҙгә, ауыл ҡатын-ҡыҙҙарына, иң беренсе, донъя биҙәге, өй йылыһын булдырыу бурысы йөкмәтелеүен яҡшы белде.

Әнисә Фазләхмәтова, әлбиттә, фельдшерлыҡ эше һәм ирен, балаларын хәстәрләү менән генә сикләнмәй. Ауылдың ижтимағи-мәҙәни тормошонда ла әүҙем ҡатнаша. Хаҡлы ялға сыҡҡас, эшләгән ваҡытта ҡулы теймәгән яратҡан шөғөлдәренә тотона.

- Йәш саҡта уҡ тегергә, бәйләргә ярата инем. Дүртенсе класта уҡығанда Сабира инәйҙән бестерен алдым да, үҙемә күлдәк тегеп кейҙем. Һенлемдең курсаҡтарын да кейендерҙем. Тиҙҙән оҫталығымды белеп ҡалған әбейҙәр күлдәк тектертә башланы, - ти.

Ҡул эшенә оҫталығы өләсәһенән күскән, ә ырғаҡ менән бәйләргә мәктәптә хеҙмәт дәресендә өйрәнгән. Әйткәндәй, әсәһе Мәрйәм апай ҙа заманында тирә-яҡта шәл бәйләү маһирлығы менән дан ҡаҙанған. Әлеге ваҡытта Әнисә апайҙың өйө күргәҙмә, дөрөҫөрәге, музейға оҡшап тора. Кәштәләрен башҡорт милли кейемендәге ҡурсаҡтар, бәйләнгән күгәрсендәр, тәҙрә төптәрен аллы-гөллө сәскәләр биҙәй. Сиккән таҫтамалдарын, ырғаҡ менән бәйләгән ашъяулыҡтарын, диван, карауат, ултырғыс япмаларын районда, ҡалала үткән сараларҙа ла йыш күрергә мөмкин.

Ауылда йәшәгәндәрҙең ялы юҡ, фельдшер тураһында әйтеп торорға ла түгел. Сираттағы отпускыға киткән саҡта ла уларҙы бер кем дә тәүге ярҙам күрһәтеүҙән азат итмәй. Ғүмер буйы тыуған тупрағынан айырылмаған Әнисә апайға, нисек ял иттегеҙ, көс йыйҙығыҙ, тигән һорауҙы бирмәй булдыра алманым.

- Өйҙәге эш үҙе ял бит ул. Тәмле-татлы ризыҡ бешереп, яратҡан ғаиләңде һыйлау ҙа кинәнес бирә. Өйҙә ремонт эшләп алыу ҙа энергия өҫтәй. Яратып башҡарған бөтә эш арыуҙы оноттора, психологик көсөргәнештән ҡотолдора. Бөтә нәмә күңел торошона бәйле, - ти Әнисә Сәләхетдин ҡыҙы. - Ғүмүмән, ауыл ҡатын-ҡыҙҙарының ҡүңелен дә, һаулығын да һаҡларға кәрәк, сөнки тап улар күберәк милләт улдарын, милләт ҡыҙҙарын тәрбиәләй, тип уйлайым. Форсаттан файҙаланып, ауылдарҙа йәшәгән барлыҡ гүзәл заттарҙы байрам менән ҡотлайым. Барығыҙға ла әсәлә күләгә, ел-ямғырҙа ышыҡ, һыуыҡта йылы усаҡ булырлыҡ терәк-таяныс булыуын теләйем!

**Лена АБДРАХМАНОВА.**

**✓ *Ирҙән айырылыу оло хурлыҡҡа һаналған. Шуға күрәлер ҙә, килендәрҙең күпселеге яңы ғаиләгә, иренә мөмкин тиклем ярарға, ҡәйнәһенең һәр йомошон тыңлап, уның менән бәхәскә лә инмәй йәшәргә тырышҡан.***

ФЕКЕР АЛЫШАЙЫҠ

# ҠӘЙНӘ - КИЛЕН МӨНӘСӘБӘТТӘРЕ ХАҠЫНДА,

## йәки Кем кемгә ярарға тейеш?

**Ҡайны менән кейәү араһындағы проблемалар хаҡында һүҙ күтәргәндәрен бер ҡасан да ишеткәнем юҡ, әммә ҡәйнә - килен темаһы халыҡта, матбуғат сараларында ла ҙур ғына урын алып тора. Хәләл ефетенең әсәһе менән татыу йәшәгән берәй килен тураһындағы хәбәр ишетелһә, был һәр саҡ күңелгә бәлзәм булып ята. Хатта бөтөнләйгә таныш булмаған кешеләр хаҡында булһа ла. Үҙенең ҡәйнәһенең фәҡәт яҡшы яҡтарын ғына күреүсе бәғзе бер килендәрҙең гәзиткә яҙған мәҡәләләрен дә уҡығылағаным бар. Ғаиләлә бына шундай татыулыҡ мөхите тантана итеүе үҙе бер оло бәхет, һәм ул йәшәү нормаһы булырға тейеш, тип һанайым.**

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ир менән ҡатын үҙ-ара һыйышып йәшәгән хәлдә лә, ирҙең әсәһе менән уның килененең араһы "ал да гөл" булған осраҡтар һирәгерәк... Ошо мәсьәләгә ҡарата фекер төрлөлөгө лә күп. Килен йә ҡәйнәнең һәр кеме үҙ яғын ҡайырырға тырышыуы - тәбиғи. Бер кемдең дә "минең ҡәйнәм (киленем) һәйбәт, ә үҙем насар", тип әйтмәҫе билдәле... "Килен ҡәйнә усағынан ярала" тиһәләр ҙә, бына шулай, уларҙың йыш ҡына икеһе ике позицияла булыуын күрергә ғәҙәтләнеп киткәнбеҙ. Әйтерһең дә, берәүҙәр ҡәйнә, ә икенселәр килен генә булып тыуа ла, ғүмерлеккә шулай ҡала... Ә бит һәммә килен, ваҡыты еткәс, үҙе лә ҡәйнә булып китә. Бер үк ваҡытта килен һәм ҡәйнә статусында булған урта йәштәге нәфис заттарыбыҙ хаҡында бер аҙ ғына фәлсәфәләп алмаҡ булам.

Әйтәйек, илле йәштәр тирәһендәге шундай ҡатын-ҡыҙға ошондайыраҡ провокацион һорау бирҙек икән ти: "Кем кемгә ярап йәшәргә тейеш: килен ҡәйнәгәме, әллә ҡәйнә киленгәме?" Быңдай гүзәл зат, ҡәйнә күҙлегенән сығып, бер төрлөрәк фекер йөрөтһә, үҙе килен роленә инеп киткән хәлдә, бөтөнләйгә икенсе, хатта ҡапма-ҡаршы уйҙа булыуы мөмкин. Үҙенә оҡшамаған килене хаҡында быңдай ҡәйнә, ғәҙәттә: "Ә-ә-әй, хәҙерге килендәр ҡәйнәне - ҡәйнә, ҡайныны ҡайны тип белмәй. Бына мин килен булып төшкәндә...", - тип, үҙенең "өлгөлө килен" булған сағын иҫкә алыусан. Ә инде һәүетемсә "йыуанайып" алған был гүзәлдең үҙенең ҡәйнәһе лә әле булһа иҫән-һау икән, был ваҡытта ул әлеге һорауға бөтөнләйгә икенсе төрлө яуап биреүе мөмкин: "Атаҡ-атаҡ! Нишләп мин ҡәйнәгә ярап йәшәргә тейеш, бынағайыш! Уның көйөнә генә бейеп торорға, башыма тай типмәгән!"

Үҙем ир затынан булғас, минең өсөн ҡәйнә ни ҙә, килен ни. "Нейтраль" кеше булараҡ, кемеһендер яҡлап, уның яғына сығырға ла уйым юҡ. Ошондай осраҡта "ҡайһы бармағыңды тешләһәң дә - берҙәй ауырта", тиҙәр беҙҙең яҡта. Мөмкин тиклем ғәҙел булырға тырышып, тормоштоң һәр төрлө нескәлектәрен иҫәпкә алып, ошо мәсьәләне артабан да бер аҙ сурытмаҡсымын.

Һәр ата-әсә, үҙенең улы ниндәй генә булыуына ҡарамаҫтан, буласаҡ килененең яҡшыларҙан яҡшы, уңғандарҙан уңған, аҡыллыларҙан аҡыллы булыуын теләй инде ул. Әммә тормошта бер кешелә лә бөтә ыңғай яҡтар бер юлы булмай. Һәр кемдең үҙенә күрә төрлө ҡытыршылыҡтары булыуы - тәбиғи. Килен - бөтөнләйгә икенсе ғаиләнән килгән, башҡа мөхиттә үҫкән кеше ("килен" һүҙе лә "килгән" тигән мәғәнәгә эйә. Ҡайны йортонда йәшәгән ҡайһы бер ир-егеттәрҙе лә уйынлы-ысынлы, "килен кейәү" тип атағандарын ишеткәнем бар).

Борон өләсәйҙәребеҙ кейәүгә оҙатҡан ҡыҙына "таш булып бат" тип теләктәр теләгән. Йәғни, ана шул барған ғаиләгә яраҡлашып, йәшәп алып кит, тигән мәғәнәлә. Үҙен ҡайны-ҡәйнә йортона ғүмерлеккә ингән тип һанаған килен дә һәр төрлө һылтау табып, иренән айырылып, ҡабаттан тыуған өйөнә ҡайтыу тураһында бөтөнләйгә уйламаған. Ҡайсаҡ, тормошон оҡшатмай, башына шундай уй килгән хәлдә лә, иң беренсе нәүбәттә үҙенең ата-әсәһенән шөрләгән. Ирҙән айырылыу оло хурлыҡҡа һаналған. Шуға күрәлер ҙә, килендәрҙең күпселеге яңы ғаиләгә, иренә мөмкин тиклем ярарға, ҡәйнәһенең һәр йомошон тыңлап, уның ҡулына эш тейҙермәй, ниндәй генә уҫал ҡәйнәгә тап килеүенә ҡарамаҫтан, уның менән бәхәскә лә инмәй йәшәргә тырышҡан. Хәләл ефетен дә маҡташтырып, ҡәйнәһенең тағы ла ниндәйҙер бушағыраҡ яғын табып, ыңғайына һыпырғылап, уның ышанысына инеп алыуҙы хуп күргән. Ғөмүмән, ирен, ҡайны-ҡәйнәһен ҡәҙерләүҙе үҙенең иң беренсе изге бурысы тип һанаған боронғо килендәр. "Йылы һүҙ - йән аҙығы" тиҙәр халыҡта.

Ҡәйнәһенең һәр әйткән һүҙен хупластырып, һалпы яҡҡа һалам ҡыҫтырғылап булһа ла, килендең уға ярарға тырышыуы, бер яҡтан уйлап ҡараһаң, бигүк насар ҙа түгел, минеңсә. Унан ғына килен кешенең бер ере лә кәмеп китмәй, хатта үҙе өсөн тик яҡшыға ғыналыр. Сөнки, ғәзиз әсәһен хөрмәтләп, "өрмәгән ергә ултыртмай", һәр саҡ "күтәреп" тигәндәй алып йөрөгән ҡатынына ире тарафынан да иң яҡшы мөнәсәбәт булыры көн кеүек асыҡ бит. Әммә шул уҡ ваҡытта улының кәләшенә ҡарата булған йылы ҡарашын дөрөҫ аңламаған, "киленгә артыҡ йомшаҡһың" тип улын шелтәләүсән әсәләр ҙә әүәлдән булғандыр. "Баланы - баштан, ҡатынды - йәштән" тигән әйтем дә юҡҡа ғына килеп сыҡмаған. Йәнәһе лә, йәш саҡтан уҡ ир кеше ҡатынын "ныҡ торорға" тейеш, артыҡ шашынып китмәһен өсөн. Әммә бына ошо мәсьәләгә минең фекерем бер аҙ башҡараҡ.

Инаныуымса, ир кеше бала саҡтан нисек тәрбиәләнеп үҫкән булһа, ғүмер буйы шулай була инде ул. Әйтәйек, әҙәпле, тыныс, йыуаш булып үҫеп еткән ир-егетте бер нисек тә кирегә үҙгәртеп булмайҙыр, тип уйлайым. Шулай уҡ, теҙгенде нисек кенә ҡаты тотһаң да, башҡа ғаиләлә үҫеп балиғ булған ҡыҙҙы ла ҡабаттан тәрбиәләп алыу мөмкин түгел. Урыҫта "что выросло - то выросло" тигән әйтем дә йөрөй бит әле. Баш һүҙем ир менән ҡатын араһындағы мөнәсәбәт хаҡында булмағас, был һорауҙа артыҡ туҡталып тормаҫҡа ниәтем. Һүҙем, башлыса, бер ҡыйыҡ аҫтында ғүмер иткән ҡәйнә менән килен хаҡында.

Килен кешенең ҡәйнәгә ярап йәшәү-йәшәмәүе тураһында ифрат йыш һүҙ йөрөтәбеҙ. Ә ҡәйнәнең килененә ярап йәшәүе мөмкинме? "Әлбиттә мөмкин!" тип әйтер инем мин шунда уҡ. Аҡыллы, яҡшы күңелле ҡәйнә, иң беренсе нәүбәттә, улының йәш ғаиләһендә татыулыҡ, тыныслыҡ хөкөм һөрөүен теләй бит. Шуға күрә, үҙенең ҡәйнәлеген бер урынға йәшереңкерәп, улының хәләл ефетен үҙ ҡыҙы һымаҡ итеп күрергә тырыша быңдай ҡәйнәләр. Бәғзеләре килененең әхирәте, хатта серҙәше лә булып китә! "Алтын ҡәйнәләр" тип әйтер инем мин улар хаҡында. Әммә килен кеше ана шуның да ҡәҙерен белмәй, өй эшендә ялҡауланып, кәрәкһә-кәрәкмәһә лә ҡәйнәһе менән әрепләшергә йә уның улын урынһыҙ битәрләргә әҙер йөрөһә, уныһы - башҡа мәсьәлә... Хәйер, хатта ана шундай осраҡтарҙа ла бәғзе бер ҡәйнә сабырлы, изге күңелле булып ҡала. Балаларының яҡшы йәшәүе, ейән-ейәнсәрҙәренең бәхете өсөн дә борсолған әсә кеше бихисап кире яҡтары булған шундай килененә лә ярап, уның һәр төрлө ҡырын яҡтарын күрмәмеш булып, тешен ҡыҫып йәшәргә мәжбүр. Саманан тыш күндәм ҡәйнәһенең "сибек" яҡтарын күреп йөрөгән быңдай килен, өҫтәүенә, берәй яҡшыраҡ урында эшләп тә йөрөй икән, бының ҡәйнә файҙаһына булмауы ла мөмкин. "Килендәр эштән ҡайталар Берлинды алған кеүек. Ҡәйнәләре ҡурҡып тора торорға тырыша быңдай ҡәйнә. Ярайһы ғына "зирәк" (урыҫта "ушлая" тиҙәр) булған килен дә оҙаҡламай ҡәйнәһенең ошо хәленә төшөнә һәм ғаиләлә үҙенең "лайыҡлы урынын" таба һалып ала. Өйҙә әллә ни хужа була белмәгән ире урынына был ҡатын бөтә "донъяны алып барыусы" ла булып китә. Ниндәйҙер бер ябай ғына эштә эшләгән, йорт-ҡура тирәһендә лә тик хәләл ефете ҡушҡанды ғына үтәргә ҡулайлашып алған иргә быңдай "боевой" ҡатын менән бергә тороу хатта уңайлы ла. Уға тик ошо ҡатындың һүҙенән сыҡмай йәшәргә генә ҡала. Кемдеңдер быңдай тормошо башҡа бәғзе берәүгә, бәлки, бөтөнләйгә оҡшап етмәүе лә мөмкин, әммә, һис нәмәгә ҡарамаҫтан, был ғаилә шуның менән ҡәнәғәт. Артыҡ өлгөлө тип атап булмауына ҡарамаҫан, быңдай пар бала-сағалар үҫтереп, ҡартайғансы тыныс ҡына йәпленға ҡалған кеүек" тигән һымаҡ уйынлы-ысынлы йырҙар ҙа бушҡа ғына килеп сыҡмағандыр. Балаларының бәхетен алғы планға ҡуйған бына шундай "ҡурҡаҡ" ҡәйнәне лә барыбер аҡыллы тип һанар инем.

Ҡәйнәне килененә "һыйып" йәшәргә этәреүсе тағы бер сәбәп - уның улының һәр төрлө етешһеҙлектәре артыҡ күп булыуы (бер аҙ "төшөргөләргә" ятарыуы, эш хаҡын аҙыраҡ алып эшләүе, йорт-ҡура эшендә лә мәшәүерәк булыуы һ.б.). Тормошҡа реаль күҙлектән сығып ҡарай белгән һәр әсә ғәзиз балаһының теге йәки был "йомшаҡ" яҡтарын яҡшы белә. Эшсән, "беше" килен-гә ҡәйнә булып алған быңдай аҡыллы ҡатын нисек кенә булһа ла шундай килende ҡулынан ысҡындырмаҫҡа тырыша. "Тик улымдан китеп кенә бармаһын", тип теләй ул. Башҡаларға һөйләп йөрөмәһә лә, эстән генә "Улым ошо килен арҡаһында кеше булып йөрөй", тип тә һанай. Килененең һәр әйткән һүҙенә: "Аһ, аһ, шулай булмаған ҡайҙа ул, килен, эйе шул..." - тип, уның "һайт" тигәненә "тайт" тип кенә



*Әбйәлил районында килендәр һәм ҡәйнәләр осрашыуынан бер мәл.*

шәй бирә. Ҡәйнә кеше лә, әлбиттә, сикһеҙ бәхетле...

Әгәр ҙә мәгәр ир кеше "үҙ урынында" икән, эштә биләгән вазифаһы, абруйы ла, өйҙәге алып барған эштәре лә тейешенсә кимәлдә булған хәлдә, бындай ирҙең әсәһе, йәғни, ҡәйнә кеше, әлбиттә, "үҙ аяғында ныҡ баҫып тороуын" тоя. Баштараҡ телгә алған ҡәйнәләр һымаҡ, һәр нәмәгә айыҡ баһа бирерҙәй әҙәпле, аҡыллы ҡатын-ҡыҙ барыбер кешелекле булып ҡала инде ул. Тик, ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, ҡайһы бер әсә кешенең улының әллә кемлегенән башы әйләнеп, эште боҙоп ҡуйыуы ла ихтимал. Үҙенең улын "донъя тотҡаһы" тип һанап, килененә өҫтән генә ҡараусы, аҙым һайын ниндәйҙер берәй етешһеҙлеген таба һалып, уға саманан артыҡ күрһәтмәләр биреүсе ҡәйнәләр ҙә юҡ түгел. Ябай килен кеше бындай ғаиләлә, әлбиттә, үҙен бигүк яҡшы тоймаясаҡ. Ире яғынан да яҡлашыу тапмаһа, бер аҙ ғорурлығы булған килендең берәй ваҡыт ҡәйнәһенең игәүенә түҙеп йәшәргә көсө етмәй, сығырынан сығып, уға айбарлана башлауы ла ихтимал. Һөҙөмтәлә, ҡәйнә менән килен араһындағы "һалҡын һауа" йәш ғаиләнең эсенә лә үтеп инеп, хатта уның тарҡалыуына килтереүе мөмкин. Үкенескә, "ҡәйнә ярҙамында" боҙолған ана шундай ғаиләләр ҙә юҡ түгел...

Алдараҡ иҫкә алған "аҡыллы ҡәйнә"гә ҡабаттан әйләнеп ҡайтайыҡ. Ҡәйнәнең файҙалы кәңәштәрен тыңлап, уның йәнәшәһендә йәшәүе, килен кеше өсөн, бер яҡтан, һис кенә лә насар түгелдер ҙә ул. Әммә халыҡта "Бер ҡаҙанға ике тәкә башы һыймай" тигән әйтем дә йөрөй бит әле. Юҡтан ғына килеп сыҡмағандыр бындай мәҡәл. Ниндәй генә яҡшы күңелле булмаһын, әле булһа йәш, теттереп донъя көтөрлөк энергиялы ҡәйнә менән бергә киленнең бер йортта тормауы хәйерлерәктер шунда ла, тип уйлайым. Бындай ғаиләлә аш-һыу, уны әҙерләүҙәр ҙә, әлбиттә, уртаҡ була. Ошо мәсьәләлә ике ҡатындың һәр уйы берегеп етмәүе лә ихтимал бит. Әйтәйек, береһе тоҙлораҡ, икенсеһе тоҙһоҙораҡ ашты ярата. Үҙенең ғәзизен барыбер килененә ҡараған яҡынараҡ тип һанаған әсә кеше, ниндәй генә тыныс холоҡло булмаһын, улының бер аҙ керегә биргән ягамағаһын күреп барыуы, үтекләнмәгән күлдәк, салбарына ла иғтибар итеүе мөмкин. Һәр ғаиләлә ир-ҡатын араһында була торған ваҡ-төйәк бәхәстәрҙе лә ишетә һалып, үҙе лә һиҙмәҫтән, уға "ҡушылып" китеүе лә бар...

Шуға күрәләр ҙә, борон-борондан ата-бабаларыбыҙ улдарына килен алып биргәс тә, уларға йорт һалып, башҡаландырыуы яғын ҡараған. Оло йәшкә еткәнгәсә (ирҙәр илле-алтмышта, ҡатын-ҡыҙҙар ҡырҡ-ҡырҡ биштә) бала табыуҙан бушамаған был кешеләр иң төпсөк улдары башлы-күҙле булыуға инде етмештән дә уҙа башлаған. Бына шулай, ярайһы ғына нык олоғайып, ҡәҙимге әбей-бабай булғас ҡына улар килен йомшап, улдары менән бергә тора башлауҙы, төп йортто, барлыҡ хужалыкты йәштәргә тапшырыуҙы кәрәкле тапҡан. Халҡыбыҙ йолаһына ярашлы, иң кесе улдың үҙ ғаиләһе менән атай йортонда йәшәргә тейешлеге тап бына ошоноң менән бәйле булыуы һәр кемгә аңлашыла...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ҡәйнә менән килен мөнәсәбәттәре һәр саҡ бөхәсле тема булып ҡалалыр инде ул. Боронғолар юккка ғына: "Яман "еңдем", аҡыллы "ҡуйҙым" тип әйтер", тимәгән. Бер-береһен "еңеп алыуҙы" маҡсат итеп ҡуйған ҡәйнәне лә, киленде лә ихтирам итергә һис кенә лә күңел тартмай. Ошо хаҡта башҡаларҙың да фекерен ишетке килә.**

Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.

УЛЫМ, ҺИҢӘ ӘЙТӘМ...

# АТАЙҘАН - ҠОТ, ӘСӘЙҘӘН - ҺӨТ



**Башҡорт ғаиләһендә туғандарҙың үҙ-ара мөнәсәбәт мәсьәләһенә айырым иғтибар бүленгән. Сөнки, билдәле булыуынса, башҡорттарҙың йәшәү рәүеше, шөғөлө үҙ-ара мөнәсәбәттең, бигерәк тә туғанлыҡтың нык булыуын талап иткән. Әйтәйек, тирмә ҡорғанда, тула, кейеҙ баҫҡанда, тире эшкәрткәндә генә лә нисәмә-нисә ҡул көсө кәрәк була. Ә иң ышаныслы терәк - ул туғанлыҡ. Шуға ла башҡорттарҙа туғанлыҡ тойғоһо юғары торған: шәжәрәләр төҙөлгән, ҡунаҡҡа саҡырышҡандар, туй мәжлестәре үткәргәндәр, оҙаҡ-оҙаҡ итеп ҡоҙа һыйлағандар, ҙур-ҙур ғаилә булып бергә йәшәгәндәр. Туғанлыҡ мөнәсәбәттәрен аңлатыу, һаҡлау, нығытыу маҡсатында бихисап атамалар уйлап табылған һәм бала бәләкәйҙән үк үҙ-ара фәҡәт ошо атамаларҙы ҡушып өндәшергә тейеш булған.**

## Атай абруйы

Иң элек Атай абруйы хаҡында һүҙ. Сөнки халҡыбыҙҙа, Урал батыр эпосында әйтелгәнсә, төп ҡот атайҙан килә: "Атаң һиңә ҡот биргән, әсәң һиңә һөт биргән..." Башҡорт ғаиләһендә атай абруйы ифрат ҙур булған. Шәжәрә атай нәҫеле буйынса төҙөлгән, иң һуңғы ҡарар, мәсьәләне хәл итеү - фәҡәт атай һүҙенән торған. Атай абруйы көслө булған ерҙә эске тәртип була. Эске тәртип, күңел әҙәбе - ғаиләлә лә, йәмғиәттә лә төп таяныс.

"Мәргән менән Маянһылыу" ҡобайырында Маянһылыу үҙендә илен дошмандан ҡурсаларлыҡ көс тойһа ла, атаһы рөхсәтенән тыш ҡулына ҡорал алмай.

*Ярар, ҡыҙым, мен атҡа,*
*Ҡул ҡаушырып тормағыҙ.*
*Аяҡҡа баҫҡан ир-ҡатын, -*
*Бары атҡа менегеҙ,*
*Рөхсәт алғас, атанан,*
*Маян шунда ат менгән,*
*Мәргәнде эҙләп табып,*
*Батырҙар менән бергә*
*Яуға бараһын әйткән.*

Халыҡ ижадынан ошондай тәрбиә ҡанунына бик күп миҫалдар килтерә алабыҙ. Ижадыбыҙ менән ҡыҙыҡһыныу, унан фәһем алып өйрәнеү генә кәрәк. Әммә һәр замандың үҙ яҡшыһы, үҙ яманы. Яманаты сыҡҡан, өйҙә бола ҡуптарған, бер кемде лә һанға һуҡмай кәперәйгән атайҙар рухында тәрбиәләп булмай, әлбиттә. Ундай осраҡта инде нәҫел шәжәрәһе буйынса иң яҡшыһын табып, шул кеше рухында алып барылған тәрбиә. Затыбыҙҙың абруйы, тип йөрөтөлгән ундай ир уҙамандары. Был хаҡта данлыҡлы "Урал батыр" эпосында ла кинәйәләп әйтелгән фекер бар.

*- Минең әсәм - Айһылыу,*
*Атам Шүлгән булғандыр,*
*Һиңә туған булғандыр,*
*Дейеүҙәр мән киткәндер,*
*Аҙаҡ күп ҡан ҡойғандыр,*
*Яҡшыға дошман булғандыр,* - тип килеп етә Айһылыуҙың улы Һаҡмар Урал батыр янына. Артабан әсәһенең һүҙҙәрен әйтә:

*Балам, атҡа мен, тине,*
*Иҙел мән бар, кит, тине,*
*Урал атаң юлынан,*
*Балам, яуға сап, тине,*
*Һаҡмар батыр бул, тине.*

Тимәк, Шүлгән дейеүҙәр менән киткәс, Айһылыу үҙ улын - Һаҡмарҙы, яҙыҡ юлға тайпылыуҙан ҡурсалап, Иҙел менән бергә Урал батыр эргәһенә оҙата.

Атай намыҫын һаҡламаған бала ғаилә өсөн генә түгел, ил өсөн дә ҡурҡыныс. Ошо яҙыҡтан ҡурсалай Айһылыу үҙ улын. Айһылыу, улына дөрөҫ тәрбиә биреү өсөн, атай нәҫеленән булған туғанын һайлай. Шүлгәндең яҙыҡ юлдан китеүе өсөн бөтөн нәҫел-нәсәбен кәмһетмәй. Был, әлбиттә, ижад. Әммә бөтөн тәрбиә ҡанундарын туплаған бөйөк эпосыбыҙ ул.

Ә ысынбарлыҡта ирҙәр, атайҙар ниндәйерәк булған һуң? Башҡорт тормошон, көнкүрешен, ғаилә мөнәсәбәттәрен өйрәнгән рус ғалимдарының береһе Д. П. Никольский, мәҫәлән, былай ти: "Артабан башҡорттарҙың ыңғай холоҡтарынан уларҙың кешелекле булыуын, ихласлығын, иплелеген әйтергә мөмкин. Иплe булыуҙары ғаиләлә айырыуса сағыла. Башҡорт үҙ ҡатынына бик иғтибарлы, уны бер ҡасан да һуҡмай, яфаламай... Башҡорт ирҙәре аҙ ғына мөмкинлек сығыу менән ҡатынына нимә булһа ла, хатта бәләкәй генә әйбер булһа ла бүләк итергә тырыша".

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Халҡыбыҙҙың ижад өлгөләренән боронғо тәрбиә ҡанундары тураһында мәғлүмәттәр сүпләп йыйыуымдың сәбәбе бер: матур күңелле, бай ижадлы, сикһеҙ кешелекле, ҡунаҡсыл, сая йөрәкле, иҫ китмәле илһөйәр халыҡбыҙ. Аяуһыҙ ҡаршылыҡтарға бирешмәй һаҡланғанбыҙ. Хәҙер иһә милләтебеҙҙе һаҡлап ҡалдырыу юлдарын әллә ҡайҙарҙан эҙләп, кемдәрҙәндер өлгө алырға маташып ҡараған булабыҙ. Ят өлгө менән ят милләткә әйләнергә йөҙ тотмаһаҡ, башҡаларҙың өлгөһө кәрәкмәй. Быуаттар буйы милләтебеҙҙе милләт итеп һаҡлап килгән үҙ өлгөбөҙҙө генә заманға яраҡлаштырып йәшәү зарур. Заманға яраҡлаша алмаһаҡ та юғалыуыбыҙ ихтимал. Шуның өсөн үҙ ҡалыбыбыҙҙы өйрәнәйек, унан ситләшмәйек, фәҡәт камиллаштырайыҡ ҡына. Һәр яҡшыны үҙебеҙҙән башлайыҡ.**

Мәрйәм БУРАҠАЕВА.

ӘЙҘӘ, АҠСА ЭШЛӘЙЕК!

# ЕҢЕЛ ЭШ ТҮГЕЛ, ӘММӘ...




**Гәзит уҡыусыларға үҙемдең төп эшемдән тыш нисек килем алыуымды яҙып үтмәксемен. Был юл еңелдәрҙән түгел, шулай уҡ башлап китеү өсөн бер ни тиклем аҡса ла кәрәк, шулай ҙа файҙаһы бар.**

Теге йәки был әйберҙе бер урындан күмәртәләп һатып алып, ҡыйбатыраҡ хаҡҡа тәкдим иткәндәрҙе алыпһатар, тибеҙ. Әлбиттә, етди эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнгәндәр алдында уларҙың эшмәкәрлеге уйын кеүек күренә, ләкин алыпһатарҙар ҙа дәүләткә һалым һәм башҡа төрлө социаль түләү-ҙәр күсерә, эш хаҡы түләй, күптәр хәйриәлек менән була. Ләкин, ҡыҙғаныҫҡа күрә, статистика күрһәтеүенсә, уларҙың күбеһе эшмәкәрлеген яйға һала алмайынса, ябылырға мәжбүр була.

Минең аҡса эшләү ысулым нәҡ ошо исемлеккә ингән, йәғни үҙ эшен туҡтатҡандарға бәйле. Күп осраҡта бындай алыпһатарҙар бәләкәй магазин биләһын йәки баҙарҙа бер бүлекте ҡуртымға алып һатыу итә. Тағы бер айға бушҡа ҡуртым хаҡы түләмәҫ өсөн, кисәге алыпһатарға тиҙ арала тауарын һатып бөтөп, бүлекте бушатыу кәрәк була. Тауары күп ҡалһа, уны өйгә ташып бөтөүе мөмкин түгел, аҡса түгеп һатып алған әйберҙе бушлай таратыу ҙа ҡулайһыҙ. Мин иһә уларға бөтә тауарын күмәртәләп, йәғни осһоҙ хаҡҡа минә һатырға тәкдим итәм. Күп осраҡта тауар хужалары ризалаша, сөнки бер юлы ике ҡуяндың ҡойроғон тота - кәрәкмәгән тауарынан ҡотола, шул уҡ ваҡытта бөтөнләй бушҡа ла тотторорп ебәрмәй.

Әлбиттә, бындай эшмәкәрлек сығым талап итә, бигерәк тә башлап киткән ваҡытта. Ләкин бөтә яҡлап уйлап иң иткәндә етди генә күләмдә килем алырға була. Ә ул тауарҙы ҡайҙа итергә һуң, тигән һорау тыуыуы урынлы. Мин бер нисә юлды ҡулланам. Беренсенән, уларҙы икенсе алыпһатарҙарға тәҡдим итәм. Был осраҡта улар юл сығымынан ҡотола. Шулай уҡ минең әйберемде һатып биреүҙәрен һорайым һәм килемдән процент түләйем. Был ысул бигерәк тә ауыл магазиндарында ҡулланыуға ҡулай. Икенсенән, байрамдар алдынан интернет селтәрендә осһоҙ хаҡҡа уйынсыҡ, техника, бүләктәр тәкдим итәм, күп осраҡта тотош класс менән заказ бирәләр. Өсөнсөнән, кейем-һалым, уйынсыҡтарҙы иң әүҙем һатып алыусылар әсәйҙәр икәнен иҫтә тотоп, интернетта ошондай төркөмдәрҙә әүҙем эшмәкәрлек алып барам. Дүртенсенән, "Авито" һәм башҡа төрлө интернет-сайттар аша әллә нимәләр һатып була, тик бының менән даими шөғөлләнергә генә кәрәк. Ғөмүмән, күмәртәләп осһоҙға алынған тауарҙы берәмләп һәм ҡыйбатыраҡ хаҡҡа һатыуҙы юлға һалырға була. Тик сос, тырыш булырға ғына кәрәк.

Машинамдың артҡы тәҙрәһенә телефонымды күрһәтеп "Ябылған магазиндарҙың тауарын һатып алам", тигән иғлан ҡуйғанмын. Шылтратыуҙар әҙ түгел, ләкин барыһын да әйләнешкә алып булмай, сөнки мин үҙем өсөн иң файҙалы булырҙайын, һатып килем алып була торғандайын ғына һайларға тейешмен.

Фәүриә ӘДЕЛМУРЗИНА.

✓ *Кешене ҡапыл уятһаң, йәне ҡайтып өлгөрмәй. Шуға күрә баланы уятҡанда тәүҙә исеме әкрен генә әйтелә. Был, әлбиттә, мистик ҡараш. Шул уҡ ваҡытта ошолай һаҡлыҡ менән уятыуҙың үҙ мәғәнәһе бар.*



ЙОЛАЛАРЫБЫҘ

# БАЛА ТЫУҒАС...

**Яңы тыуған баланың донъяға килеүенә 1-2 сәғәт уҙғас, уны имеҙергә рөхсәт ителгән. Беренсе тапҡыр имеҙер алдынан сабыйға киләсәге бәхетле булһын өсөн бер балғалаҡ бал йәки һары (йәки күбек) май ҡаптырғандар. Имеҙеү осоро 1 - 1,5, ҡайһы ваҡыт 3-4 йәшкә тиклем һуҙылған. Имеҙгәндә ваҡыт билдәләнмәгән - бала, туйып, үҙе туҡтағансы имгән. Имергә теләге тыуа икән, йәнә имеҙгәндәр. Йәй көнө имсәк ташлатмағандар.**



Имеҙеүгә өҫтәп ашатыу 4-6 айҙан башланған. Тәүҙә һыйыр һөтө, һуынан, иҙеп, ғаилә ашаған бөтә төр ашамлыҡ бирелгән. Имеҙлек ҡулланылмаған. 3-4 йәштән алып, яҙғы-йәйге ваҡытта балаға ашатыу өсөн ҡыр йәшелсәһе, еләк-емеше киң ҡулланылған. Йыуа, ҡуҙғалаҡ, ҡаҡы һымаҡ үҫемлектәр эсәктәрҙәге паразит селәүсен-ҡорттарҙан ҡотолорға ярҙам иткән, зәңге ауырыуынан һаҡлаған.

Баланы беренсе тапҡыр йыуындырғанда һыуға бер семтем тоҙ һалғандар. Боронғолар әйтеүенсә, тоҙло һыуҙа сабыйҙың тиреһе "нығый" һәм тире ауырыуҙарына, боҙолоуға тиҙ бирешеп бармай. Яңы тыуған баланың сәсен ҡырғандар. Был сара сәс үҫеүҙе яҡшырта, сәс ҡуйыраҡ булып үҫә, тип иҫәпләгәндәр. Өҫтәүенә, сәсте ҡырыу баланың башын ҡаплаған ҡауаҡтың тиҙ бөтөүенә булышлыҡ иткән.

Башҡорт ғаиләһендә имсәк баланы мотлаҡ рәүештә биләгәндәр. Боронғолар фекеренсә, биләү баланың аяҡтарын кәкерәйеүҙән һаҡлай. Бала йоҡлағанда тулай, тибенә, йүргәге асылып китеп, һыуыҡ тейеүе бар, биләү ниндәйҙер кимәлдә ошонан да һаҡлай. Баланың тәне сейләнмәһен тип, йүргәк аҫтына ҡоро сөрөк онтағы һалғандар.

Балаларҙы эшһөйәр итеп тәрбиәләргә тырышҡандар. 3-4 йәшкә тиклем бала, ғәҙәттә, әсәһе янында булған. Аҙаҡ ҡыҙ бала әсәһе янында йөрөп, ҡатын-ҡыҙҙарға хас булған төрлө хужалыҡ эшенә, ә малайҙар атаһы эргәһендә йөрөп, мал ҡарарға, сәсеү эшенә һ.б. өйрәтелгән. Атай кеше йыш ҡына 4-5 йәшлек улын атҡа мендергән. Шуға ла инде башҡорттар оҫта һыбайлы булыуы менән дан тотҡан.

Баланы эшһөйәр итеп тәрбиәләүҙә иң элек ата-әсәнең өлгөһө мөһим роль уйнаған. Эшкә өйрәткәндә баланың көс-хәле лә иҫәпкә алынған. Мәҫәлән, 12 йәше тулмаған ҡыҙ балаға һыу ташырға рөхсәт ителмәгән. Ул һыу килтерә икән, уны эсеү гонаһ тип һаналған. 12 йәше тулмайынса ҡыҙҙарға үҙаллы аш-һыу әҙерләү рөхсәт ителмәгән.

Балалар тормошона физик культура һәм спорт иртә ингән. Хәрәкәткә ҡоролған төрлө уйындар, ярыштар йәш быуынға физик үҫеш, сынығыуҙан тыш, мораль-психик һәм эстетик тәрбиә лә биргән.

Балаларҙы физик яҙалау һирәк ҡулланылған, ул да булһа, бик тә тыңламаған баланың ултырыуына сәпәүҙән йәки семтеп алыуҙан торған. Башына, биленә хатта еңелсә һуғыу ҙа ҡәтғи рәүештә тыйылған, халыҡ тарафынан гәйепләнгән.

Баланы һаулыҡ һаҡлауға иртә өйрәткәндәр. Ашыҡмайынса, ныҡ сәйнәп ашарға, көсөнән килмәгән эшкә тотонмаҫҡа, тәртип-таҙалыҡ һаҡларға, энер төшкәс, сүп түгелгән ерҙә уйнамаҫҡа, һалҡын ергә ултырмаҫҡа һ.б. Бала-сағаның һаулығын нығытыуға тағы ла бер ғәҙәт ярҙам иткән. Хатта етеш йәшәгән ғаиләләрҙә лә 3-4 йәше тулған балалар йәй буйына яланаяҡ йөрөгән. Фән иҫбатлауынса, табандарҙы сыныҡтырыу бигерәк тә һыуыҡ тейеүҙән һаҡланыу йәһәтенән файҙалы.

Һәр кеше, бигерәк тә балалар һаулығында дөрөҫ һәм ваҡытында ял итеүҙең мөһим роль уйнағанлығы һәр кемгә билдәле. Борон башҡорттар баланың йоҡоһона айырыуса иғтибар биргән, бала ни тиклем йәшерәк булһа, ул шул хәтлем оҙағыраҡ йоҡларға тейеш, тип иҫәпләгәндәр. Ә бала ҙурайыу менән йоҡо ваҡыты сикләтелә. Самаһыҙ күп йоҡлауҙы ялҡау һәм булдыҡһыҙ кешеләргә хас сифат тип иҫәпләгәндәр.

Имсәк баланы атлай башлағанға тиклем бишектә йоҡлатҡандар. Баланы уң яҡ ҡабырғаға ятып йоҡларға өйрәткәндәр. Мендәрҙе үтә текә итеп тә, үтә түбән итеп тә һалырға тырышмағандар. Был баҫлығып һәм хырылдап йоҡлауға килтерә, тип иҫәпләгәндәр.

Башҡорттарҙа кешене ҡыҫҡырып йәки ҡапыл уятырға ярамаған. Йоҡоға киткәндә кешенең йәне осоп сығып китә, имеш. Кешене ҡапыл уятһаң, йәне ҡайтып өлгөрмәй. Шуға күрә баланы уятҡанда тәүҙә исеме әкрен генә әйтелә. Был, әлбиттә, мистик ҡараш. Шул уҡ ваҡытта ошолай һаҡлыҡ менән уятыуҙың үҙ мәғәнәһе бар. Сөнки ҡапыл уятып, кешене ҡурҡытып, нервы-психикаһын ныҡ ҡаҡшатырға мөмкин. Белеүебеҙсә, балаларҙың, бигерәк тә кесе йәштәгеләрҙең, үҙәк нервылар системаһы нығынып етмәгән була. Шуға күрә ҡапыл уятыу улар өсөн бигерәк хәүефле.

**Варис ҒҮМӘРОВ.**
**"Башҡорт халыҡ медицинаһы" китабынан.**

ЙӘН ӘРНЕҮЕ

# ИҢ ҘУР ГОНАҺ...

**Сит ҡалала йәшәүсе таныштарымдың ҡыҙы ирһеҙ тапҡан балаһынан баш тартҡан. Был хәбәрҙе, гәйбәт сифатында, кеше аша ғына ишеттем. "Етлекмәгән, барыбер йәшәй алмаҫ, тинеләр, ҡыҙыма хатта "үлде", тигәндәр", - тип һөйләгән икән өләсәй була торған бисә. Унан "Үгәй атаһы үҙен этеп-төртөп үҫтерҙе, хәҙер ул баланы яҡлашып, талашып ултырыр хәлем юҡ", тип тә аҡлана икән.**




Төптө буш хәбәр! Баланан баш тартыу өсөн әллә күпме ҡағыҙҙар тултыраһың, бер бәләкәй генә башҡорт ҡалаһында ниндәй табип һиңә: "Алмағыҙ, үлә ул", - тип торһон. Шундай эште хәл итеү ҙә бер көнлөк мәшәҡәт түгел. Аҙна буйына шул ҡағыҙҙар артынан йөрөгәндә ғаиләләгеләрҙең, туғандарының беренеһең миһырбанлығы уянманымы икән ни?

Улар үҙҙәре билдәле кешеләр. Фатирлы, машиналы, эшлеләр. Ә бер бармаҡ башындай баланы һыйҙырырға урын тапмағандар. Һәүетемсә йәшәп яталарҙыр, көләп һөйләшәләрҙер, ултырып ашайҙарҙыр ҙа, ятып йоҡлайҙарҙыр... Шул мәл, бер генә мәлдә, ҡайҙалыр имсәк эҙләп тамшанған баланы иҫләп китеп, йәндәре һыҙламай микән? Ошо һорауҙы бик тә биргем килә шуларға...

Тыума (тума) тиҙәр беҙҙең яҡта ирһеҙ табылған баланы. Йәғни, тыума - донъяға яралма, йәшәмә мәғәнәһендәлер инде. Был, әлбиттә, ҡыҙ намыҫы, ғаилә намыҫы һ.б. төшөнсәләрҙе аяҡ аҫтына һалып тапауҙы хупламауҙы күрһәтә. Никахһыҙ, бәйһеҙ тормош алып барыу, тәрбиәһеҙлек, шул уҡ ваҡытта ялыһыу, алданыу, бәхетһеҙ мөхәббәт емештәре лә булырға мөмкин был сабыйҙар. Әммә, нисек кенә булмаһын, уны Аллаһы Тәғәлә был донъяға яралтҡан, йән биргән. Нисек итеп беҙ, ябай кешеләр, уға "Тыума" тип әйтә алабыҙ?

Үрҙә әйткәнемсә, теге өләсәй булған ҡатындың күңелендә берәй тойғо уятҡым килеп, интернет аша булһа ла һалайым әле, тип, дини яҙмаларҙан бала ҡалдырыусы ҡатындарға төбәлгән тәрбиәүи нәсихәттәр эҙләй башланым. Һәм... тапманым. Был ҡырағайлыҡ диндә ҡаралмаған да икән хатта. Кеше һынлы кеше, әсә кеше, ундайға бара алмай, тигәндер Аллаһ та.

Күптән түгел интернет селтәрҙәрендә бер ҡатындың бала табыу йортонда ташлап киткән ҡыҙын килене йөҙөндә танығанын уҡығайным. Икенсе ҡатын телетапшырыуҙа: "Ташлап киткән баламдың илаған тауышы ныҡ мейемә һеңеп ҡалды һәм ғүмер буйы килер бәхетһеҙлектәрем алдынан шул ауазды ишетер булдым", - тип һөйләй. Унан килә, тормош тәжрибәһе күрһәтеүенсә лә, бала ҡарғышы алған ҡатындарҙың, уларҙы етемлеккә дусар иткәндәрҙең язаһын алыуына икеләнергә лә түгел. Хоҙай бит инде уларға был баланы һынау итеп биргән, улар уны бәлә, мәсхәрә итеп ҡабул итеп, баш тартҡан. Яуап биреү юлдары иһә нисек кенә булмаҫҡа мөмкин...

Балаларының ошондай хата аҙымын сабырлыҡ менән күтәреп, бында үҙ гәйептәрен дә танып, гонаһһыҙ сабыйҙарҙы тейешенсә ҡабул итеп алған күп кенә ата-әсәләрҙе, өләсәй-олатайҙарҙы беләм. Заманында үҙемә туған тейешле бер студент ҡыҙҙы, бала табыу йортонан барып алып, атаһы ғәфү иткәнсе хатта үҙемдә йәшәтеп торорға ла тура килгәйне. Бөгөн ул бала шул олатай-өләсәйҙең уң ҡулы булып, төп терәге булып йәшәй. Яратып туймайҙар үҙен. Олатаһы, шулай, тура килеп һөйләшкәндә: "Балабыҙға башта булған хәлдәрҙе әйтеп ҡуйма инде", - тип тә иҫкәртте.

Икенсе таныштарым етлекмәгән генә яңы тыуған ҡыҙ баланы алып тәрбиәләне. Бик яй үҫте ҡыҙыҡай, әсәһе, белдермәйем, тип, эсен бәйләп йөрөгәндән, тигәндәр. Шул ҡураҡас ҡынаны эшкиндереп, кеше итеп алды йөрәкле әсә. Әле "биш"кә генә уҡып йөрөй. Бына бит, кешелеклек бар ерҙә бәхет тә бар.

Әлбиттә, берәүгә лә "Баланды ташлама" тип төбәп кенә аҡыл өйрәтеп булмай, закон рөхсәт итә, йәмғиәт күҙ йома. Ун һигеҙ йәшлек ҡыҙҙың ата-әсә һүҙенә ҡаршы бара алмауы ла мөмкин. Иргә ярайым, тип, башта үҙ баландан, унан баландың балаһынан йөҙ бороу, уларҙы әсәйле булыу бәхетенән мәхрүм итеү - ҡатын-ҡыҙҙың был донъяла яһай алған иң ҙур гонаһылыр, моғайын. Хоҙай ҡөҙрәте булып, шундай ҡатындарҙың йөрәге асылып китһен ине лә бит...

**Лилиә ИСМӘҒИЛЕВА.**

**✓ Ишмырҙа һаман йырлай. Кеше ишетмәһен тип, шым, һаҡ ҡына башлағайны ла, йырҙы йәшереп, ҡурҡып йырлап буламы ни, "Буранбай" төрмә кәртәһенә һыйманы, тышҡа бәреп сыҡты, күккә олғашты.**






Ысынлап та, һорау сәйер ине: дуҫлыҡ өсөн тиер инең, һуғышып төрмәгә ултырған кешеләр, осрашыу өсөн тиер инең, осрашҡандарына байтаҡ ваҡыт үтеп китте. Ишмырҙа ҡулын һелтәне:

- Былай ғына ебәр ҙә ҡуй! - Үҙе тамшанып шешәгә ҡараны. Тегенең һаман һөйләнеп тороуына асыуы килә башланы.

- Ярый, дай бог не первый, не последний раз! - Мәснәүи "һуһ!" тип өрөп ҡуйҙы, башын артҡа саңҡайтты ла ауыҙын асты, шунан ауыҙына шешәнән араҡы ҡоя башланы. Ул йотмай, ә бер һауыттан икенсе һауытҡа бушатҡан кеүек кенә ҡоя.

Ишмырҙа ҡарап тора, аптырай ҙа, һоҡлана ла: ниҙәр генә белмәй был татар. Әллә элек тә бер ултырып сыҡҡанмы икән? Борсола башланы - ҡоя ла ҡоя, бөтөрә бит! Ҡулынан тотайым тиһәң, йә төшөрөп ебәрер!

- Эй, етер, ҡалдырмайһың да баһа!

Мәснәүи ошо һүҙҙе көтә ине лә, тағы бер аҙ ҡойҙо ла турайып баҫты, шешәне баш бармағы менән сәнсеп тотҡан урынын күрһәтте:

- Монда, брат, барсы да исәпләнгән! Араҡы ысынлап та артыҡ ныҡ кәмемәгәйне.

- Мин ни, яртыһын ҡойҙоң, тип торам! - тип йылмайҙы Ишмырҙа.

- Беләсеңме, дус, алкаш белән профессор спорить иткән ди: кем тигезрәк бүлә! Профессор - мензурка, ә алкаш "булк-булк" белән исәпли, ди. Вот алкашныкы профессорныкынан дөресрәк чыккан. Әйдә, жиффәр!

- Мин улай булдыра алмайым.

- Алайса, мин эчкәнне карап кына торасың инде! - Мәснәүи кинәнеп көләп ебәрҙе. - Я столовый директорына барып путаллы рюмка сорыйсың.

- Ҡапыл эсһәң, иҫертеп кителер әле ул, аслы-туҡлы йөрөгән кешегә ни күпме кәрәк... - Ишмырҙа шешәне ҡулына алды. Ул Мәснәүи шикелле ҡоя белмәй, ауыҙына ҡапты ла быҙау шикелле имергә тотондо. Бер-ике лә йота алманы, сәсәй башланы. Ҡып-ҡыҙыл булып китте, күҙенән йәш сыҡты. Араҡы яңылыш тын юлына китте.

Мәснәүи тиҙ генә шешәне тартып ала һалды. Төшөрөп вата бит!

- Их син, башкорт, кымыз эчеп кенә яшәргә кирәк сина! - Ул кеҫәһенән икмәк ҡатыһы сығарҙы. - Шушыны чәйнәп йот!

- Әбрәкәйҙә икмәк ашап тороу гонаһ та инде... - Ишмырҙа йәшле күҙҙәре менән иптәшенә ҡараны.

- Күп сөйләнмә, йот! Үтә ул. Алайса, аракы эчү дә гонаһ!

Ишмырҙа икмәкте теләр-теләмәҫ кенә алды ла тамағын ҡыра-ҡыра сәйнәргә тотондо. Шунан араҡы йотоп ҡуйҙы. Үтте, ахырыһы.

Ишмырҙа дөрөҫ әйткән, араҡы быларҙың баштарына тиҙ сыкты: ашҡаҙан хәмерҙе онотҡан, ә үҙҙәре аслы-туҡлы йөрөгән кешеләр. Былар уға бошманы, эскәс иҫерелер инде, шуның өсөн маташабыҙ ҙа баһа. Уның ҡарауы, кәйеф күтәрелде, тел тоҡсайҙары сиселде - бәҙрәф иҙәнендәгене иҙгеләп, бер-береһен бүлә-бүлә һөйләшергә тотондолар.

Башта "цыган"ды аҡылға ултыртыуҙары менән маҡтаныштылар, суд хаҡында, тәфтишселәрҙе иҫкә төшөрҙөләр. Шунан һүҙ үҙенән-үҙе былтыр көҙ боларышып киткән мәлгә килеп терәлде. Апаруҡ ҡыҙмаса булһалар ҙа, һүҙ ошонда еткәс, тел тотлоҡто, бер-береһенә ҡарамайынса ғына тын торҙолар. Икеһе лә эстән генә, бына һинең арҡала эләктем ошо урынға, тип уйлайҙар ине шикелле. Әммә һүҙ сығарғылары, береһенең дә мәжлесте боҙғоһо килмәне. Мәснәүи ихлас ҡына итеп:

- Слушай, Ишморза дус, шул суверенитет дигәне нәрсә була соң ул? - тине.

- Әллә... - Ишмырҙа кинәйә менән әйтте лә көләп ҡуйҙы. - Килделәр ҙә әйттеләр, Өфөгә барырға кәрәк, унда кеше күп булырға тейеш, тинеләр. Һинең тауыш шәп: "Башҡортостан!", "Суверенитет!", "Долой!", "Отставка!" тип ҡысҡырырға тура киләсәк. Кеше ни эшләй, шуны эшләрһегеҙ, тинеләр. Ултырып киттем дә барҙым, көҙ бит инде, эш бөткән, бушлай Өфөгә барып ҡайтыуы ни тора.

- Мин дә шул кешегә иярдем дә киттем инде. Бер аз салган идек. Минем күршедә бер шеботной гына адәм бар, шул котыртты. "Анда суверенитет бирәләр икән. Башкортлар үзләре генә алырга йөриләр, ди, әйдә!" - диде. Ярар. Ишморза дус, үкенмик, шушында килеп эләкмәсәк, бер-беребезне белмәй үлеп тә китер идек. Шәп кешеләр булып чыктык бит!

- Уныһы шулай... - Танышыуҙарына, ошонда килеп эләгеп, ҡайҙандыр араҡы табып эсеп, күнел бушатып тороуҙарына Ишмырҙа ла ҡәнәғәт ине. - Тик, баяғы, ҡайһы ваҡыт бик ҡайтҡы килеп китә...

- Кайтырбыз, бер кая да качмас. Ирмен дигән кешегә тәрмәсен дә күрергә кирәк анын, шулай түгелме? Кара әле, Ишморза дус, син башкорт бит, случайно жырламыйсыңмы? Шул башкорт жырлары өчен үләм бит мин!

Ишмырҙа ысынлап та йырлай, хатта арыу ғына йырлай. Моң әле лә күкрәгән йыртып сығып бара. Башҡа урында булһа, әллә ҡасан ебәргән булыр ине, тик көсләп тотоп ҡына тора.

- Былай йырлаштырам... - тигән булды ул.

- Чынмы? Озон көйләрнеме? Җибәр әле, дус, башкортның иң озынын!

- Бында ярамаҫ ул, әй...

- Слушай, син никогда куркып яшәмә! Законга каршы эш эшләмисең бит, жыр жырлыйсың! Давай, только иң озынын!

Иптәшенең үҙен шулай боттлап тороуы Ишмырҙаға тәүәккәллек бирҙе. Араҡы үҙенекен эшләне - төрмә лә, әбрәкәйе лә онотолдо. Ишмырҙа, ниҙелер иҫенә төшөргә теләгәндәй, ситкәрәк ҡарап торҙо, ҡаш-тары ыҙылды, күҙҙәре моңһоуланды, иларға йыйынғандай йөҙөн йыйырҙы. Ҡараштарын бер таҡта ярығына текәне лә йырлап ебәрҙе.

Таба-а-аҡ та ғына, табаҡ, ай, аҡ ҡағы-ыҙ, Буранбайҙың яҙған хаттары-ы...

Сәйер, һөйләшкәндә кешенән бер, ә йырлағанда бөтөнләй икенсе төрлө тауыш сыға икән. Ишмырҙаның тауышы нескәрҙе, нәфисләнде, ғүмер ҙә уйламаған моң ағыла башланы. Мәснәүи ҙур, зәңгәр күҙҙәрен быға текәгән дә ышанмаған кеүек тора. Бар ҡарашы: "Әйдә, давай, дәвам ит, өзә генә күрмә!.." - тип ялбара. Төрмә робаһы кейгән, сәсен таҡырлап алдырған был байғош ҡапыл өҫтөнә уҡалы елән, башына ҡамсат бүрек, аяғына быҙлы сафьян итек кейгән буй етмәҫлек затҡа әйләнде лә ҡуйҙы.

Ишмырҙа һаман йырлай. Кеше ишетмәһен тип, шым, һаҡ ҡына башлағайны ла, йырҙы йәшереп, ҡурҡып йырлап буламы ни, "Буранбай" төрмә кәртәһенә һыйманы, тышҡа бәреп сыкты, күккә олғашты. Ишмырҙа тауышын шәбәйткәндән-шәбәйтә: йыр ҙа, йырлау ҙа һағындырған. Етмәһә, онотолоп китеп тыңлаусыһы ла бар. Йырсы өсөн бер тыңлаусы булыуы ла етә бит ул! Рәхмәт инде Мәснәүи дуҫына, әлдә һүҙ сығарҙы, юғиһә, йырлау онотолоп бара һымаҡ ине.

Бураанбайҙың яҙған хатын уҡып, ай, Зар илайҙар ауыл ҡарттары-ы-ы...

Нескә генә башланған йыр тамаҡ төбөнән сыҡҡан баһадирҙарса ҡалын тауыш менән бөтөп ҡуйҙы. Хәтәр булды! Икеһенә лә ныҡ тәьҫир итте. Моно ла, һүҙҙәре лә.

Ишмырҙа дуҫына ҡараны. Әтеге ҙур күҙҙәрен сылт-сылт йомғолап тора, керпектәренән йәш йылтырай. Йырсының үҙенең дә тамағына төйөр тығылды. Икеһе лә аҫҡа ҡараныла. Бер аҙ торғас, Мәснәүи дуҫын яурынынан ҡосаҡлап алды.

- Их, Ишморза, кайларда әрәм булып ятмый безнең башлар! Дураклар инде!.. Пожалуйста, тагын берне жырла әле! Зинһар, берне генә...

Ишмырҙаға ялыныу кәрәкмәй ине инде, тик шулай фатиха ғына бирһендәр. Суҡынып китһен төрмәһе, "гражданин начальник"тары. Ул тамағын ҡырып алды ла, ярһыуын баҫа алмаған ат шикелле, тағы ла көслөрәк тауыш менән йырлап ебәрҙе:

Кантон да ғына-а, кантон килгән, тиҙәр-әү, Килгән кантондарҙан ҡаҡшаныҡ. Яуыз кантондарҙы ҡуя ла икән-әй Рәсәй ҙә генә-әй тигән батшалыҡ...

Етте! Булды! Күңелдәре тулған байғоштар бәҙрәф ярығынан төшкән яҡтыға ҡарап торҙолар. Бер ни әйтке килмәй, тик уйҙар ғына йүгергеләй. Мәснәүи салбар ҡайышына ҡыҫтырыулы шешәне сығарҙы, яҡтыға ҡуйып, күпме ҡалғанын самаланы. Шунан моңһоу ғына тауыш менән:

- Әйдә тагын берәрне салыйк әле! - тине. - Жыр өчен. - Улар, стакан-фәлән булмаһа ла, ғәҙәт буйынса "һалайыҡ" тип һөйләшәләр ине.

Араҡының күпме ҡалғанын да, самалабыраҡ тотоноп оҙағыраҡ һуҙырға кәрәк икәнен дә аңлайҙар, ыһылдашып берәр йотом ғына йоттолар ҙа шешәне Мәснәүи салбар ҡайышына тығып ҡуйҙы. "Закуска" тип икмәк ҡатыһы ҡабып торманылар, ауыҙҙары зәһәргә күнеккәйне.

- Бик хәтәр жырлар бит! Каян беләсең син аларны, Ишморза дус? - Мәснәүи ихластан һораны.

- Халыҡ сығарған йырҙар инде... - тигән булды Ишмырҙа. - Кешенән ишетәһең дә йырлайһың. Һәр береһенең тарихы бар, тик мин уларҙы ныҡлап белмәйем. Буранбай батша заманында йәшәгән, уны һөргөнгә ебәргәндәр ҙә, шул кешегә ошо йырҙы сығарғандар. Мин шул Буранбайҙың тоҡомо булам...

- Ныу-у! - Мәснәүиҙең күҙҙәре табаҡтай булды. - Син шундый зур кешеме ни әле?

- Төрмәлә ултырғас, ҙур кеше буламы ни! - Ишмырҙа әсенеп кенә йылмайҙы. - Әллә, олатайым, беҙ шул Буранбай нәҫеленән, тип һөйләй торғайны.

- Сөйләгәч, дәрестер инде, картлар белми сөйләми ул. Әнә бит, фамилияң да Буранбаев! Мин жырны бик яратам. Үзем дә жырлаштырам, правда, синең кебек үк түгел инде, мәжлестә генә. Башкортлар жырчы халык бит инде!

- Мәснәүи, давай йырлашҡас, йырлашайыҡ әле. Әйҙә, һин дә берәй оҙондо...

- Кы... - Мәснәүиҙең күҙҙәре янып китте, уға ла рух килде. - Минем бик озыннан булмас инде. Алайса, бер авыз чылатып алыйк, - тип берҙе йотоп ҡуйҙы. Шунан Ишмырҙа шикелле йөҙөн йыйырып, әлеге таҡта ярығына ҡараны. Ҡапыл тәүәккәл тауыш менән ҡысҡырып йырлап ебәрҙе:

Гори, гори, моя звезда-а, Звезда любви, приветная-а! Ты у меня одна заветная-я, Другой не будет никогда-а-а!

Йыр башланыу менән Ишмырҙа әллә нишләне лә ҡуйҙы: тәндәренән һалҡын юлаҡтар земберләп үтте, баш мейеһе тартышҡандай итте. Был ни эш? Кем был? Татар тигәне урыҫ булып сыҡтымы ни? Ана бит, күҙҙәре зәңгәр, сәсе һап-һары, теле урыҫ. Үҙе лә урыҫ! Әллә Ишмырҙаны, әллә Мәснәүиҙе ен алмаштырҙы? Әллә иҫереп китеп күҙенә генә күренәме? Әле генә шундай яҡын күренгән кеше бөтөнләй икенсе затҡа әүерелде лә ҡуйҙы.

Ә Мәснәүи, баяғы Ишмырҙа шикелле, бар кинәнестән йырлай бирҙе:

Умру ли я, и над могилою, Гори, сияй, моя звезда-а-а!..

Йыр тамам. Мәснәүи, йырлап бөткәс, йә, нисек, тигәнде аңлатып, быға ҡараны. Ишмырҙа белә, йырсыны маҡтарға кәрәк, һәр йырсы шуға мохтаж. Әммә ул һаман шаңғып тора. Кем булды һуң был? Урыҫмы, әллә керәшен - суҡынған татармы?

Теге, татарсалап, "Я, ничек?" тигәс кенә күңеленә йылы инде. Шулай ҙа Ишмырҙа аптырашын йәшерә алманы:

- Нишләп урыҫса йырлайһың ул? Татарса йырлай алмайһыңмы ни?

- Кая син жыр, сөйләшкәнгә дә рәхмәт әйт! Мин бит кечкенәдән Уфада үстем. Архирей жулигы!

- Өйҙә лә урыҫса һөйләшәһегеҙме?

- Шулай инде, минем хатын урыс ла!

- Урыҫ, ти? Нисек урыҫ ҡатын?

- Соң, урыс түгел икән, маржа! Кара йөрәк нәселеннән... - Мәснәүи йылмайған булды.

- Балаларың да урыҫмы? - Бер ҡатлы Ишмырҙа һаман ныҡыша бирҙе.

Мәснәүиҙең түҙеме бөттө:

- Ай аптыраттың бит! Үзең әйтмешли, каңгыртма әле башымны. Маржадан тугач, урыс була инде. Уфада тор да еще! Мин әле ладно, анда татар белән татарның баласы урыс булып туа!

(Дауамы. Башы 38-41-се һандарҙа).

ИНТЕРНЕТТАН



# ЙОМОРТҠА АШАҒЫҘ!

■ Йомортҡаның ҡабығы сәләмәтлек өсөн файҙалы. Баҡтиһәң, ул үҙенең составы буйынса һөйәк туҡымаһына оҡшаған һәм унда эремсек һәм йомортҡаның үҙенә ҡарағанда кальций күберәк. Венгрия тикшеренеүселәре үткәргән һынауҙар күрһәтеүенсә, йомортҡа ҡабығында организм өсөн кәрәкле бөтөн элементтар бар. Бынан тыш, ул рахит һәм анемия менән яфаланыусы балаларға файҙалы.

■ Каролина Эриксон етәкселегендәге тикшеренеүселәр төркөмө билдәләүенсә, йөрәк һәм йөрәк-ҡан тамырҙары системаһы эшмәкәрлеген боҙоу өсөн ҙур булмаған тауыш та етә. Эксперимент барышында 110 кеше йөрәк ритмын теркәп барыусы портатив мониторҙар йөрөткән. Медицина хеҙмәткәрҙәре улар булған урындарҙа тауыштың кимәлен тикшергән. Һөҙөмтәләр күрһәтеүенсә, тауыш 65 децибелға ғына күтәрелһә лә (ул ҡысҡырып һөйләшеүгә тиң), йөрәк ритмы шунда уҡ көсәйә икән. Шуға ла тауыш көслө булған урындарҙа йөрәк өйәнәге ихтималлығы ла арта.

■ Еләк-емеш ашау Паркинсон ауырыуынан һаҡлай ала, ти Гарвард һәм Көнсығыш Англия университеттары экспарттары. Ғалимдар 20 йыл дауамында 130 мең кешене тикшергән, ошо ваҡыт эсендә уларҙың 800-өндә Паркинсон ауырыуы күҙәтелгән. Белгестәр уларҙың туҡланыу рационы һәм сирҙәре араһында бәйләнеш тапҡан һәм ауырыуҙар исемлегендә флавоноидтарға бай еләк-емеште аҙ ҡулланыуын асыҡлаған. Был матдәләргә бай аҙыҡты күп ҡулланыусылар Паркинсон ауырыуы менән 40 процентҡа һирәгерәк ауырыған. Аҙнаһына бер ус еләк ашау ҙа ҡартая барыусыларҙың баш мейеһе зарараланыу ҡурҡынысын 25 процентҡа түбәнәйтә. Бынан тыш, рационға еләк-емеш индереү ҡан баҫымын нормаға килтерергә, йөрәк эшмәкәрлеген яҡшыртырыға, яман шеш булдырмаҫҡа ярҙам итә.

■ Кеше нимә ашай, шул уның тиреһендә асыҡ сағыла, тиҙәр. Ниндәйҙер микроэлемент етмәһә, матдәләр алышыныу процесы шунда уҡ боҙола башлай. Шулай итеп, тирене йәш һаҡлау өсөн ниндәй витаминдар кәрәк һуң? С витамины коллаген епсәләре барлыҡҡа килеүендә ҡатнаша. С витамины етерлек булғанда, тире күгәреп бармай, күҙәнәктәр ҙә әүҙемерәк яңыра. Был витамин аҙыҡ-түлек менән етерлек ҡулланылырға тейеш, ул йәшелсә, емеш-еләктә, мәҫәләнән, ҡара ҡарағатта, цитрус емештәрендә, паприкала, шпинатта, кивила, сельдерейҙа күп. Е витамины тирене ультрафиолеттың насар эҙемтәләренән һаҡлай. Ул балыҡтың майлы сорттарында, йомортҡала, үҫемлек майҙарында, сәтләүектәрҙә бар. А витамины етешмәһә, тире кибә башлай. Тырнаҡтарҙың, сәстәрҙең сәләмәтлеге лә А витамины менән бәйле. А витамины сығанаҡтары - аҡ май, ҡабаҡ, эремсек, һыйыр бауыры.

■ Баҡса еләге көслө антиоксидант. Ғалимдар билдәләүенсә, еләк ашау йөрәкте һаҡлай, диабетты булдырмай, матдәләр алышыныу процесын көйләй. Ике аҙна дауамында көнөнә ике стакан еләк ашау ҡандың составын яҡшырта. Төрлө стрестар, физик арыу, матдәләр алышыныу насарайыуы һөҙөмтәһендә ҡан әселеге көсәйә. Шул мәлдә хроник сирҙәр көсәйә башлай. Белгестәр организмдың әселәнеүе кешенең ҡартайыуына булышлыҡ итеүсе төп фактор, ти.

■ Ҡыҙыл төҫ - кешене ярһыта ала. Яңы һынауҙар күрһәтеүенсә, ҡыҙыл төҫкә ҡарап ҡына өҫтәмә энергия заряды алырға була. Шуға ла арып китһәгеҙ, берәй ҡыҙыл әйбергә ҡарағыҙ. Ҡыҙыл төҫ хәүефте аңлата, шуға ла ул нервы системаһы эшен, мускулдар көсөргәнешен әүҙемләштереп ебәрә.

БАШҠОРТ ТАРИХЫ ЙЫЛЫ

# ЫРЫМБУР ГУБЕРНАҺЫ ТАРИХЫНАН



**Ҡыштым Үрге тимер етештереү заводын** Ҡыштым йылғаһында Н.Н. Демидов төҙөй. Ике домнаһы һәм 12 йәмшәйтеү сүкеше була. 1755-1756 йылдарҙа Ҡыштым һәм Кәҫле заводтарына Краснослобода өйәҙе крәҫтиәндәре теркәлә: 1755 йылда - 1280 кеше; 1756 йылда - 2499 кеше (хәҙер завод биләмәләре урынында Силәбе өлкәһенең Ҡыштым ҡалаһы урынлашҡан).

**Ҡыштым Түбәнге (Кеслим) тимер етештереү заводын** 1760 йылда Кеслим йылғаһы буйында Берг-коллегия указы буйынса Н.Н. Демидов төҙөй. Заводтың 3 йәмшәйтеү сүкеше була.

**Нәҙе-Петровск (Урайым) тимер етештереү заводын** 1746-1747 йылдарҙа Нәҙе йылғаһы буйында П.И. Осокин төҙөй. Ер Ҡатай улысы башҡорттарынан оброкка алына. Заводтың бер домнаһы, 29 крица сүкеше була. Заводҡа 131 кеше теркәлә, 45 кеше Тула вотчинаһынан күсерелә. 1751 йылда Осокин заводын Мосоловтарға 27 меңгә һата. 1754 йылда Мосоловтар заводҡа башҡорттарҙан 30 һумға 70000 дисәтинә ер һатып ала, йәғни дисәтинә өсөн сирек тин генә түләй (хәҙер Силәбе өлкәһенең Нәҙе-Петровск ҡалаһы).

**Покров тимер етештереү заводы.** Төҙөлөш эштәре 1753 йылда Суун-Ҡыпсаҡ һәм Үҫәргән улысы башҡорттарынан алынған ерҙәрҙә Оло һәм Кесе Ыҡ (Ыйыҡ) һәм Һүрәм йылғалары буйында граф Шувалов тарафынан башлана. 1755 йылда башҡорт ихтилалы ваҡытында емерелә. 1757-1759 йылдарҙа яңы урында тергеҙелә. Заводҡа Ырымбур губернаһында 100 һәм Яйыҡтың һул яғындағы 12 рудник беркетелә. Дүрт иретеү мейесенә һәм ике горнға эйә була. Завод ҡарамағында 100 ихатала эшселәр була. Эште ялланған эшселәр башҡара. 60-сы йылдарҙа завод Журавлевҡа, һуңыраҡ И.Б. Твердышевҡа һатыла (хәҙер Йылайыр районы территорияһы).

**Преображенский баҡыр иретеү заводы** Ырымбур губерна канцелярияһы указына ярашлы 1750 йылда Урман-Йылайыр йылғаһы буйында И.С. Мясников һәм И.Б. Твердышев тарафынан төҙөлә. Ер Үҫәргән һәм Бошмаҫ-Ҡыпсаҡ улысы башҡорттарынан һатып алына. Заводтың 6 иретеү мейесе була. Завод ҡарамағына 130 ихаталағы һатып алынған крәҫтиән инә (хәҙер Йылайыр районының Йылайыр ауылы).

**Серге Үрге тимер етештереү заводы** Серге йылғаһы буйында Заводтарҙың баш идараһы канцелярияһы указы буйынса 1740 йылда Демидов тарафынан төҙөлә. Ере Чирли һәм Өпәй улысы башҡорттарынан һатып алына. 1 домнаһы, 6 йәмшәйтеү сүкеше була. Заводта 150 ихатала эшселәр һәм 1513 приписной крәҫтиәндәр була.

**Серге Түбәнге тимер етештереү заводы** Демидов тарафынан 1744 йылда Заводтарҙың баш идараһы канцелярияһы күрһәтмәһе буйынса, Үрге Серге заводынан 15 саҡрым алыҫлыҡта төҙөлә. 1 домнаһы һәм 6 йәмшәйтеү сүкеше була (хәҙер Түбәнге Серге - Свердловск өлкәһендәге ҡала, Үрге Серге - ҡасаба).

**Эҫем тимер етештереү (сүкешле) заводы** И.Б. Твердышев һәм И.С. Мясников тарафынан 1759 йылда Берг-коллегия указына ярашлы һалына. Ерҙе Шайтан-Көҙәй улысы башҡорттарынан һатып алалар. 9 йәмшәйтеү сүкеше була. Эште ялланған эшселәр башҡара (хәҙер Силәбе өлкәһенең Эҫем ҡалаһы урынлашҡан).

**Спасс баҡыр иретеү заводын** П.И. Рычков 1761 йылда Берг-коллегия указы буйынса төҙөтә. Ике, һуңыраҡ 4 иретеү мейесе була.

**Троицк Үрге баҡыр иретеү заводын** И.Г. Осокин 1752 йылда Ырымбур губерна канцелярияһы менән контракт буйынса Ҡыйҙаш йылғаһы буйында төҙөй. Завод һалыу өсөн ер Ҡыр-Йылан, Әйле улыстары башҡорттарынан оброкка алына. 4 иретеү мейесе (1768 йылдан һуң - 6) һәм 2 горны була.

**Троицк Түбәнге баҡыр иретеү заводы ла** Осокин тарафынан 1761 йылда төҙөлә һәм шул уҡ территорияла урынлаша. Иретеү мейесенә эйә була. Ике заводҡа 367 теркәлгән крәҫтиән беркетелә (хәҙерге Туймазы районы территорияһына ҡарай).

**Троицк Һатҡы тимер етештереү заводы** Берг-коллегия указы буйынса 1759 йылда Һатҡы йылғаһы буйында А.С. Строганов тарафынан төҙөлә. Ер Ҡыуаҡан һәм Әйле улыстары башҡорттарынан һатып алына. Заводта 800 оҫта һәм эшсе эшләй, улар Строгановтың Пермь вотчинаһынан килтерелә (хәҙер Силәбе өлкәһенең Һатҡы ҡалаһы).

**Өҫән-Ивановка баҡыр иретеү заводын** 1761 йылда Берг-коллегия указына ярашлы Өҫән йылғаһында И.Г. Осокин төҙөй. Завод өсөн ер Әйле улысы башҡорттарынан оброк ҡулланыуына алына (хәҙерге Бәләбәй районы территорияһы).

**Ҡатаутамаҡ тимер етештереү сүкешле заводы** Ырымбур тау начальствоһы указы буйынса 1758 йылда Ҡатай йылғаһы буйында Иван-Ҡатай заводына ярҙамсы булараҡ, И.Б. Твердышев һәм И. С. Мясников тарафынан төҙөлә (хәҙер завод территорияһында Силәбе өлкәһенең Ҡатаутамаҡ (Ҡатайтамаҡ) ҡалаһы урынлашҡан).

**Өпәле тимер етештереү заводы** П.И. Осокин менән Ырымбур губерна канцелярияһы араһында төҙөлгән контрактҡа ярашлы, 1747 йылда Себер даруғаһы Шуран волосы башҡорттарыерендә Өпәле йылғаһы буйында төҙөлә. Ҙур территория һәм урмандар ни бары 50 һумға һатыла. 1761 йылда заводты И.П. Мосолов һатып ала (хәҙерге Силәбе өлкәһе территорияһы).

**Шәрмәйет баҡыр иретеү заводы** 1760 йылда Берг-коллегия указы буйынса Тол (Тулва) йылғаһы буйында А.И. Глебов тарафынан төҙөлә. Заводҡа Ғәйнә улысы башҡорттары ерҙәре бирелә.

**Йүрүҙән-Иванов (Йүрүҙән) тимер етештереү заводы** 1758 йылда Сенат указы буйынса Йүрүҙән йылғаһында И.Б. Твердышев һәм И.С. Мясников тарафынан төҙөлә. Заводҡа Шайтан-Көҙәй башҡорттары ере бирелә. Ике домнаһы, 16 горны, 16 йәмшәйтеү сүкеше була. Завод ҡарамағында һатып алынған крәҫтиәндәрҙең 160 ихатаһы була (хәҙер завод урынында Силәбе өлкәһенең Йүрүҙән ҡалаһы урынлашҡан).

Административ йәһәттән 1708 йылда башҡорттар Өфө провинцияһына инә. 1744-1781 йылдарҙа Өфө провинцияһы ул ваҡытта ойошторолған Ырымбур губернаһына ҡарай. 1744 йылда Ырымбур губернаһына быға тиклем Себер губернаһының бер өлөшө булып торған Исәт провинцияһы (Башҡортостандың Урал аръяғы) ла керә. Үрҙә әйтеп кителеүенсә, Ырымбурҙың беренсе генерал-губернаторы И.И. Неплюев була (идара итеү йылдары: 1744-1761), артабан Д.В. Волков (1762-1766), А.А. Путятин (1767-1769), И.А. Рейнсдорп (1769-1781), О.А. Игельстром (1796-1798), Н.Н. Бахметов (1798-1803), кенәз Г.С. Волконский (1803-1817), граф П.К. Эссен (1817-1830), граф П.П. Сухотелин (1830-1833), граф В.А. Перовский (1833-1842), В.А. Обручев (1842-1850), В.А. Перовский (1850-1857), А.А. Катенин (1857-1859), А.П. Безак (1859-1865), Н.А. Крыжановский (1865-1882) губернатор була.

Улар край тормошонда төрлө эҙ ҡалдыра. Әгәр И.И. Неплюев үҙенең ҡанһыҙлығы, йәнһеҙлеге менән ай-

✔ ***1865 йылда яңы административ реформа барышында Ырымбур губернаһы ике үҙ аллы - Өфө һәм Ырымбур губернаһына бүленә. Өфө губернаһына Бәләбәй, Бөрө, Минзәлә, Стәрлетамаҡ, Златоуст һәм Өфө өйәҙҙәре инә.***



ырылып торһа, үҙен башҡорт халҡының палачы итеп күрһәтһә, либерал ҡарашлы В.А. Перовский кантон идараһы системаһын индерә, уның инициативаһы буйынса башҡорттар аҡсаһына Каруанһарай төҙөлә. Граф П.К. Эссен етәкселек иткән ваҡытта 1825 йылда Неплюев хәрби училищеһы асыла, 1844 йылда ул Кадет корпусына әйләндерелә. Ул крайҙың мәҙәни тормошонда, донъяуи зыялыларҙы әҙерләүҙә яҡты эҙ ҡалдыра. М. Биксурин, М. Өмөтбаев шунда белем ала.

Губернатор отчеты буйынса 8-се ревизия (1834) материалдарында Ырымбур губернаһы халҡы 1542011 кеше була, 1850 йылда - 2130037. 16 йыл эсендә губерна халҡы йылына 36754 кеше килеүе иҫәбенә 588026 кешегә арта.

Губернаның төп халҡы рустар була (1098337), ҡалғандары: башҡорттар (444221), мишәрҙәр (97793), типтәрҙәр (196793), татарҙар (98647), сыуаштар (58240), сирмештәр (мариҙар 38567), мордвалар (77328), вотяктар (удмурттар 18205).

Ырымбур губернаһында Өфө губерна ҡалаһы, 12 ҡала, шул иҫәптән 11 өйәҙ ҡалаһы, 1 штатный, 2 посад, 24 слобода, 271 ҙур ауыл (село), 1 урын, 4566 бәләкәй ауыл (деревня) була.

1781 йылда ике: Өфө һәм Ырымбур өлкәһенән торған Өфө наместниклығы ойошторола һәм ул 1796 йылға тиклем йәшәй. Тәүгеһенә 8: Өфө, Бөрө, Минзәлә, Бөгөлмә, Бөгөрослан, Бәләбәй, Стәрлетамаҡ, Силәбе өйәҙҙәре инә. Ырымбур өлкәһе Ырымбур, Верхнеуральск, Бығаулыҡ, Сергеевский өйәҙҙәрен үҙ эсенә ала.

1796 йылда Өфө наместниклығы Ырымбур губернаһына әйләндерелә.

1850 йылда Һамар губернаһы ойошторолғас, Ырымбур губернаһынан Бөгөлмә, Бөгөрослан, Бығаулыҡ өйәҙҙәре айырыла.

1865 йылда яңы административ реформа барышында Ырымбур губернаһы ике үҙ аллы - Өфө һәм Ырымбур губернаһына бүленә. Өфө губернаһына Бәләбәй, Бөрө, Минзәлә, Стәрлетамаҡ, Златоуст һәм Өфө өйәҙҙәре инә. Ырымбур губернаһында Верхнеуральск, Ырымбур, Орск, Троицк, Силәбе өйәҙҙәре ҡала. Башҡорттарҙың бер өлөшө шулай уҡ Пермь, Һамар, Һарытау губерналарында ҡала. Был административ структура 1919 йылға, йәғни Рәсәйҙең Эшсе-крәҫтиән хөкүмәте менән Башҡортостан хөкүмәте араһында төҙәҙә Бәләкәй Башҡортостан сиктәрендә Башҡортостан совет автономияһы тураһында килешеү төҙөгәнгә тиклем һаҡлана. Республика составына Ырымбур, Өфө губерналарының, Һамар губернаһы улысы, Пермь губернаһы территорияһының 2/5 өлөшөнән күберәк территория инә. Бәләкәй Башҡортостан территорияһы 12 (Арғаяш, Бөрйән-Түңгәүер, Дыуан-Ҡошсо, Ҡыпсаҡ-Ете ер, Көҙәй, Стәрлетамаҡ, Табын, Тамьян-Ҡатай, Тоҡсура, Үҫәргән, Юрматы, Ялан) кантонға бүленә. Халыҡтың милләттәр буйынса бүленеше түбәндәгесә була: башҡорттар - 518808 (41,52 процент), татарҙар - 215795 (17,25 процент), рустар - 412097 (32,90 процент), башҡалар - 102839 (8,23 процент).

1897 йылғы халыҡ иҫәбен алыу материалдарындағы милли состав буйынса губернала 16000145 кеше йәшәй, шул иҫәптән башҡорттар - 254561 (15,91 процент), рустар - 1126040 (70,3 процент), татарҙар - 92926 (5,81 процент), украиндар - 41541 (2,59 процент), мордвалар - 38403 (2,40 процент), типтәрҙәр - 16877 (1,05 процент), немецтар - 5064 (0,32 процент), сыуаштар - 5064 (0,31 процент), мишәрҙәр - 4898 (0,31 процент) һ.б.

Бәләкәй Башҡортостан ойошторолоуға һәм территорияһының бер өлөшө Башҡортостанға ҡайтарылыуына бәйле Ырымбур өлкәһендә башҡорттарҙың һаны кәмей. Шулай уҡ башҡорттарҙың һаны кәмеүгә башҡа тарихи ваҡиғалар ҙа - Граждандар һуғышы, аслыҡ, емереклек - йоғонто яһай.

1959, 1970, 1979, 1989 йылдарҙа уҙғарылған халыҡ иҫәбен алыуҙар өлкәлә башҡорттарҙың һаны бер ни тиклем артыуҙы раҫлай. 1959 йылда Ырымбур өлкәһе халҡы 1832 мең кеше тәшкил итһә, башҡорттар - 37501 була. 1979 йылда - 2089 мең һәм 43269. 1989 йылда - 2710692 һәм 53339.

Башҡорттарҙың күпселеге Ҡыуандыҡ, Гай, Красногвардейск, Түлгән, Новосергеевск, Александровск, Һарыҡташ районҙарында йәшәй.

**Ғизетдин ИРҒӘЛИН,**
**тарих фәндәре кандидаты.**
**(Аҙағы. Башы 41-се һанда)**

*ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...*

# КАРУАНҺАРАЙ ҺАҠЛАНАСАҠ!

**Ошо көндәрҙә Ырымбур ҡалаһында әһәмиәтле тарихи ваҡиға үтте: башҡорт халҡының рухи мәркәзе булған Каруанһарайҙың 175 йыллығы билдәләнде. Сарала Башҡортостан Хөкүмәтенең вице-премьеры Азат Бадранов ҡатнашты. Ул социаль селтәрҙә үҙенең тәьҫораттары менән бүлеште:**

"Был юбилей Ырымбур өлкәһе һәм Башҡортостан өсөн дә берҙәй әһәмиәтле һәм, һис шикһеҙ, ҡасандыр Рәсәй Федерацияһының берҙәм Ырымбур крайына ҡараған ике субъекты араһындағы мөнәсәбәттәрҙе нығыта.

Каруанһарай тарихы - Ырымбур крайының барлыҡҡа килеү тарихы ул. Ул төҙөлөү менән Ырымбур Рәсәй империяһының көнсығыш форпостына, илдең ошо тарафындағы эшлекле һәм мәҙәни баш ҡалаһына әүерелгән. Башҡорт халҡы өсөн Каруанһарай тарихы - халҡыбыҙҙың Рәсәй дәүләтенә ҡушылыуының тамамланыуы, Башҡорт-мишәр ғәскәренең тарихы ла.

Мин Каруанһарайҙы һаҡлаусы-яҡлаусы Ғәлимә апай менән осрашып һөйләштем. Был кеше бар ғүмерен ошо тарихи-архитектура комплексының тарихы булмышын, сағылышын һаҡлауға бағышлаған. Бығаса уның тураһында ишеткәнем һәм төрлө хәбәрҙәр барлығын белә инем. Осрашып аралашҡас, шуны төшөндөм: ул - ысын мәғәнәһендә көрәшсе, юғары маҡсат өсөн үҙен ҡорбан ҡылған фиҙаҡәр хеҙмәт кешеһе. Маҡсаты - Каруанһарайҙы киләһе быуындар өсөн һаҡлау. Дәүләттең бурысы - ошондай әүҙемдәргә ярҙам күрһәтергә, ҡайһылыр тирәлә көслә этәргес бирергә.

Каруанһарайҙың тарихы һәм яҙмышы хаҡында беҙ Ырымбур өлкәһе вице-губернаторы Игорь Николаевич Сухарев менән әңгәмәләштек. Комплексты һаҡлау һәм үҫтереү йәһәтенән уртаҡ план булдырыу хаҡында килештек. Идеялар һәм уйҙар бар, ҡайһыларын иһә бында әйтеп үтәм.

Йыш ҡына Каруанһарайҙы башҡорт халҡына "ҡайтарыу" хаҡында дискурстар күҙәтергә була. Әммә башҡорт халҡына уны үҙ тарихының айырылғыһыҙ өлөшө тип иҫәпләргә, уның хаҡында һөйләргә, уны өйрәнергә, был архитектура ҡомартҡыһы тураһындағы мәғлүмәттәрҙе киләһе быуынға еткерергә берәйһе ҡамасаулаймы һуң? Сөнки тотош халыҡ исеменән уны йә үҙебеҙҙеке, йә түгел, тип иҫәпләгәндә был, тәүге сиратта, беҙҙе символдар һәм образдар яҫылығына сығара. Шуға күрә беҙгә иң алда Каруанһарай үҙенең булмышын һаҡлаһын, уға даими реставрация үткәрелһен, уға Рәсәйҙең һәр гражданы аяҡ баҫа алһын өсөн тырышырға кәрәк. Күп осраҡта ошо һөйләшеүҙәр бер һорауға барып төртөлә: комплекс кем балансында торорға тейеш? Бөгөн Каруанһарай - федераль милек, һәм, минеңсә, был - оптималь вариант. Унан тыш, федераль кимәлдәге тарихи-мәҙәни объект федераль ҡануниәт менән һаҡлана. Каруанһарай эсендә нимә барлығы һәм нимә булырға тейешлеге лә мөһим. Бөгөн унда мәсет һәм бер нисә федераль власть органдары урынлашҡан, бик күп бинаһар буш һәм ремонт талап ителә.

Каруанһарай тураһындағы бер генә төплө һөйләшеүҙе лә билдәле дәүләт эшмәкәре Василий Перовскийҙы иҫкә алмайынса үткәреп булмай. Билдәле булыуынса, Василий Перовский Ырымбур өлкәһенең башҡорт фольклорында сағылыш тапҡан берҙән-бер генерал-губернаторы. Ул - дөйөм гражданлыҡ һәм Рәсәй берҙәмлеген булдырыу мәғрифәтселек аша килгәнен аңлаған тәүге дәүләт эшмәкәрҙәренең береһе, шуға ла йәҙәрләгән башҡорт балаларын Рәсәй империяһының юғары уҡыу йорттарына уҡырға ебәрткән. Василий Перовский бик фиҙаҡәр идарасы булған, бик күп кәрәкле һәм оҙайлы һөҙөмтәле эштәр башҡарған. Шул иҫәптән, Каруанһарайҙың тарихи бер өлөшө Василий Алексеевич идара иткән һәм уның ҡатнашлығында төҙөлгән. Әммә Перовский тураһындағы иҫтәлек тейешенсә һаҡланмаған тип иҫәпләйем һәм уның алдында ҙур бурысыбыҙ бар. Әлеге ваҡытта Василий Перовскийҙың эшенә һәм тормошона бағышланған бер генә музей ҙа юҡ. Минең фекеремсә, ошондай музей Каруанһарай эсендә булырға тейеш.

Башҡорт ғәскәре алдында ла бурысыбыҙ бар. Әле уның хаҡында мәғлүмәттәр тулыһынса өйрәнелмәгән, баһа бирелмәгән, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, музей ҙа юҡ. Шул уҡ ваҡытта, Башҡорт ғәскәре тарихы - еңеүҙәр, Ватанды һаҡлау йылъяҙмаһы, башҡорттар һәм мишәрҙәр үҙҙәрен дәүләт, империя халҡы, тип иҫәпләй башлауҙың сағылышы. Каруанһарай, тәүге сиратта, Башҡорт ғәскәрҙәре өсөн төҙөлгәнгә күрә, музей ҙа унда урынлашырға тейеш.

Башҡа сараларға ҡағылышлы, Өфөлә лә, Ырымбурҙа ла ҡыҙыҡлы яңы архив документтары һаҡланған, улар быйыл донъя күрәсәк. Был Каруанһарай тураһындағы яңы һәм иң тулы баҫма буласаҡ. Иң мөһиме, мин хеҙмәттәштәремде Каруанһарайҙы "ЮНЕСКО" Бөтә донъя мираҫы исемлегенә индереү йүнәлешендә эшләргә саҡырам. Был архитектура һәйкәле, һис шикһеҙ, киләһе быуындар өсөн һаҡланырға тейеш һәм был ғәмәл уны һаҡлауға гарантия булыр ине", - тип яҙған Азат Бадранов шәхси сәхифәһендә.

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Эске донъянан объектив һәм субъектив файҙа

Кешеләрҙең яртыһы тиерлек көн һайын үҙенең эске донъяһына сәйәхәт ҡыла. Улар дини тәжрибәләре медитация талап иткән кешеләр: буддистар, даостар, христиандар. Был диндәрҙә тотоусылар барыһы ла медитацияға инмәй, әгәр һеҙ улар иҫәбенән түгел икән, ваҡыты ваҡыты менән үҙегеҙҙең эске донъяғыҙға инһәгеҙ, күп нәмә алырһығыҙ. Тормошоғоҙ яҡшырыр. Бының өсөн ике юл бар - субъектив һәм объектив. Ике осраҡта ла отолмаҫһығыҙ.

Был ике ҡараштты ҡарайыҡ. Беренсе, субъектив ҡараш - һеҙ үҙегеҙҙең эске донъяғыҙға унда булыр өсөн генә сәйәхәт ҡылаһығыҙ. Был медитацияның традицион ысулы.

Бер нисә минут рухи донъяғыҙҙа булыу тонусығыҙҙы күтәрә. Әйтерһең дә, һеҙ ниндәйҙер энергия банкыһына бараһығыҙ ҙа, иҫәбегеҙҙән ниндәйҙер сумманы алаһығыҙ. Медитацияғыҙҙы тамамлағас, үҙегеҙҙе бик күп яҡтан байыған итеп тойорһоғоҙ.

Эске донъяғыҙға сәйәхәттең объектив ысулында һеҙ эске минегеҙ өсөн нимәлер эшләү өсөн инәһегеҙ: доға уҡырға йәки ниндәйҙер проблеманы хәл итеү өсөн үҙ хыялығыҙҙы эшкә егергә. Был динамик медитация тип атала.

Мине динамик медитация тураһында һөйләргә Һиндостандың Адьяре ҡалаһында Теософск йәмғиәтенең штаб-фатирына саҡырҙылар. Мин лекциялар уҡыным, практик дәрестәр үткәрҙем, унда тыңлаусылар үҙҙәренең тормоштарын нисек теләйҙәр, шулай күреү өсөн медитатив хәлгә инделәр. Бер ваҡыт минән:

- Сэр, беҙ ожмах ишектәрен баҫып алырға теләйбеҙме ни? - тип һоранылар.

- Эйе, - тип яуапланым мин. - Ә һеҙ әлегә ваҡыт килеп етмәгән, тип уйлайһығыҙмы?

Динамикалы медитацияға ярайым тип, пассив медитацияны ҡорбан итергә ярамай. Иң яҡшыһы - икеһен дә ҡулланыу. Быны динамикалы медитацияның ижади һәләткә йоғонтоһо миҫалы.

Официант, һәр көн ресторанға эшкә барғанда баҡса менән уратып алынған матур йорт эргәһенән үткәндә туҡталып, күҙҙәрен йомоп, үҙен ошо йорт эсендә йөрөйөм тип хис иткән.

Кистәрҙең береһендә ресторанда өлкән йәштәге бер ханымды хеҙмәтләндереп йөрөгәндә ул:

- Мин көн һайын һеҙҙең минең өйөм эргәһендә туҡтап, һоҡланғанығыҙҙы күрәм. Үҙегеҙ унда йәшәргә теләмәйһегеҙме? - тип һораған.

Ҡулынан саҡ батмусын төшөрөп ебәрмәгән официант, тотлоға-тотлоға:

- Һеҙ нимәне күҙаллайһығыҙ? - тигән.

- Ул өйҙө ҡарарға мин бик ҡартмын инде, шуға Флоридаға китәм, - тигән ханым. - Мин өйөмдөң уны тейешенсә баһалаған кешегә эләгеүен теләйем. Минеңсә, һеҙ тап шундай кеше.

Тиҙҙән официант өндәге төшөндә - динамикалы медитация процесында күргән йорттоң хужаһы булып китә.

**Роберт СТОУН.**
**(Дауамы бар).**



## 18 ОКТЯБРЯ
## ПОНЕДЕЛЬНИК
### РОССИЯ 1

5.00 Профилактика на канале до 13:00.
14.00, 17.00, 20.00 Вести.
14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.55, 2.20 Т/с "Тайны следствия". [16+]
17.15 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
18.40 "60 минут". [12+]
21.20 Т/с "Тайна Лилит". [12+]
23.40 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
4.05 Т/с "Личное дело". [16+]
4.55 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Профилактика на канале с 7.00 до 14.00.**
**14.00 Итоги недели (на рус. яз).**
**14.45 Специальный репортаж. [12+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Әлләсе... [12+]**
**16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**16.30 Т/с "Ласточкино гнездо". [12+]**
**17.30 Ради добра. [12+]**
**17.45 История одного села. [12+]**
**18.00 "Пофутболим?" [12+]**
**18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45 Инцидент-репортаж. [12+]**
**21.00 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**22.00 Тайм-аут. [12+]**
**23.00 Күстәнәс. [12+]**
**23.30 Топ 5 клипов. [12+]**
**0.00 Х/ф "Трембита". [0+]**
**2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "Похищение девушки". [12+]**
**5.15 Мы дети войны. [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 19 ОКТЯБРЯ
## ВТОРНИК
### РОССИЯ 1

5.00, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10 Утро России.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55, 2.20 Т/с "Тайны следствия". [16+]
17.15 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.20 Т/с "Тайна Лилит". [12+]
23.40 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
4.05 Т/с "Личное дело". [16+]
4.55 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 16.30 Т/с "Ласточкино гнездо". [12+]**
**11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**11.15 Брифинг. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30, 2.30 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 "Дорога к храму". [0+]**
**15.00, 18.15 Интервью. [12+]**
**15.15 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]**
**15.45 Брифинг Министерства здравоохранения РБ по коронавирусу.**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30 "Хазина". [12+]**
**18.00 "Криминальный спектр". [16+]**
**18.50 Хоккей. "Трактор" (Челябинск) - "Салават Юлаев" (Уфа). КХЛ.**
**22.00 Тормош. [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Х/ф "Совсем не простая история". [16+]**
**3.15 Спектакль "Ночь, как вся жизнь". [12+]**
**5.00 Топ 5 клипов. [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 20 ОКТЯБРЯ
## СРЕДА
### РОССИЯ 1

5.00, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10 Утро России.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55, 2.20 Т/с "Тайны следствия". [16+]
17.15 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.20 Т/с "Тайна Лилит". [12+]
23.40 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
4.05 Т/с "Личное дело". [16+]
4.55 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 16.30 Т/с "Ласточкино гнездо". [12+]**
**11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**11.15 "Свадьба наизнанку". [12+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30, 2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 "Аль-Фатиха". [12+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 "Апчхи". [0+]**
**15.30 "Сулпылар". [0+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30 Тайм-аут. [12+]**
**18.00 Дорожный патруль. [16+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45 "Честно говоря". [12+]**
**22.00 Историческая среда.**
**23.00 "Байыҡ-2021". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**0.00 Х/ф "Тётя Клава фон Геттен". [16+]**
**3.00 Спектакль "Салават". [12+]**
**5.00 "Бай". [12+]**

## 21 ОКТЯБРЯ
## ЧЕТВЕРГ
### РОССИЯ 1

5.00, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10 Утро России.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55, 2.20 Т/с "Тайны следствия". [16+]
17.15 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.20 Т/с "Тайна Лилит". [12+]
23.40 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
4.05 Т/с "Личное дело". [16+]
4.55 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 16.30 Т/с "Ласточкино гнездо". [12+]**
**11.00, 16.00, 20.45 Новости (на рус. яз).**
**11.15 "Честно говоря". [12+]**
**12.00, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 18.30, 0.00 Новости (на баш. яз).**
**13.30, 2.45 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 Үткән ғүмер. [12+]**
**15.00 Интервью. [12+]**
**15.15 Бирешмә. Профи. [6+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30 "100 имен Башкортостана". [12+]**
**18.00 "Криминальный спектр". [16+]**
**18.15 "Бәйге". Башкирские игры. Чемпионат между башкирскими родами по силовому многоборью. [12+]**
**19.00 "Елкән". [6+]**
**21.20 Хоккей. ЦСКА (Москва) - "Салават Юлаев" (Уфа). КХЛ.**
**0.30 Х/ф "Десять негритят". [0+]**
**3.30 Спектакль "В ночь лунного затмения". [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

## 22 ОКТЯБРЯ
## ПЯТНИЦА
### РОССИЯ 1

5.00, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10 Утро России.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Тайны следствия". [16+]
17.15 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.20 Т/с "Тайна Лилит". [12+]
23.40 Дом культуры и смеха. [16+]
1.50 Х/ф "Небо измеряется милями". [12+]
4.55 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Д/ф "Стратегия выживания". [12+]**
**11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**11.15 "Йома". [0+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00, 21.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**12.30, 17.30, 22.00 Автограф. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30 Үткән ғүмер. [12+]**
**14.00 Мы дети войны. [12+]**
**14.15, 20.45 "Ҡурай даны". [12+]**
**14.30, 4.45 Башҡорттар. [6+]**
**15.00, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**16.30 "Свадьба наизнанку". [12+]**
**17.00 Д/с "Биосфера. Законы жизни". [12+]**
**18.00 Дорожный патруль. [16+]**
**18.15 "Бәйге". Башкирские игры. Чемпионат между башкирскими родами по силовому многоборью. [12+]**
**19.00 "Башҡорт йыры-2021". [12+]**
**19.45 Д/ф "Дорога домой". [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**23.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**23.30 "ВасСәләм!" [12+]**
**0.00 Х/ф "Безымянная звезда". [0+]**
**2.30 Спектакль "Радость нашего дома". [12+]**
**5.15 "Алтын тирмә". [12+]**

## 23 ОКТЯБРЯ
## СУББОТА
### РОССИЯ 1

5.00 "Утро России. Суббота".
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.35 По секрету всему свету.
9.00 Формула еды. [12+]
9.25 Пятеро на одного.
10.10 Сто к одному.
11.00 Вести.
11.30 Юмор! Юмор!! Юмор!!! [16+]
12.35 Доктор Мясников. [12+]
13.40 Т/с "Скалолазка". [12+]
18.00 Привет, Андрей! [12+]
20.00 Вести в субботу.
21.00 Х/ф "Формула жизни". [12+]
1.05 Х/ф "Перекресток". [12+]
4.23 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00, 18.30 Новости (на баш. яз).**
**8.15 "Аль-Фатиха". [12+]**
**8.45 "Ете егет". [12+]**
**9.30 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**10.00 "Физра". [6+]**
**10.15 "Выше всех!" [6+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 "Книга сказок". [0+]**
**11.00 "Сыйырсыҡ". [0+]**
**11.15 Бишек. Колыбельные моего народа. [0+]**
**11.30 Детей много не бывает. [6+]**
**12.00 Күстәнәс. [12+]**
**12.30 Д/ф "Клич мой будет звучать над землею". [12+]**
**13.15 Мы дети войны. [12+]**
**13.30 Башҡорттар. [6+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00 Концерт Иделя Нургалина. [12+]**
**19.00 "Бәйге". Башкирские игры. Чемпионат между башкирскими родами по силовому многоборью. [12+]**
**19.15 Ради добра. [12+]**
**19.30 Полезные новости. [12+]**
**19.45 "Свадьба наизнанку". [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.30 "Байыҡ-2021". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**22.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**22.30, 2.30 Новости недели (на баш. яз).**
**23.15 "Башҡорт йыры-2021". [12+]**
**0.00 Х/ф "Зеркало для героя". [16+]**
**3.15 Спектакль "Оставайтесь солнцем". [12+]**
**5.15 Әлләсе... [12+]**
**6.00 Автограф. [12+]**

## 24 ОКТЯБРЯ
## ВОСКРЕСЕНЬЕ
### РОССИЯ 1

5.20, 3.20 Х/ф "Храни ее, любовь". [12+]
7.15 Устами младенца.
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 Когда все дома с Тимуром Кизяковым.
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00 Большая переделка.
12.00 Петросян-шоу. [16+]
14.00 Т/с "Скалолазка". [12+]
18.00 Дуэты. [12+]
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 "Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
1.30 Х/ф "Если бы я тебя любил". [12+]
4.59 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00 Новости (на баш. яз).**
**8.15 "Йома". [0+]**
**8.45 "Бай". [12+]**
**9.15 "Ҡурай даны". [6+]**
**9.30 Тормош. [12+]**
**10.00 "Бейе". [0+]**
**10.15 "Ай текә". [6+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 "Сулпылар". [0+]**
**11.15 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [0+]**
**11.30 "Ҡош юлы. Балалар". [6+]**
**11.45 Вопрос + Ответ = Портрет. [12+]**
**12.30 "Ете егет".**
**13.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**15.15 "Дорога к храму". [0+]**
**15.45, 5.30 Историческая среда. [12+]**
**16.15 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Локомотив" (Ярославль). КХЛ.**
**19.00 "Бәйге". Башкирские игры. Чемпионат между башкирскими родами по силовому многоборью. [12+]**
**19.15 Лидеры региона. [12+]**
**19.45 "Свадьба наизнанку". [12+]**
**20.15 Әлләсе... [12+]**
**21.00, 22.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**21.30 Новости недели (на рус.яз).**
**22.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**23.00 "ВасСәләм!" [12+]**
**23.30, 3.45 Х/ф "Питер FM". [12+]**
**1.00 Спектакль "Трамвай "Желание". [12+]**
**5.15 История одного села. [12+]**
**6.00 Итоги недели (на рус. яз). [0+]**

**НА ПРЕДПРИЯТИЕ АО «ЮГК» СРОЧНО ТРЕБУЮТСЯ**
Общежитие, льготное питание, высокая з/п ВАХТА 20/10
- ВОДИТЕЛИ А/М БЕЛАЗ, KOMATSU
- СТАЖЕРЫ НА А/М БЕЛАЗ (кат.С)
- ВОДИТЕЛИ КАТ. Д
- МАШИНИСТЫ БУЛЬДОЗЕРА, ГРЕЙДЕРА
- МАШИНИСТЫ ЭКСКАВАТОРА ЭКГ (5, 8 , 10), ГИДРАВЛИЧЕСКОГО
- АВТОЭЛЕКТРИКИ НАЛАДЧИКИ А/М БЕЛАЗ
- ТОКАРИ
- СВАРЩИКИ
- ЭЛЕКТРОСЛЕСАРИ
- МАШИНИСТЫ ПОМОЩНИКИ НА БУРОВЫЕ УСТАНОВКИ СБШ, ДМ
- СПЕЦИАЛИСТЫ НА ОБОГАТИТЕЛЬНУЮ ФАБРИКУ

Челябинская область, г. Пласт
тел. 8-922-635-59-99 e-mail: m.aldonin@ugold.ru

## СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**20 октябрь "Ҡыҙ урлау"** (М. Кәрим), комедия. 12+
**21 октябрь "Сыңғыҙхандың аҡ болото"** (С. Айытматов, Е. Баранчикова), хикәйәт. 12+
**22 октябрь "Ат уйнатып алдан бара..."** (З. Бураҡаева). 12+
**23 октябрь "Мин һинең ҡәйнәң булам"** (С. Белов), комедия. 18.00 12+
**24 октябрь "Һөйәркә"** (Т. Миңнуллин), драма. 18.00 16+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**19 октябрь "Долгое-долгое детство"** (М. Кәрим). 12+
**21 октябрь "Волшебник Изумрудного города"** (А. Волков), әкиәт. 11.00 0+
**"Аҡ мөғжизә"** (М. Кәрим), бала саҡ төштәре. 12+
**22 октябрь "Аладдин"** (И. Казакова). 11.00 6+
**"Йәшәгән, ти..."** (М. Ладо), драмеди. 12+
**23 октябрь "Чиполлино"** (Дж. Родари), мажара. 12.00 3+
**24 октябрь "Золушка"** (Г. Корнелиссон), тамаша. 12.00 0+
**"Ал яулыҡлы тирәккәйем"** (С. Айытматов), драма. 18.00 16+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**19 октябрь "Мустай Карим. Близкий горизонт"** (В. Аношкин). 12+
**23-24 октябрь "О чем поет осень?"** (В. Щербакова). 11.00, 13.00, 16.00 0+

### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**19 октябрь** Н. П. Осипов исемендәге Рәсәй милли академия халыҡ инструменттары оркестры йәш солистар ансамбле концерты. 6+
**20 октябрь** БР Милли халыҡ уйын ҡоралдары оркестрының юбилей концерты. 6+
**21 октябрь** Т. Сәйфуллин ис. БР Дәүләт академия хор капеллаһы концерты. 6+
**22 октябрь "Capella jeans"** концерт. 6+
**24 октябрь** Ғ. Нәбиуллин етәкселегендә Dixieland. 6+

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**20 октябрь "Долгое-долгое детство"** (М. Кәрим). 12.00 6+
**23 октябрь "Нисек кейәүгә сығырға?"** (Н. Ғәйетбаев), комедия. 12+
**24 октябрь "Золотой осел Насретдина"** (Ш. Казиев), музыкаль әкиәт. 12.00 0+

### А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры

**23 октябрь "Body позитив"** мәктәп уҡыусылары өсөн театраль лекторий. 12.00 6+

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

**1443 һижри йыл.**

| Октябрь (Рәбиғел әүүәл) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 18 (12) дүшәмбе | 6:23 | 7:53 | 13:30 | 16:38 | 18:08 | 19:38 |
| 19 (13) шишәмбе | 6:25 | 7:55 | 13:30 | 16:36 | 18:06 | 19:36 |
| 20 (14) шаршамбы | 6:27 | 7:57 | 13:30 | 16:34 | 18:04 | 19:34 |
| 21 (15) кесе йома | 6:29 | 7:59 | 13:30 | 16:31 | 18:01 | 19:31 |
| 22 (16) йома | 6:31 | 8:01 | 13:30 | 16:29 | 17:59 | 19:29 |
| 23 (17) шәмбе | 6:33 | 8:03 | 13:30 | 16:27 | 17:57 | 19:27 |
| 24 (18) йәкшәмбе | 6:35 | 8:05 | 13:30 | 16:24 | 17:54 | 19:24 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

✓ *Табиптар бер нәмәне аныҡ белә: коллектив иммунитет барлыҡҡа килгәс, барыһына ла еңелерәк буласаҡ. Республиканың дөйөм халҡының 60 проценты уңышлы вакцинацияланһа, ауырыу кәмеүгә табан барасаҡ.*



БАШ ЭШЛӘТМӘК

# 16 ОКТЯБРЬ - БӨТӘ ДОНЪЯ ИКМӘК КӨНӨ




Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.

**41-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Ялҡын. Ребаб. Балауыҙ. Тула. Урғуян. Илғужа. Литр. Али. Наруто. Бабай. Кәрим. Утаусы. Бөйрәкәй. Афродита. Аҡыҡ. Анаҡ. Алым. Арыҡ. Алыш. Арал.

**Вертикаль буйынса:** Игебаев. Туғыҙбаева. Йәбер. Балаҡ. Олатай. Көй. Ҡоралай. Әсә. Тамаша. Урама. Кран. Ғәбиҙуллин. Уймаҡ. Ҡыл. Руанда. Умрау. Нил. Ышыҡ.

*ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...*

# КӘРӘКЛЕ САРА

Республиканың Роспортребнадзоры етәксеһе Анна Казак белдереүенсә, 13 октябрҙән республикала граждандарҙың айырым категорияларын эпидемиологик күрһәткестәр буйынса мәжбүри вакциналау башланды. Был сара илдең 30 төбәгендә индерелгән. Сәбәбе билдәле - ауырыусылар һаны күбәйгән.

Түбәндәге граждан категориялары COVID-19-ҙан мотлаҡ вакцина яһатырға бурыслы: 60 йәштәгеләр һәм унан өлкәндәр; медицина, фармацевтика һәм санатор-һауыҡтырыу ойошмалары хеҙмәткәрҙәре; белем биреү ойошмалары, шул иҫәптән өҫтәлмә белем биреү учреждениелары хеҙмәткәрҙәре; халыҡты социаль яҡлау һәм социаль хеҙмәтләндереү ойошмалары, күп функциялы үҙәк хеҙмәткәрҙәре; социаль хеҙмәтләндереү ойошмаларында йәшәүселәр; транспорт һәм транспорт инфраструктураһы ойошмалары хеҙмәткәрҙәре; хоҡуҡ һаҡлау органдары хеҙмәткәрҙәре, дәүләт сиге аша үткәреү пунктында дәүләт контроль органында эшләүселәр, енәйәт-башҡарыу системаһы учреждениелары хеҙмәткәрҙәре; вахталы ысул менән эшләүселәр, волонтерҙар; хәрби хеҙмәт башҡарыусылар һәм хәрби хеҙмәткә алыныусылар; хеҙмәтләндереү өлкәһендә эшләүселәр: сауҙа, матурлыҡ салоны, бөҙрәхана, косметика, СПА, массаж салоны, солярий, мунса, сауна, физкультура-һауыҡтырыу комплексы, фитнес-клубы, бассейн, көнкүреш хеҙмәттәре, шул иҫәптән кер йыуыу, химик таҙартыу, ателье кеүек хеҙмәттәр, йәмәғәт туҡланыуы, финанс ойошмаларҙың клиент бүлексәләре, почта һәм башҡа элемтә хеҙмәте күрһәтеүсе ойошмалар, пенсия, социаль һәм медицина страховкалауы, мәшғүллек үҙәге, торлаҡ-коммуналь хужалыҡ һәм энергетика, мәҙәни, күргәҙмә, мәғрифәт саралары, шул иҫәптән музейҙар, театрҙар, кинотеатрҙар, концерт һәм күргәҙмә залдары, китапханалар, лекциялар, тренингылар, ял итеү, күңел асыу, тамаша саралары (шул иҫәптән уйын саралары, оҫталыҡ дәрестәре, цирктар, зоопарктар, аквапарктар), балаларҙың уйын бүлмәләре, балалар күңел асыу үҙәктәре, балаларҙың көндөҙгө лагерҙары, балиғ булмаған балаларҙы ял иттереү һәм һауыҡтырыу хеҙмәте, күмәк кеше ҡатнашлығында, физкультура, спорт сараларын үткәреү, юридик, типография хеҙмәте, ҡунаҡхана, туризм хеҙмәте, мәғлүмәт хеҙмәте,аптека һәм ветеринар ойошма хеҙмәттәре, клининг компаниялары, дезинфекция, дезинсекция, дератизация үткәреү, ерләү хеҙмәте, автомобилдәрҙе техник хеҙмәтләндереү һәм ремонтлау хеҙмәте, һаҡ предприятиелары хеҙмәте, алып килеү, курьер хеҙмәте.

*КӨНАУАЗ*



# ТЫЙЫУҘАР, СИКЛӘҮҘӘР

**Республика көнөнән һуң Башҡортостанда ҡабаттан тажзәхмәт сикләүҙәре һәм ҡайһы бер граждандарҙы мотлаҡ вакцинациялау талаптары көсөнә инде.**

Табиптар күҙаллаған төп маҡсат - сирҙе йоҡтороу сылбырын өҙөү. Йәғни әле ауырығандар һауығып, сирҙе башҡаларға йоҡтормаҫҡа тейеш. Әлегә аныҡ ҡына ваҡыт билдәләнмәгән. Бәлки, быға ике аҙна кәрәк булыр, йә ул Яңы йылға тиклем, хатта яҙға тиклем һуҙылыр. Ҡағиҙәләр хәлторошҡа - сирлеләр, шул иҫәптән ауыр сирлеләр, һаны һәм прививка яһатыу осраҡтарының артыу тиҙлегенә ҡарап ҡәтғиләштереләсәк йәки бушатыласаҡ. Әле хәл бик ҡатмарлы, хатта тар профилле белгестәр коронавирус бүлектәренә эшкә күсерелә, сөнки мөрәжәғәттәр - ике, шылтыратыуҙар ике ярым тапҡырға артҡан, табиптар етешмәй. Сирләүсе балалар һаны ла арта. Улар ауырыуҙы бынан алдағы тулҡынға ҡарағанда ауырыраҡ үткәрә. Өфөнөң 17-се дауаханаһы базаһында хатта бер йәшкә тиклемге сабыйҙар өсөн коронавирус бүлеге асылған. Табиптар бер нәмәне аныҡ белә: коллектив иммунитет барлыҡҡа килгәс, барыһына ла еңелерәк буласаҡ. Республиканың дөйөм халҡының 60 проценты уңышлы вакцинацияланһа, ауырыу кәмеүгә табан барасаҡ.

**Магазиндарға, дарыуханаларға, кафеларға нисек барырға?** Әгәр һеҙгә прививка эшләнһә, һеҙҙең өсөн бер нәмә лә үҙгәрмәй. Вакцина яһатыуығыҙ тураһында сертификатты баҫтырып алығыҙ йәки телефонығыҙға һаҡлағыҙ һәм инеү урынында һаҡсыларға күрһәтегеҙ. Әгәр, мәҫәлән, сауҙа үҙәге биләмәһендә урынлашҡан МФЦ-ға йәки дарыуханаға инергә кәрәк булып та, прививка эшләтеү тураһында сертификатығыҙ юҡ икән, һеҙҙе үткәрмәйәсәктәр. Икенсе МФЦ-ға мөрәжәғәт итеп ҡарағыҙ, күптәрҙең айырым инеү урыны бар. Әммә айырым, мәҫәлән, күрше йортта урынлашҡан магазиндар, инеү өсөн вакцинация тураһында таныҡлыҡ талап итә алмай. Баҙар мөйөшөндәге һаҡсылар ҙа. Документта аныҡ әйтелә - тик сауҙа үҙәктәре генә! Вакцинация үҙәге сауҙа комплексында булһа нишләргә? Һеҙҙе унда сертификатһыҙ индерерҙәрме? Индерәләр! "Планета"ла прививка яһатырға теләүселәр өсөн айырым инеү урыны булдырылған да инде, "Башҡортостан" сауҙа үҙәгендә шундай мөмкинлек эҙләйҙәр (моғайын, беренсе ҡатҡа күсерерҙәр), ә "Торатау" - сауҙа үҙәге түгел һәм унда сикләүҙәр юҡ. Шулай уҡ поликлиникаларҙа прививка яһатырға мөмкин, улар иртәнге 8-ҙән киске 8-гә тиклем эшләй.

**Барыһын да кем контролдә тотасаҡ?** Талаптарҙың үтәлешен ойошмалар хеҙмәткәрҙәре үҙҙәре күҙәтеп барасаҡ. Ә Роспотребнадзор, полиция һәм чиновниктар даими рәүештә рейдтар үткәрәсәк һәм талаптарҙы үтәмәүселәргә штраф һаласаҡ. Рәсәй Федерацияһының Административ-хоҡуҡ боҙоу тураһында кодексының 20.6.1 "Ғәҙәттән тыш хәлдәрҙә һәм ғәҙәттән тыш хәлдәр тыуыу хәүефе янағанда тәртип ҡағиҙәләрен боҙоу" статьяһына ярашлы, граждандар өсөн - 30 меңгә, предприятиелар өсөн 300 меңгә тиклем штраф ҡаралған. Ошо көндәрҙә Роспотребнадзор биш төнгө клубты тикшереп, уларҙың барыһында ла етешһеҙлектәрҙе асыҡлай, материалдар тиҙҙән судҡа тапшырыласаҡ.

**Вакцинацияға ниндәй кире күрһәткестәр бар?** Тулы исемлек юҡ. Кешенең хәле көн һайын үҙгәрә - кисә киҫкен һәм прививка яһатыу мөмкин булмаһа, бөгөн ремиссия һәм прививка хатта кәрәк тә. Хроник сирҙәр вакцинацияға ҡаршы килмәй - барыһын да дауалаусы табип хәл итә. Тик Интернеттан ҡарап йәки инструкция уҡып, дөрөҫ ҡарар ҡабул итеү мөмкин түгел, сөнки несқәлектәр бик күп. Сымдарҙы электрик йүнәтергә, балаларҙы уҡытыусы уҡытырға, дауаны табип тәғәйенләргә тейеш.

БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР

# КОМЕДИЯЛАҒЫ ТРАГЕДИЯМЫ?

**М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры сәхнәһендә Салауат дәүләт башҡорт драма театры коллективы Сәрүәр Суриналың "Абау, димсе килә!" музыкаль комедияһын күрһәтте. Спектаклде сәхнәгә режиссер Зиннур Сөләймәнов, бейеүҙәрҙе хореограф Сулпан Асҡарова ҡуйған. Театрҙың директоры - Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Айбулат Ҡотошов.**



Ике өлөштән торған, өс сәғәткә һуҙылған йырлы-бейеүле, кәмитле тарих бер тынала үтеп тә китте. Көлөп хәл бөттө. "Ысын спектакль театрҙан өйөнә ҡайтҡас башлана", тигәйне бер саҡ Азат Йыһаншин. Мин дә өйгә ҡайтҡас, театрҙың тулы коллективы ярҙамында ҡуйылған сәхнә тарихының бигерәк тә тамашасыны туҡтауһыҙ шарҡылдап көлөргә мәжбүр иткән өлөштәрен иҫләп, өйҙәгеләргә һөйләргә теләһәм дә, килеп сыҡманы.

Кем бәрәү әйтмешләй, "көлә килә, артынан һөрә килә" икән дә! Әле килеп, спектакль геройҙарының ошондай көлкө хәлгә ҡалыуының сәбәптәре хаҡында уйланам. Дөрөҫөн әйткәндә, спектакль хәҙерге замандың иң ауыр проблемаһы һаналған яңғыҙлыҡ, ғаилә трагедиялары хаҡында. Спектакль башында барыһы ла яңғыҙ, ирҙәр Себерҙә ғаиләләрен аҫрау өсөн бил бөгә, ҡатындар берҙе биш итеү маҡсатында ауылда ирҙәр эшен башҡара, ҡул эштәре менән мәшғүл.

Барыһы ла бәхетһеҙ. Шундай саҡта ауылдың иң прогрессив өлөшө һаналған агинәйҙәр бар инициативаны үҙ өҫтөнә алып, барыһын да башлы-күҙле итеүгә өлгәшә. (Агинәйҙәрҙең үҙ-ара мөнәсәбәтендә лә проблемалар юҡ түгел). Хатта ялға тип ҡайтҡан Себер зимагурҙары ла спектакль аҙағында ауылдарында тороп ҡалып, үҙ эштәрен асырға ҡарар итә. Һуңғы сәхнәлә барыһы ла парлы. Барыһы ла бәхетле!

Әлбиттә, бөгөнгө ауылдың ошондай ҡотһоҙ ысынбарлығын башҡа жанрҙарҙа ла күрһәтергә мөмкин булыр ине, әйтәйек, драмала, трагедияла. Әммә автор һәм барлыҡ ижади коллектив ошо юлды, йәғни күҙ йәштәре аша көлөүҙе һайлаған һәм яңылышмаған, маҡсатына өлгәшкән. Был йәһәттән комедияға тәрҙәлгән Шекспир трагедияларын иҫкә төшөрөү ҙә урынлы булыр ине.

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Салауат дәүләт башҡорт драма театрының яңы директоры Айбулат Ҡотошовтоң Сибай концерт-театры берекмәһендә һынау үткән бер төптән тотоноу алымын бында ла бик уңышлы дауам итеүе маҡтауға лайыҡ. Әйткәнемсә, спектакль башында театрҙың барлыҡ составы сәхнәлә, барыһы ла бәхетһеҙ! Спектакль аҙағында - барыһы ла парлы һәм бәхетле!**

**Әмир ҒҮМӘРОВ.**

СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҠТАРЫ

# СИБАЙҘАР ҠЫУАНЫСЫ

**Сибай ҡалаһында концерт-театр берекмәһе составында яңыртылған филармония бинаһы асылды. Был күркәм ваҡиғаға арнап һәм Республика көнөнә бағышлап "Урал арьяғында тыуғандар" тигән тантаналы концерт уҙҙы.**

Быға хәтлем филармония майҙаны 2,5 мең кв. метр тәшкил итһә, хәҙер ул 6,5 мең км. метрға тиерлек киңәйҙе. Залдың һыйҙырышлылығы - 500 кеше. Филармония өсөн "Steinway & Sons" концерт рояле һатып алынған, тип хәбәр итә БР Мәҙәниәт министрлығының матбуғат хеҙмәте. Ремонт "Мәҙәниәт" милли проекты буйынса башҡарылған.

- Яңыртылған учреждение ҡала күркенә әйләнәсәк һәм юғары кимәлдәге сараларҙы уҙғарырға мөмкинлек бирәсәк. Сибай хаҡлы рәүештә Урал арьяғының мәҙәни үҙәге булып тора. Филармонияның яңыртылған бинаһы Республика көнө алдынан асылыуы үҙе бер күркенешкә әйләнде. Был баштан алғанда ҡатмарлы объект булды. Заманса зал киңәйтеүҙе талап иткәс, бинаға тағы ла бер корпус өҫтәлде. Балалар үҙҙәренең тамашаларын ҡуя алһын өсөн тағы бер зал төҙөлдө", - тине асыу тантанаһында ҡатнашып БР Хөкүмәте премьер-министры Андрей Назаров.

Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, Сибай филармонияһы бинаһы 2015 йылдың көҙөндә янғында етди зыян күрҙе. Икенсе һәм өсөнсө ҡаттар, ҡыйыҡтың төп өлөшө утта юҡҡа сыҡты. Тергеҙеү буйынса эштәр 2019 йылдың февралендә башланды.

# БАЛАЛАР ӨСӨН ФИЛЬМ

**Башҡортостанда "Батыр" тулы метражлы балалар нәфис фильмын төшөрөү тамамланды. Ул киләһе йылдың яҙында ҙур экрандарға сыға, тип вәғәҙәләне ижади төркөм.**

Ваҡиғалар Башҡортостандың күркәм тәбиғәте ҡосағында бара. Фильмда 2021 йылдың эҫе йәйендә тотош республикала ҡотҡарған урман янғындары темаһы ла ситтә ҡалмаған. "Ошондай нәфис фильмдар кеүек әүҙем формалар аша балаларыбыҙҙа кешелеклек, ярата белеү һәм яратылыу кеүек иң мөһим сифаттар тәрбиәләй алырбыҙ. Тәүге тәжрибәбеҙ уңышлы булыр, яңы идеялар менән янабыҙ, бының менән генә туҡталып ҡалмаҫбыҙ тип ышанам", - тине Башҡортостандың мәғариф һәм фән министры Айбулат Хажин. Проект белем биреү планына индерелә һәм республиканың бөтә мәктәптәрендә күрһәтелә, тип билдәләне ул.

Режиссер һәм сценарист Елена Дубровская һүҙҙәренсә, алһыҙ-ялһыҙ фильм төшөргән 15 көндөң һәр көнө хәтерҙә ҡалды. Ижади төркөмгә Архангел районы халҡы ныҡ ярҙам итте. Бер көндә күмәк сәхнә күренешенә 300-гә яҡын кеше йыйылды. Кинола башлыса махсус белеме булмаған актерҙар ҡатнашты. Төп ролдә - Аҙаматты Аҡмулла исемендәге БДПУ-ның студенты Динислам Хәсәйенов, Машаны Өфө сәнғәт институты студенты Елена Пухова уйнаны. Заказсыһы - Башҡортостан Республикаһының Мәғариф һәм фән министрлығы. Фильмдар "Рәсәй мәктәптәрендә кинодәрестәр" Бөтә Рәсәй проекты сиктәрендә уҡыусылар йыйып тапшырған макулатура аҡсаһына төшөрөлә. "Батыр" фильмы өсөн 2 миллион һумдан ашыу йыйылды.

# ХОҘАЙБИРҘИНГӘ АРНАЛА

**Быйыл башҡорт халҡының данлы улы, күренекле дәүләт һәм йәмәғәт эшмәкәре Шәһит Хоҙайбирҙиндың тыуыуына 125 йыл тулды. Башҡортостанда уның хаҡында фильм төшөрөлә, тип хәбәр итте Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайының матбуғат хеҙмәте.**

Күгәрсен район мәҙәниәт йортоноң халыҡ театры режиссеры Фәймә Аҡъюлова апрель айында фильм төшөрә башлаған. Сценарийҙы Роман Алферовтың "Шәһиттең йәшлеге" документаль повесы буйынса яҙған. Фильмда Шәһит Хоҙайбирҙинды яҡындан белгән яҡташтарының да хәтирәләре файҙаланыла. Оператор - Әскәт Әлимғолов. Фильмда үҙешмәкәр актерҙар, 100-ҙән ашыу кеше, Хоҙайбирҙин ауылы халҡы, Шәһит Хоҙайбирҙиндың яҡташтары ҡатнаша. Төп ролдә - Айнур Байгазин. "Профессионалдар юҡ, ситтән бер кемде лә саҡырманыҡ. Бөтә ролдәрҙә - ауыл халҡы. Өлкәндәр ҙә, балалар ҙа ысын артистар, тиерһең. Фильм төшөрөүҙә бөтәһе лә ихлас ҡатнаша. Кемдер өйөн бирә, кемдер реквизиттар менән ярҙам итә. Яҙын башлаған эште сентябрҙә тамамларға ниәт итәбеҙ. Төшөрөп бөткәс тә, монтажға ултырабыҙ. Был - "Күгәрсен-ТВ" телестудияһы менән бергә ижад иткән һигеҙенсе фильм. Октябрҙә фильм сығыр тип уйлайым", - ти режиссер Фәймә Аҡъюлова.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ҠЫУЫШЫН ЯНДЫМЫ?

## Хоҙай мәрхәмәте яҡындыр…

Яҡшынан яҡшы тыуыуы - ғәҙәт, яҡшынан яман тыуыуы - ғәжәп.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Фәрештәләй түҙем булыу өсөн аждаһалай көс кәрәк.

**(Александр Кумор).**

Ҡатын-ҡыҙ ир-егеттең үҙе өсөн ни эшләгәнен күрмәһә лә, унын өсөн нимә эшләмәгәнен шунда уҡ шәйләй.

**(Жорж Куртелин).**

Балалары һәм... әбейҙәре матур булған миллләттең ҡаны затлы иҫәпләнә.

**(Григорий Ландау).**

Кешелектең мөмкинлектәре сикһеҙ булыр ине, әгәр ҙә ул сикләнгәндәр власын сикләй алһа...

**(Габриэль Лауб).**

Яратылыу - ҡайһы саҡта яза. Яраталарлмы һине, юҡмы икәнде белмәү - икеләтә яза...

**(Роберт Лембке).**

Күпселек аҙсылыҡ билдәләгән ҡараштар тотҡонлоғонда йәшәй.

**(Станислав Ежи Лец).**

Милләттең алдынғылығы - унын үҙҙәһенән көлә белеү һәләтлегендә.

**(Питер де Врайз).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Карап һәләкәткә осрай һәм берҙән-бер кеше генә ҡотолоп ҡала. Уны тулҡын тере йән булмаған утрауға алып барып ташлай. Кеше туҡтауһыҙ Аллаға ялбара, үҙе ҡотҡарыусылар килмәйме икән, тип, әленән-әле океанға күҙ һала. Былай ултырып арый һәм һыу өҫтөндә йөҙөп йөрөгән бүрәнәләрҙе йыйып, үҙенә бәләкәй генә ҡыуыш ҡороп ала. Ләкин берҙән-бер көндө утрау буйлап ашарлыҡ ризыҡ эҙләп йөрөп ҡайтһа, ҡыуышын ут ялҡыны ялмап алған. Кеше ҡайғыға ҡала, асыуланып, илап, күккә ҡарап ҡысҡыра: "Аллам, ниңә мине былай язаларға булдың?"**

**Иртән кеше ярға яҡынлашыусы карап тауышына уяныпкитә. "Һеҙ мине нисек эҙләп таптығыҙ?" - ти ул ҡотҡарыусыларына. "Беҙ һинең ут яғып, сигнал биреүеңде шәйләп ҡалдыҡ", - ти ҡотҡарыусылар…**

**Әйләнә-тирәлә барыһы ла насар булғанда күңел төшөнкөлөгөнә бирелеүе бик еңел ул. Ләкин нисек кенә ауыр булғанда ла Хоҙай беҙҙең менән бергә икәненә ышанырға кәрәк. Шуны бел: әгәр ҙә һинең бәләкәй генә ҡыуышың янып китә икән, бының Хоҙай мәрхәмәтен саҡырыусы сигнал булыуы ла ихтимал бит".**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

1 582218 911006 21042

Баш мөхәррир:
Гөлфиә ЯНБАЕВА.
Мөхәррират:
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1
Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru
E-mail: kiskeufa@mail.ru
БР «Республика Башкортостан» нәшриәт йорто ДУП филиалы - «Башҡортостан» республика нәшриәтендә баҫылды (450079, БР, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

Телефондар:
Баш мөхәррир 253-25-44
Хәбәрселәр 252-39-99, 246-03-24
Матбуғат таратыу 246-03-23
Ҡул ҡуйыу ваҡыты -
15 октябрь 17 сәғәт 30 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте 253-25-44, 246-03-23 телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
«Киске Өфө»нөң индексы – ПР905
Тиражы - 3250
Заказ - 1237